ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9-15 ғинуар (һыуығай) 2021

№2 (940)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ул балыҡтар донъяһын өйрәнә**



6-7

**Беҙҙең халыҡ...**

был ерҙәргә таш булып һеңгән



8-9

**Үҙ исеме менән атау оятмы,**

был һүҙҙәрҙе ләғәтебеҙҙән алырғамы?



9

**Ҡорттоң ҡотон һаҡла,**

йәки Бөрйәнгә ҡорт алырға тип килгән бераүҙең һөйләгәндәренән



11-12

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Яңы йылда ла "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыуығыҙ өсөн сикһеҙ рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Йәнәшәгеҙҙә, таныш-тоноштарығыҙ араһында баҫмабыҙға яҙылып өлгөрмәгәндәр булһа, иҫкәртә күрегеҙ: 17 ғинуарға тиклем яҙылып өлгөрһәләр, уны февралдән алдыра башлаясаҡтар. ПР905 индекслы баҫмабыҙ биш айға 604 һум 65 тингә төшәсәк. Бергә булайыҡ!***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Ҡала кешеләре, һис һүҙһеҙ, ауыл фермерҙарының йә шәхси хужалыҡтарҙа етештерелгән аҙыҡ-түлеккә мохтаж. Тик ауыл етештереүсеһенең түккән көсөн, тырышлығын баһалаймы улар? Нисек йәшәй, эшләй, алдындағы проблемаларҙы нисек еңеп сыға ауыл фермеры һәм ауыл етештереүсеһе, күҙҙән үткәрәйек әле...***

***Радмил АБДРАФИКОВ, Бишбүләк районы:*** Миңә 60 йәш, фермер булып 30 йыл "эшләйем". Ағын да, ҡараһын да күп күрҙем. Хужалығымды тартып алырға тырышыуҙар ҙа булды, ярҙам итәм тигән һылтау менән төпһөҙ кәмәгә ултыртып китеүселәр ҙә осраны. Айырыуса эште башлаған йылдарҙа төрлө хәлгә тарый инем, хәҙер ундайҙарҙы бер ҡараштан асыҡлайым. Бер һыйыр менән эш башланым, уның ағын эшкәртеп һатып, тағы бер һыйыр һатып алдым. Шулай һыйырҙар башын 50-гә еткерҙем. Хәҙер мал-тыуар менән улым шөғөлләнә, ә минең иңемдә күберәк баҫыу, иген, техника, яғыулыҡ, орлоҡ, ашлыҡты һатыу кеүек эштәр. Йәшермәйем, эшебеҙ ауыр. Малдар тәләфләнеүе, игендең уңмауы һирәк күренеш түгел. Ләкин хөкүмәт тарафынан да ярҙам күреп торабыҙ. Фермерҙарҙы ҡарай хөкүмәт. Ләкин бер кем дә алдыңа алып килеп һалмай: йөрөргә, белергә, һорарға, ҡайһы саҡта талап итергә лә әҙер булырға тейеш фермер үҙенә тейешле дәүләт ярҙамын алыу өсөн. "Ҡул ҡулды йыуа" икәне лә бер кемгә лә сер түгел, был аҙымға барырға ла тура килә.

Документтар менән хәҙер килен эшләй, элек кеше яллап яфалана инем. Отчет-фәләнен ваҡытында тапшырып, һалымдарын һуңлатмай ғына түләп барыу ҙа көс, ваҡыт, оҫталыҡ һәм егәрлек талап итә. Бер һалымыңды һуңлаттыңмы, ҡосаҡ-ҡосаҡ ҡағыҙҙар килеп тә төшә. Ул проблемалар артынан йөрөү миңә кәрәкме ни? Юҡ, әлбиттә. Шуға был йәһәттән талап ҡаты: һуңлатмаҫҡа, онотмаҫҡа, бөтә ҡағыҙҙарҙа ла тәртип һаҡларға.

Эш хаҡын түләүҙең дә үҙ үҙенсәлектәре бар. Тотош ғаиләләр һиңә ҡарап тора икән, уларҙы һынатырға ярамай. Беҙҙең хужалыҡтағы төп принцип: һалымдарҙы һәм эш хаҡын ваҡытында түләү. "Эш хаҡы әҙ", тип, сит яҡтарға сығып китеүселәрҙең күбеһе кире килә. Бер кемде лә ситкә типмәйем, "сығып киткәйнең бит әле", тигән хәбәр әйтмәйем, эш урыны булһа, эшкә алам. Тормош бөгөн менән генә бөтмәй: бөгөн мин уларға кәрәк, иртәгә мин уларға мохтаж булыуым бар.

Ауыл хужалығы тармағында үҙ эшен асырға теләүселәргә лә һәр ваҡыт ярҙам ҡулы һуҙырға тырышам. Кемгә һүҙ ярҙамы менән, кемгә финанс терәк була алһам, күңел күтәрелеп китә. Тыуған еребеҙҙә үҙебеҙҙең егеттәр һәм ҡыҙҙар ауыл хужалығы эшмәкәрлеге менән күберәк шөғөлләнһендәр ине, тигән теләктәмен.

## ӘЙҘӘГЕҘ...

# МАҠСАТЛЫ БУЛАЙЫҠ!

**Беҙ тормошто планлаштырып, алға маҡсат ҡуйып йәшәп өйрәнмәгәнбеҙ. Яҙмыштан уҙмыш юҡ, маңлайыңа ни яҙылған, шуны күрәһең, тигән кеүегерәк күнеүгә, барыһын үҙ яйына ҡуйыуға яраҡлашҡанбыҙ. Сөнки был иң еңел юл. Ағым ыңғайына ғына китеп барыу ағымға ҡаршы көрәшеү йәки ярға сығырға тырышыу түгел бит һуң.**



Бер етди генә оло кешенең өйөндә "Теләктәр картаһы" күреп, бик ҡаты аптырағайным. Шундай юҡ-барға ышанамы икән, һүрәттәр яһап, яҙып ҡуйғандан ғына теләктәр ҡабул буламы икән, тип уйлағайным. Һәм ул кеше миңә теләктәренең ысынлап та бер-бер артлы үтәлә килеүен аңлатты. Баҡтиһәң, ул теләктәрен тормошҡа ашырыу өсөн маҡсатлы эшләй ҙә икән.

Бөгөнгө йәмғиәт интернетта хөкүмәтте, Путинды һәм байҙарҙы әрләп ултырырға ярата. Хатта был ҡайһыларҙың иң төп шөғөлө лә. Сөнки улар үҙҙәре бер ерҙә лә эшләмәй, ҡыҙыҡһыныуҙары юҡ, кәсеп белмәйҙәр, уҡырға, өйрәнергә теләмәйҙәр. Уларҙың бер ниндәй ҙә маҡсаты юҡ. Бәғзеләр аҡсалы эштәре, яҡшы йорттары, ҡиммәтле машиналары булмағанға икенсе берәүҙәр ғәйепле тип уйлай һәм шул асыу һәм үпкә менән йәшәй бирәләр. Ә асылда берәүҙең уңышһыҙлығы өсөн икенселәр ғәйепле түгел. Ул бары үҙе һәм тик үҙе генә хужа үҙ яҙмышына. Бөгөнгө тормошта эшләйем, уҡыйым, өйрәнәм һәм тырышам тиһәң, бер ҡаршылыҡ та юҡ. Бары маҡсат һәм ынтылыш ҡына кәрәк. Бар бит шундай маҡсатлы кешеләр һәм күп тә улар. Бына шундайҙарҙан өлгө алырға, балаларҙы йәштән маҡсатлы итеп үҫтереүгә өлгәшергә кәрәк.

Маҡсатлы булыу һәм бер нигә ҡарамай, шул маҡсаттарға ынтылыу өсөн иң беренсе сиратта ныҡлы һаулыҡ һәм рухи көс кәрәк. Быны өсөн иң төп ярҙамсы - спорт. Сәләмәтлекте лә нығыта, күңелде лә сыныҡтыра. Унан һуң, белем алыуҙы ла алға ҡуйыу зарур. Беҙ белемһеҙ диңгеҙҙәге елкәнһеҙ карап һымаҡ. Ныҡышмал булыу ҙа мөһим. Бер еңелеү, бер уңышһыҙлыҡ, бер хата юлды кире борор сәбәп түгел икәнде аңлау ҙа кәрәк. Хатта ун хата аша үткәндә лә маҡсаттарҙан, хыялдарҙан баш тартырға ярамай. Туҡтауһыҙ хәрәкәт итеү, туҡтауһыҙ башты һәм тәнде эшләтеп тотоу, алға ҡуйылғанға бөтөн булмыш менән ынтылыу үҙ емештәрен бирмәй ҡалмай. Яҡшы йәшәргә, яҡшыға өлгәшергә теләйһең икән - тырыш.

Яңы йылға пландар төҙөп алырға, йыл ағымында үтәргә тейеш эштәрҙе яҙып ҡуйырға, улар өҫтөндә уйланырға, йәғни маҡсатлы йәшәргә тәҡдим итәм. Шулай итеп ҡарағыҙ әле, унан йыл аҙағында йомғаҡ яһарһығыҙ. Күрерһегеҙ, маҡсатлы йәшәһәгеҙ, күпкә ижади, тулы һәм сағыу буласаҡ тормошоғоҙ.

**Ләйлә СИРАЕВА.**

12+

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ



# ҺЕҘ БЕҘГӘ КӘРӘК

**Хаҡлы ялға сығыуыма оҙаҡламай бер йыл тула. Бик әүҙем, аралашыусан, сәйәхәт итергә яратыусы кеше булараҡ, былтырғы карантиндың тәүге көндәре минең өсөн үтә ауыр булды. Төшөнкөлөккә бирелеүҙән өйөм тулып ятҡан гәзит һәм журналдар "ҡотҡарҙы". Атай-әсәйемдән килгән ғәҙәт буйынса, йыл да тиҫтәләгән милли баҫмаға яҙылам һәм һәр номерын йыйып бара инем. Һәм бына карантин мәлендә "сумып" китеп уҡыным уларҙың барыһын да. Бигерәк тә "Киске Өфө"нөң һәр һанын ентекләп тағы бер уҡып сыҡтым. Бөгөн ошо баҫма тураһындағы фекерҙәремде еткергем килә.**

Баҫма гәзиттең шуныһы яҡшы - интернеттағы кеүек, бер мәҡәләне уҡыр өсөн әллә нисә реклама ҡарайһы түгел. Фекерҙең осон юғалтмайынса ғына мәҡәләне аҙағына тиклем ентекләп уҡып сығыу үҙе бер кинәнес. Кәрәк тип тапҡанда, ҡайта-ҡайта уҡырға була, ғаилә ағзалары менән уҡылған мәҡәлә тураһында фекер алышыу мөмкинлеге лә киң. Ә "Киске Өфө" былдай мөмкинлекте гәзит уҡыусыһына йәлләмәйенсә бирә. Баҫма битендәге бер әйбер ҙә "һанды тултырыу өсөн генә", йәки "бөтәһе лә ошо турала яҙа, беҙгә лә артта ҡалырға ярамай" тигән принциптан сығып баҫылмай. Күләмле мәҡәлә булһынмы ул, бәләкәй генә әйберме - барыһы ла гәзит уҡыусының иғтибарын яулай һәм, иң мөһиме, уны уйланырға мәжбүр итә.

Иң яратҡан рубрикаларымдың береһе - әңгәмәләр. Үҙенең һөнәрендә балыҡ кеүек йөҙгән белгестәрҙе табыу һәм улар менән шундай йөкмәткеле әңгәмәләр уҙғарыуығыҙ өсөн тик рәхмәттәр яуһын үҙегеҙгә. Илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә йәшәүсе аҫыл егет-ҡыҙҙарыбыҙҙың фекерҙәре тос, донъяға ҡараштары һәр саҡ ыңғай, кәңәштәре төплө булыуы менән күңелемә яҡын.

Шулай уҡ йәштәр тураһындағы мәҡәләләрҙе көтөп алам. Ҡатмарлы һәм ҡатлаулы йәшәйешебеҙҙә юғалып ҡалмайынса, күкрәк киреп алға атлаған, үҙҙәрен төрлө өлкәлә танытҡан йәштәребеҙ булыуы менән бәхетлебеҙ. Ә һеҙ - "Киске Өфө"ләр - уларҙы күрә белеүегеҙ һәм бөтөн милләттәштәребеҙгә танытыуығыҙ менән мәртәбәлеһегеҙ. Шуға күрә, алдағы көндәрҙә йәш ғалим, фермер, эшҡыуар, уҡытыусы һәм башҡа һөнәр эйәләре булған йәштәр тураһындағы мәҡәләләр тағы ла йышыраҡ баҫылыр, тип ышанам.

Һуңғы ваҡытта республикабыҙҙа туризмға ҙур иғтибар бирелә. "Киске Өфө" биттәрендә ошо йүнәлештәге мәҡәлә, әңгәмә, белешмәләрҙе лә күрергә теләр инем. Барыһы өсөн дә ҡыҙыҡлы темалыр был, тип уйлайым. Бәлки, кемеһененңдер эшмәкәрлеге тураһында уҡыу берәүгә туризм менән шөғөлләнә башлауға этәргес көс булыр ине.

Өләсәйем: "Бер бит ҡағыҙ яҙғансы, бер кәбән бесән һалам мин", - тиер ине. Хеҙмәтегеҙ еңелдән түгел. Артабан да матур йөкмәтке менән ҡыуандырығыҙ уҡыусыларығыҙҙы. Һеҙҙең хеҙмәт беҙгә кәрәк һәм терәк.

**Гөлсимә НӘҘЕРШИНА.**
**Сибай ҡалаһы.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Ҡала кешеләре, һис һүҙһеҙ, ауыл фермерҙарының йә шәхси хужалыҡтарҙа етештерелгән аҙыҡ-түлеккә мохтаж. Тик ауыл етештереүсеһенең тукҡән көсөн, тырышлығын баһалаймы улар? Нисек йәшәй, эшләй, алдындағы проблемаларҙы нисек еңеп сыға ауыл фермеры һәм ауыл етештереүсеһе, күҙҙән үткәрәйек әле...***

***Рәсимә АҪЫЛҒУЖИНА, Мәләүез районы:*** Ауылда эш урындары юҡ. Ваҡытында гөрләп торған колхозда хәҙер унлап кеше эшләй. Мәләүез ҡалаһына йөрөп эшләр инең, бер-бер артлы үҫеп килгән балаларҙы ҡарарға кәрәк. Өйләнешкәс, баш ҡалала ла, Мәләүездә лә йәшәнек, бер ҡайҙа ла үҙ урыныбыҙҙы тапманыҡ. Иремдең тыуған ауылында төпләнгәс, эштәребеҙ йәйләнде. Тәүҙә ике һыйыр көттөк, һөттө һәм ҡаймаҡты баҙарҙа торған алыпһатарҙарға алып барып тапшырып йөрөнөм. Яйлап, һыйырҙар һанын арттырҙыҡ, ҡош-ҡорт үҫтереп һата башланыҡ. Бөгөн ҡурабыҙҙа 9 һыйыр, 13 башмак, 5 ат. Яҙҙан көҙгә тиклем, кәмендә, 50-шәр ҡаҙ йәки өйрәк көтәбеҙ, бер миҙгелдә ике тапҡыр алтышар тиҫтә бройлер үҫтереп һатабыҙ. Көҙөн башмаҡтарҙы йә һуйып, йәки тереләй һатып ебәрәбеҙ. Мин көн аша Мәләүезгә йөрөп һөт һәм ҡаймаҡ һатам. Был йылдар дауамында үҙемдең даими һатып алыусыларым барлыҡҡа килде. Ғөмүмән, көнө-төнө баш күтәрмәй эшләйбеҙ һәм етеш, матур итеп йәшәйбеҙ.

Ләкин шуныһы: беҙ фермер булараҡ теркәлмәгәнбеҙ һәм быны эшләргә йыйынмайбыҙ. Сөнки был статус беҙгә яҡшы яҡтан бер нәмә лә бирмәй. Хөкүмәттән субсидия алырға мөмкин, тиерһегеҙ, ләкин унын һалым рәүешендә тағы ла күберәк китәсәген аңлатып торорға кәрәкмәйҙер. Ул һалымды алып барҙың да түләнең түгел бит әле, отчеттарын эшләргә, ә уның өсөн кеше ялларға һәм уға түләргә кәрәк. Беҙгә бөгөнгө көндәге статусыбыҙ ҡулай һәм рәсмиләштереүҙе кәрәкле тип тапмайбыҙ. Хужалығыбыҙ ҙа фермер булып теркәлерлек ҙурҙар иҫәбендә түгел. Тормошобоҙ менән ҡәнәғәтбеҙ. Хәҙер балалар ҙа ҡул араһына инде, эшебеҙ күпкә еңеләйҙе.

## БӘХӘС МАЙҘАНЫ

# БАШҠОРТ БАЙЫҺА, БИСӘ АЛҺЫНМЫ?

**Хәлил Һөйөндөковтың "Башҡорт байыһа, бисә аламы?" тигән мәҡәләһенә эйәреп, үҙ фекерҙәремде яҙмаҡсы булдым. Әлиә Сәйғәфәрованың ошондай уҡ баш аҫтындағы тәүге мәҡәләһендә, әлбиттә, тема бер аҙ икенсерәк мәғәнәлә ине. Хәлил ағай яуапты һүрәткә ҡарап, үҙенсәрәк үҙгәртеп, икенсерәк юҫыҡҡа күсереп яҙған. Шулай ҙа зыян юҡ, бик ҡыҙыҡ тема ҡалҡып сыҡҡан.**



Автор был яҙғандары өсөн күптәр әрләр инде, тиһә лә, мин ошо фекерҙе яҡлайым. Мин булдыҡлы, сәләмәт ир-аттың ике ҡатын алыуына ирек ҡуйырға кәрәк, тигән фекерҙә. Ағай әйтмешләй, күптәр барыбер икенсе ҡатындар менән йәшерен ғүмер итә. Ир кешенең һаулығы яҡшы, дәрте бар һәм ул ике ҡатынды ла тигеҙ ҡарай ала икән, ниңә быға рөхсәт бирмәҫкә?

Поликлиникаларҙа, банкта, автобустарҙа йәки башҡа йәмәғәт урындарында йыш ҡына 45-55 йәштәрҙәге парҙарҙы күҙәтәм. Махсус күҙәткәндән дә түгел, ә күҙгә ташланып торғанды һүҙгә генә күсерәм. Иллелә ҡатын-ҡыҙ иренә ҡарағанда күпкә таушалған, ул инәй булған инде. Ә ағайҙар әле төҙ һынлы, үткен ҡарашлы, ҡатын-ҡыҙға иғтибар итеүсән. Был йәштә апайҙарҙың ҡыҙыҡһыныуы ирҙә түгел, уларҙың иғтибары балаларға, ейәндәргә күскән. Ирҙәрҙең әле дәрте бар, бар ғына ла түгел, күптәрҙең ғаиләлә ошо тәңгәлдә низағтар ҙа сыға. Ир әле дәртле, уға ҡатын-ҡыҙ йылыһы, наҙы талап ителә, ул әле ҡабат-ҡабат атай була ала. Ә апайҙарҙың "поезд ушел". Әгәр ошо тәңгәлдә аҡыл менән эш ителһә һәм хәлле, мөмкинлеге еткәндәргә ике ҡатынлылыҡ рөхсәт ителһә, милләт һанын арттырыу ҙа бермә-бер алға китер ине.

Ир-егеттең ҡеүәтен тулыһынса файҙаланыу, уларҙың сәләмәтлеген дә һаҡлау, гонаһтан да аралау булыр ине был. Юғиһә, бөгөн ирҙәр иллегә етер-етмәҫтән бабай роленә инергә мәжбүр. Быға уларҙы үҙҙәре инәй булып алған ҡатындары мәжбүр итә. Асылда, был йәштә ағайҙар әле йәш ҡатын менән хис-тойғоларын яңыртып яңынан йәшәй ҙә, балалар тыуҙыра ла, йәш энергияһын ҡабул итеп һәм йәшәреп, шул балаларын күтәрә лә ала. Икенсе ҡатынлы булыу унда стимул уята, маҡсатлы итә, көс-ҡөҙрәт өҫтәй һәм ғүмерен дә бермә-бер арттырыр ине.

Икенсе яҡтан, кейәүгә сыҡмай ҡалған 30-35 йәшлек ҡатын-ҡыҙҙарҙың да проблемаһы хәл ителер ине. Ҡатындар 35-тән үтһә, барыбер әсәй булғылары килә һәм кемдән булһа ла бала табып ҡалырға тырыша. Ә был осраҡта ул ир ҡатыны булып бала таба һәм балаһы ла атайлы була. Осраҡлы кешенән бала тапҡансы, берәүҙең икенсе ҡатыны булып бала үҫтереү күпкә яҡшыраҡ түгелме ни? Бөгөн бит инде ҡатын-ҡыҙ ҙа ирҙәр елкәһенә генә менеп ултыра торған түгел, донъя йөгөн ирҙәр менән ҡуша тарта, хатта уларҙан да шәп тарта әле. Шунлыҡтан, был хәлдә ир бүлешеү бер кемде лә бер-береһенән артыҡ ҡулландырып ҡуймаясаҡ, минеңсә.

Хәлил ағайҙың дин күҙлегенән сығып, матур ғына итеп аңлатҡанына мин ошондай реаль тәҡдимде лә ҡушыр инем. Һәм ул әйткәнсә, барыһының да ҡуш ҡуллап риза булырына өмөт итмәйем. Шулай ҙа, уйланырға урын бар. Башҡорт байыһа, ысынлап та бисә алһын ул.

**Әлфиә ЗИННӘТУЛЛИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2020 йылдың октябрендә Радий Хәбиров иң яҡшы муниципалитеттарҙы билдәләү өсөн конкурс уҙғарыу тәртибе һәм рейтинг төҙөү методикаһы тураһында указға ҡул ҡуйғайны. Еңеү яулаған муниципалитеттар иғлан ителде. Улар араһында Нефтекама, Өфө, Стәрлетамаҡ, Ағиҙел, Сибай, Салауат ҡалалары һәм Бөрйән, Благовещен, Борай, Мәләүез, Илеш, Нуриман, Яңауыл, Баҡалы, Бәләбәй, Тәтешле, Дүртөйлө һәм Әлшәй райондары бар.

✓Башҡортостанда пенсионерҙар өсөн йәшәү минимумы дәүмәле 956 һумға артты. Хәҙер ул 8 649 һум урынына 9 605 һум тәшкил итә. Республика Башлығы тейешле законға ҡул ҡуйған. Пенсионерҙарға йәшәү минимумы пенсияға социаль өҫтәмә түләү билдәләү өсөн ҡулланыла. Уға пенсияһының күләме төбәктә пенсионер өсөн билдәләнгән йәшәү минимумы дәүмәленән түбәнерәк тәшкил иткән эшләмәгән пенсионерҙар иҫәп тоторға хоҡуҡлы.

✓Владимир Путин 2021 йылды Фән һәм технологиялар йылы тип иғлан итеү тәҡдимен индерҙе. "Тап бөгөн, донъя кимәлендәге юғары уҡыу йорто, Мәскәү дәүләт университетының попечителдәр советы майҙансығында, 2021 йылды Рәсәйҙә Фән һәм технологиялар йылы тип иғлан итеү тураһында әйткем килә", - тип белдерҙе Президент Мәскәү дәүләт университетының попечителдәр советы ултырышында.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова тармаҡтың 2020 йылда эшмәкәрлеге буйынса отчет бирҙе. Республика Башлығы Радий Хәбиров йомғаҡ яһап, Башҡорт опера һәм балет театры 2020 йылдың мартында И. Абдразаҡов ҡуйған Дж. Вердиҙың "Аттила" операһын Мәскәүҙәге Ҙур театрҙың тарихи сәхнәһендә күрһәтеүен хәтергә төшөрҙө һәм быны йолаға әйләндерергә кәрәк, тип өҫтәне.

✓Республика етәксеһе Радий Хәбиров оператив кәңәшмә барышында Башҡортостан Хөкүмәтенә "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһын яҡшылап уйларға ҡушты. "Ауыл ерендә бигерәк аҙ эш хаҡы алып эшләгән мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре өсөн "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" кеүегерәк дәртләндереү сараһын уйларға кәрәк, беҙ был хаҡта фекер алышҡаныбыҙ бар", - тине ул һәм ауылдарҙа мәҙәниәт йорттары һанын арттырыу, төҙөлөшкә ҙур иғтибар бүлеү кәрәклеген дә өҫтәне.

*✓ Ҡуртымға ер биләмәһе алдым. Ләкин уны кәртәләү өсөн рөхсәт кәрәк булыуын һәм уны эшләтеү ниндәй мәшәҡәттәр тыуҙырасағын бер ҙә алдан күҙаллай алмағанмын. Кәрәкле ҡултамғаларҙы йыйыр өсөн ике ай тирәһе йөрөнөм.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР

# ХӘЙЕР ҺОРАШЫУСЫЛАР...



## ярҙамдан баш тарта

**Өфөлә даими рәүештә урамдарҙа хәйер һорашып ултырған йәки йөрөгән инвалидтарҙы, оло йәштәге граждандарҙы, шулай уҡ асарбаҡтарҙы йыш күрергә тура килә. Асыҡлай башлаһаң, уларҙы йә фатирҙарынан туғандары ҡыуып сығарған, йә бәгзеләрҙең мәкерле ауына эләгеп, фатирынан ҡолаҡ ҡаҡҡан була. Граждандар был әҙәмдәрҙә йәлләп, нисек тә булһа ярҙам күрһәтергә тырыша, әммә ҡайһы бер осраҡта уларҙың тарихы кешеләрҙә йәлләү тыуҙырыу өсөн уйлап сығарылған матур хикәйәләү генә булып ҡуя.**

Башҡортостан Республикаһының Ғаиләү, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының Социаль инфраструктураны үҫтереү һәм инвалидтарҙы интеграциялау идарлығы начальнигы Булат Дәүләтханов "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына социаль хеҙмәттәрҙең анығ бәхетһеҙлеккә тарыған кешеләргә ниндәй ярҙам күрһәтә алыуҙары менән таныштыра. "Төрлө хәлдәр булыуы мөмкин. Һәр мәлдә айырым ҡарарға кәрәк, әммә бында иң мөһиме - кеше үҙе уға ярҙам итеүҙәренә әҙерме? Һуңғы ваҡытта йәмғиәттә "изгелек эшләргә теләүселәр" күбәйҙе. Улар хәйер һорашыусы берәй ҡартты күрә лә, социаль селтәрҙәрҙә: "Ярҙам кәрәк! Ҡайҙа социаль хеҙмәткәрҙәр?" - тип саң ҡаға башлай. Беҙ мотлаҡ ошо урынға сығып, ошо кешене табабыҙ, ярҙам тәҡдим итәбеҙ, әммә улар йыш ҡына: "Рәхмәт, минә һеҙҙең хеҙмәтегеҙ кәрәкмәй!" - тип баш тарта. Бик йыш бындай хәлдәр граждандарҙың ярҙамдан баш тартыуы менән тамамлана", - ти ул.

Ғәмәлдә иһә, һәр сигнал буйынса эш алып барыла: мохтажлыҡты асыҡлау буйынса хеҙмәт урынға бара, кешене таба, уны ошондай хәл-торошта күрһәтелгән ярҙам ысулдары менән таныштыра. "Өфөлә Колгуевский урамында Йәшәү урыны билдәле булмағандар өсөн ярҙам үҙәге эшләй. Ул республика статусындағы учреждение, күп асарбаҡтар был урында белә. Бында кешеләрҙә документтары, теркәлеүҙәре булмаған осраҡта ла ҡабул итәләр. Учреждениела йоҡлау урыны, ашарға ҡоро паек бирелә. Бынан тыш, үҙәк белгестәре кешенең ауыр хәлгә тарыуының сәбәптәрен асыҡлай, уларҙы хәл итергә ярҙамлаша: документтарын тергеҙергә булыша (күп осраҡта бер нисә тапҡыр - **Ред.**), пенсия, инвалидлыҡ юллаша, туғандарын таба йәки мөмкин булһа, туғанлыҡ ептәрен эҙләп табыуҙа ярҙам итә. Яҙмыш һынауы һөҙөмтәһендә урамда ҡалған хеҙмәткә яраҡлылыҡ ваҡытынан олораҡ йәштәгеләргә үҙәк белгестәре документтар тултырырға һәм медицина тикшереүе үтеп, артабан интернаттарға урынлашырға ярҙам итә", - ти Булат Дәүләтханов.

Социаль хеҙмәтләндереүгә мохтажлыҡты таныу мәсьәләләре менән республикала "Ғаилә" үҙәктәре, уларҙың бүлексәләре, шулай уҡ Халыҡты социаль яҡлау хеҙмәтләндереү республика үҙәге шөғөлләнә. Өйҙә, стационарҙа һәм ярымстационар формаларҙа социаль хеҙмәтләндереү тәҡдим ителә. "Бик йыш хәйер һорашыусылар ярҙамдан баш тарта һәм үҙҙәрен барыһы ла ҡәнәғәтләндереүен, шулай итеп өҫтәмә аҡса эшләүҙәрен таный. Беҙ Ленин урамында хәйер һорашыусыларға йоҡлау урыны, продукция, башҡа ярҙам тәҡдим иттек, әммә улар, "аҡса бирегеҙ, ҡалғанын мин үҙем...", тип яуаплай. Әгәр кешене кемдер хәйер һорашырға мәжбүр итһә, был инде беҙҙең яуаплылыҡ зонаһына инмәй. Сөнки ҙур ҡалаларҙа хәйер һорашыусылар кураторҙарының ҡара базары булыуы бер кемгә лә сер түгел. Ул Өфөлә лә бар икән, быны ведомство-ара кимәлдә хәл итергә кәрәк. Бында граждандарҙың хоҡуғы боҙола, хатта мәжбүр итеү ҙә булыуы мөмкин. Әлегә: "Минә ярҙам итегеҙ, мине ошонан тартып сығарығыҙ!" - тигән бер генә осраҡты ла иҫләмәйем, - ти министрлыҡ вәкиле. - Баш ҡалала ярҙам алырға теләгән кешеләр өсөн проблемалар юҡ. Урындар ҙа бар, сират та юҡ. Һәр кемдең яҙмышын тамырынан үҙгәртеү өсөн мөмкинлеге бар, ә беҙ уларға ярҙам итергә әҙер".

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Әгәр гражданин кешегә хоҡуҡ һаҡлау органдарының түгел, ысынлап та социаль хеҙмәткәрҙәрҙең ярҙамы кәрәк тип иҫәпләй икән, ул +7 (347) 286-51-06 йәки +7 (347) 286-51-05 телефондары буйынса Халыҡты социаль хеҙмәтләндереү республика үҙәгенә шылтыратып хәбәр итә ала. БР Хеҙмәт министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, былтыр 9 айҙа 63 йортһоҙ граждандың документтары тергеҙелгән, 34 кеше эшкә урынлаштырылған, оло йәштәге ете кеше халыҡты социаль хеҙмәтләндереү учреждениеларына урынлаштырылған, 14 кешегә пенсия тәғәйенләнгән, 21 асарбаҡҡа инвалидлыҡ юллауҙа ярҙам күрһәтелгән. Ә инде хәйер һорашыуға килгәндә, бындай "эшмәкәрлек" - "урамда йәки башҡа йәмәғәт урындарында граждандарға күрәҙәлек итеү, теләнселәү уларҙың ихтыярынан тыш (ҡулдарынан тотоу, кейеменән эләктереп алыу, шәхси әйберҙәренә ҡағылыу һ.б.) кеүек ҡылыҡтар, әгәр был Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтендә ҡаралған хоҡуҡ боҙоуҙар тыуҙырмаһа" БР административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексының 13.3 статьяһына ярашлы баһаланыуы мөмкин. Статья буйынса граждандарға 500-1000 һум күләмендә штраф һалыу ҡарала. Яуаплылыҡҡа тарттырыу тураһында республика ҡала һәм райондарының административ комиссиялары ҡарар сығара.**

**Ксения КАЛИНИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Ҡала кешеләре, һис һүҙһеҙ, ауыл фермерҙарының йә шәхси хужалыҡтарҙа етештерелгән аҙыҡ-түлеккә мохтаж. Тик ауыл етештереүсеһенең тыҡҡан көсөн, тырышлығын баһалаймы улар? Нисек йәшәй, эшләй, алдындағы проблемаларҙы нисек еңеп сыға ауыл фермеры һәм ауыл етештереүсеһе, кемдән уткәрәйек әле...***

***Ришат ӘҒЛИУЛЛИН, Әбйәлил районы:*** Фермерлыҡ эшенә тотоноуыма бер йыл тирәһе. Ауылда тыуып үҫкән кеше булараҡ, был эштең бер ауырлығы ла булмаҫ кеүек ине. Физик көс талап иткән эштең, ысынлап та, ауырлығын күрмәйем, тик ҡағыҙ эшенә бәйле мәсьәләләрҙең осона барып сығыу ҙур көс талап итә. Миҫал өсөн, һыйырҙарға ҡышҡылыҡҡа бесән эшләү маҡсатында ҡуртымға ер биләмәһе алдым. Ләкин уны кәртәләү өсөн рөхсәт кәрәк булыуын һәм уны эшләтеү ниндәй мәшәҡәттәр тыуҙырасағын бер ҙә алдан күҙаллай алмағанмын.

Кәрәкле ҡултамғаларҙы йыйыр өсөн ике ай тирәһе район үҙәгенә йөрөнөм. Рөхсәт ҡағыҙҙары алыуға ундағы бесәнде мал тапап, ашап бөткән ине инде. Быйыл кәртәләп өлгөрҙөм, икенсе йыл бындай хәлгә тарымаҫмын, тип ышанам. Шулай уҡ отчеттар менән әлегә "дуҫ" түгелмен, ауыр бирелә, эшемде тоткарлай.

Үҙемдең 6 баш һыйыр малым бар, башмаҡтар һәм һарыҡтар байтаҡ. Һөттө тәүҙә район үҙәгенә алып барып һаттым. Башта урамда торҙом, унан айына 5 мең һум түләп, ҡуртымға киоск алдым. Көн һайын утыҙлап 1,5 литрлы шешәлә һөт һатыуға сығарҙым, шулай уҡ ҡаймаҡ, ҡорот, май тәҡдим иттем. Эшем бер көндә уңышлы була, төшкә тиклем һатып бөтөп ҡайтып та китә инем, ә икенсе көнөнә күпмелер өлөшө тиҙ генә һатыла ла, сауҙа туктай ҙа ҡуя. Һөт тә, башҡа һөт аҙыктары ла ҡояшта әсей, ирей башлай, тауар үҙенең матурлығын юғалта. Шулай ҙа килеүен килгәс, һатып бөтөп ҡайтҡы килә. Һуңғараҡ, төштән һуңға ҡалһынға, хаҡты 10-15 һумға төшөрөп һата башланым. Тик минең был аҙыгымы шулай уҡ баҙарға үҙҙәренең һөт-ҡаймағын һатыуға алып сыҡҡан апайҙарға оҡшаманы. "Һин ни эшләп һөттөң хаҡын төшөрәһең?", "Һиненң осһоҙайтыуыңды көтөп йөрөп беҙҙекен алмайҙар", тип әйтә-әрләй башлағастар, тағы ла уйландым. Берҙән, үҙемдең файҙаны ла уйлайым, икенсенән, әҙме-күпме аҡса эшләйем тип, ниндәй ҙур көс түгеп һөттәрен эшкәртеп алып сыҡҡан апайҙарға ла аяҡ салғы килмәй. Өсөнсөнән, киоск өсөн айына 5 мең һум түләү ҙә кеҫәгә һуға икәнен аңланым.

Шуға күрә, инәйемдең кәңәшенән тотоп, һөттө "городка" (Әбйәлилдәр Магнитогорск ҡалаһын шулай тип йөрөтә) алып барып тапшыра башланым. Урамда ултырған алыпһатарҙар менән һөйләшеп килештем дә, һөттө күмәртәләп уларға тапшырам. Әлбиттә, был осраҡта һөттө осһоҙораҡ ҡа һатам, ләкин бөтә сығым һәм килемдәрҙе һанап ҡараһаң, был ысул минең өсөн табышлыраҡ: урын өсөн түләмәйем, һөт ҡойор өсөн махсус пластик шешәләр һатып алмайым (ике мискә һатып алдым да, алмаш-тилмәш шуларҙы ҡалдырам да китәм), ҡаймаҡ һәм май эшләтеп, кәләште һәм әсәйҙе ыҙалатмайым, ауылдаштар көн һайын ҡалаға йөрөгәнемде белгәс, ул-был йомоштарын әйтеп ебәрә йәки үҙҙәре ултырып бара, әлбиттә, бушҡа түгел. Хужалыҡта эшләр өсөн көнөм бушап ҡалды, был да үҙенең ыңғай мәлдәрен бирә.

Ниндәйҙер ҙур һығымталар эшләр өсөн тәжрибәм әҙерәктер, тип уйлайым. Шулай ҙа был эшемдә ташларға йыйынмайым, тырышҡанда, бөтәһен дә йәйгә һалырға булыр, тип ышанам. Һыйырҙарға ҡуш итеп шулай уҡ аттар торорға хыялланам, йомортҡа һатырға ла уй бар һәм ҡуяндар үрсетергә теләйем.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итеүенсә, яңы йыл каникулдарынан һуң, 11 ғинуарҙан бөтә уҡыусылар ҙа мәктәпкә йөрөй башларға мөмкин. "Яҙғы осорҙо лайыҡлы үтеү өсөн дезинфекция үткәрергә, медицина инспекторҙары эшен ойошторорға һәм дистанцион белем биреүҙе камиллаштырыуҙа дауам итергә кәрәк", - тине Радий Фәрит улы.

✓2021 йылдан республикала 3-7 йәшлек балаларға түләүҙәр тәртибе үҙгәрә. 1 ғинуарҙан ошо категорияға ҡараған ғаиләләр арттырылған күләмдә пособие алырға хоҡуҡлы. Арттырылған күләмдәге пособие "коронавирус түләүҙәренән" һуң да ярлылыҡ сигендә йәшәгән, йәғни йән башына уртаса килеме йәшәү минимумынан кәмерәк булған балалы ғаиләләргә бирелә. Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан әйтеүҙәренсә, быйыл бындай ғаиләләр йәшәү минимумына ярашлы (10 мең һумға яҡын) ала башлай.

✓Республикала яңы коронавирус инфекцияны шарттарында эшләгән медицина хеҙмәткәрҙәренә аҡсалата түләү күләме икеләтә арттырылды. Башҡортостан Хөкүмәтенең тейешле ҡарарында билдәләнеүенсә, табиптарға смена өсөн 700 һум урынына - 1 400, урта медицина персоналына 350 урынына - 700, кесе медицина персоналына 150 урынына 350 һум түләнә, тиелә документта. Үҙенсәлекле климатлы урындарҙа түләүҙәр өсөн район коэффициенты иҫәпләнә. Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ошо маҡсатҡа субсидия бүлә.

✓2020 йылда Башҡортостан халыҡтары телдәрендә "Ер һүҙе / Онлайн" Халыҡ-ара цифрлы проект сиктәрендә 35-тән артыҡ художестволы һәм документаль фильм төшөрөлгән. Башҡортостан Башлығы грантына тормошҡа ашырылған проект 18-ҙән 65 йәшкә тиклемге һәр теләүсегә кинорежиссура нигеҙҙәренә онлайн төшөнөү һәм үҙ фильмын төшөрөү мөмкинлеге биргән. Конкурсҡа 140 тирәһе ғариза килгән, шуларҙың 80-не һайлап алынған, 50 сценарий яҙылған. Ҡатнашыусыларҙың фильмдары февралгә тиклем социаль селтәрҙәрҙә даими сығарып барыла, ти ойоштороусылар.

✓Башҡортостанда "БИТ" стена һәм иҙәнгә ҡуйыла торған электротехник корпустар етештереү заводы эшләй башланы. Ике йылда "Элком" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте Өфө районы Зубов ауылы янында төҙөлгән яңы заводҡа 650 миллион һум аҡса һалды. 2023 йылға - 209-ға тиклем яңы юғары етештереүсәнле эш урыны булдырыу, 2026 йылда проект ҡеүәтенә сығыу планлаштырыла.

ҠЫҪҠАСА

# АЙНЫТҠЫСТАР ЭШ БАШЛАЙ

✓ **Рәсәйҙә айныҡтыҡыстар системаһын тергеҙергә хәл ителде. Дәүләт Думаһы депутаттары тейешле закон ҡабул итте.** Тәүге уҡыуҙа документ уҙған йылдың ноябрендә үк хупланды, тип белдерҙе РИА Новости. Унда әйтелгәнсә, урындағы властарҙың "йәмәғәт урындарында исерек йөрөгән кешеләргә ярҙам күрһәтеү" вәкәләте барлыҡҡа килә, шул иҫәптән төбәктәргә махсус учреждениеларҙың эшмәкәрлеген ойоштороп ҡарарға кәрәк. Айныҡтыҡыстар дәүләт-шәхси һәм муниципаль-шәхси партнерлыҡ тураһында килешеүҙәр нигеҙендә булдырыла. Һаулыҡ һаҡлау, Хеҙмәт һәм Эске эштәр министрлыҡтары ошондай учреждениеларҙың эшмәкәрлеген ойоштороу ҡағиҙәләрен әҙерләргә тейеш.

✓ **Башҡортостандың транспорт һәм юл хужалығы министры Алан Марзаев 2020 йылдың яҡынса йомғаҡтары хаҡында доклады ваҡытында республика етәксеһенең һорауына яуап бирә алманы.** "Өфөлә "пазиктар" ҡасан юҡҡа сығыр?" - тип ҡыҙыҡһынды Радий Хәбиров. "Әлегә яуап бирергә әҙер түгелмен", - тине республиканың Транспорт министрлығы етәксеһе. Чиновниктың доклады аҙағында Радий Хәбиров баш ҡалала "пазик"тар булмаҫҡа тейешлеген билдәләне. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Радий Хәбиров Башҡортостанда етәкселек итә башлағас, транспорт реформаһын үткәреү һәм йәмәғәт транспорты системаһын яңыртыу бурысын ҡуйҙы. Тап шул саҡта республика Башлығы Өфөнө Техас менән сағыштырғайны. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, конкурс буйынса һайлап алыуҙың ҡайһы бер талаптарына тап килмәү арҡаһында республика йәмәғәт транспортын яңыртыуҙың федераль программаһына инмәне.

✓ **2021 йылдан республикала 3-7 йәшлек балаларға түләүҙәр тәртибе үҙгәрә. 1 гинуарҙан ошо категорияға ҡараған ғаиләләр арттырылған күләмдә пособие алырға хоҡуҡлы. Был хаҡта республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы башлығы Ленара Иванова хәбәр итте.** Арттырылған күләмдәге пособие "коронавирус түләүҙәренән" һуң да ярлылыҡ сигендә йәшәгән йәғни йән башына уртаса килеме йәшәү минимумынан кәмерәк булған балалы ғаиләләргә бирелә. Ленара Иванова Business FM радиостанцияһы эфирында әйткәнсә, әгәр хәҙер аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә йәшәү минимумының яртыһын түләһәләр (биш мең һум самаһы), киләһе йылдан иһә бындай ғаиләләр йәшәү минимумына ярашлы (10 мең һумға яҡын) ала башлай.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КӨС ҺЫНАШТЫЛАР

**Башҡортостан спорт әҙерлеге үҙәгендә көс экстримы буйынса "Урал батыр" республика турниры үтте. Пандемияға бәйле, сараға ни бары 50 генә тамашасы индерелде, турнир социаль селтәрҙәрҙә тура эфирҙа күрһәтелде. Ярыш барышын Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡараны.**



Ярышта Башҡортостандан, Ханты-Манси автономиялы округынан, Мәскәүҙән, Мурманскиҙан, Липецк, Пенза, Силәбе өлкәләренән алдан һайлау үткән атлеттар ҡатнашты. Программала биш дисциплина булды: "Батыр алымы", бүрәнә күтәреү, "Фермер прогулкаһы", кантовка, стандағы автомобилде күтәреү. Сараның инициаторы һәм алып барыусыһы, "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе" турнирының дүрт тапҡыр еңеүсеһе - Эльбрус Нигмәтуллин. Стронгмен - спорттың көс ҡулланылған төрө. Спортсылар йөк машинаһының тәгәрмәсе, автомобилдәр, газ баллоны һ.б. үҙенсәлекле снарядтар ҡулланып күнегеүҙәр башҡара. Бындай күнекмәләр күп тапҡыр ҡабатлауҙан, иң ҙур ауырлыҡты күтәреүҙән йәки елкәнә ауырлыҡ һалып билдәле араны тиҙлеккә үтеүҙән тора. Был спортта билдәле сикләүҙәр юҡ, һәр ярышта стронгменға яңы күнекмәләр һәм яңы үҙенсәлектәр тәҡдим итергә мөмкин. "Башҡортостан Башлығы Радий Фәрит улына, республиканың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығына минең идеяны күтәреп алғандары, ойоштороуҙа ярҙам итеүҙәре өсөн рәхмәт белдерәм, - тине Эльбрус Ниғмәтуллин. - Бөгөн барлыҡ спортсылар ҙа феноменаль һөҙөмтәләр күрһәтте, бер кем дә имгәнмәне. Беҙ беренсе тапҡыр Рәсәйҙә тиңе булмаған "Батыр алымы" дисциплинаһын күрһәттек. Снарядты мин ике йыл үҙ ҡулдарым менән эшләнем". "Урал батыр" көс экстримы буйынса республика турниры еңеүсеһе тип Белгородтан 23 йәшлек Давид Шамей танылды. Икенсе һәм өсөнсө урынды Мәскәүҙән Максим Дворецкий һәм Дмитрий Логунов яуланы.

"Быйылғы йылда пандемия ғына түгел, бик күп матур саралар ҙа күп булды. Рәсәйҙең иң көслө кешеһе Эльбрус Ниғмәтуллин Өфөгә күсенде һәм сәләмәтлекте, көстө пропагандалай. Бөгөн ул көс экстримы буйынса ҡыҙыҡлы "Урал батыр" республика турнирын үткәрҙе. Физкультураны, спорттың этник төрҙәрен, башҡорт уйындарын һәм Рәсәй халыҡтарының ярыштарын пропагандалайбыҙ. Шулай итеп, пандемияға ҡарап тормай, барыбер алға барабыҙ. Барығыҙға ла сәләмәтлек", - тип социаль селтәрҙәрҙә үҙенең тәьсораттары менән бүлеште Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# ЯҢЫ ЗАКОН

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законының 7-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проекты әҙерләнде.**

Был закон проекты республикала Башҡортостан халыҡтары телдәрен өйрәнеү, һаҡлау һәм үҫтереү буйынса этнолингвистик үҙәк булдырыуҙы күҙ уңында тота. Ул етди ғилми-тикшеренеү эше, шул иҫәптән бай фольклор материалдарын өйрәнеү, шулай уҡ методик программалар әҙерләү менән шөғөлләнәсәк. Парламенттың Мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте һәм спорт буйынса комитеты ҡарамағындағы мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса эксперт советтарының берлектәге ултырышында яңы структураның форматы һәм бурыстары тураһында һүҙ барҙы. "Эксперттар 90-сы йылдар уртаһында ябылған Милли мәғариф мәсьәләләре институтын яңынан тергеҙеү фекере яҡлы. Беҙҙә теоретик лингвистика менән шөғөлләнгән ойошмалар, үҙ йүнәлешендә эш алып барған юғары уҡыу йорттары бар. Әммә туған телдәрҙе үҫтереү өсөн беҙгә был процесты ғилми яҡтан ғына түгел, программалы-методик яҡтан тәьмин итеүҙе лә үҙ өҫтөнә аласаҡ структура кәрәк. Һөҙөмтәле уҡытыу өсөн сифатлы методик әсбаптар һәм дәреслектәр, цифрлы материалдар әҙерләү өсөн яҡшы платформа кәрәк. Тел - аралашыу сараһы ғына түгел, ул халыҡтың мәҙәниәте нигеҙе, милли һыҙаты һәм донъяға ҡарашы сағылышы. Туған телдәрҙе һаҡлап, беҙ Башҡортостандың милли үҙенсәлеген, уның этномәҙәни күп төрлөлөгөн һаҡлайбыҙ",- тине Константин Толкачев.

# ЗАМАНҒА ЯРАШЛЫ...

**Башҡортостанда полилингваль мәктәптәр селтәрен киңәйтеү дауам итә. Тәүге өс полилингваль мәктәп Өфөлә һәм Стәрлетамаҡта асылды. Унда 4 мең тирәһе уҡыусы уҡый, 200-гә яҡын педагог эшләй.**

Дүртенсе мәктәпте Нефтекама ҡалаһында асыу планлаштырыла. Был хаҡта Башҡортостан мәғариф һәм фән министры Хөкүмәттә үткән оператив кәңәшмәлә билдәләне. Республика Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса, 2021 йылда ошондай мәктәптәр Хәйбулла, Баймаҡ райондарында ла асыласаҡ. 2024 йылға тиклем ундай мәктәптәр тағы ла 10 ҡалала һәм 5 район үҙәгендә ойоштороласаҡ. "Әбйәлил, Салауат, Белорет, Иглин райондарында, Учалы, Ишембай, Туймазы, Дүртөйлә, Сибай ҡалаларында мәктәптәр төҙөләсәк һәм асыласаҡ. 11 полилингваль мәктәптә интернат төҙөү ҡаралған. Был республика районҡалаларынан ғына түгел, ә Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән дә уҡыусыларҙы уҡытыу мөмкинлеген бирәсәк", - тине министр.

Полилингваль мәктәптәрҙә урыҫ теле, туған тел һәм бер нисә сит тел өйрәнелә. Мәктәптәр "тулы көн" режимында эшләй, уҡыусыларға шәхси үҫеш өсөн мөмкинлектәр бирелә, улар төрлө түңәрәктә, секцияла шөғөлләнә. Башҡортостандың полилингваль мәктәптәре - киң, ҙур, матур биналарҙа урынлашҡан, матди-техник йәһәттән яҡшы йыһазландырылған заманса белем биреү ойошмалары. Бындай мәктәптәрҙә министр, сәйәсмән, депутат, мәҙәниәт, фән эшмәкәрҙәре, спортсылар кеүек республикабыҙҙың билдәле шәхестәре ҡатнашҡан "Унышҡа юл" проекты бойомға ашырыла. Улар уҡыусылар менән осраша, оҫталыҡ дәрестәре үткәрә.

# КҮСМӘ МЕДИЦИНА ЯРҘАМЫ

**Башҡортостан Башлығы республика медицина учреждениеларының баш табиптарына 13 еңел автомобиль һәм күсмә поликлиника асҡыстарын тапшырҙы. Яңы йыл байрамдарынан һуң "Сәләмәтлек поездары" алыҫта урынлашҡан райондарға юллана.**

"КАМАЗ" базаһындағы күсмә поликлиника Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһына беркетелә. УЗИ-ҡарамалдары менән гинекология кабинеты, лаборатория диагностикаһы өсөн медицина техникаһы менән йыһазландырылған офтальмология, оториноларингология, стоматология кабинеттары - мобиль медицина комплексының бүлмәләре бар. Бынан тыш, Өфөнөң балалар поликлиникаларына һәм дауаханаларына, Республика СПИД һәм йоғошло сирҙәр менән көрәш үҙәгенә, Октябрьский һәм Нефтекама ҡала дауаханаларына 11 "Лада Ларгус" машинаһы тапшырылды. Улар ярҙамында табиптар ваҡытында ашығыс медицина ярҙамы күрһәтергә, шулай уҡ лабораторияларға биоматериал тапшырырға мөмкин. Ике "Лада Веста" автомобилен Республика балалар клиник дауаханаһы һәм Стәрлетамаҡтың 2-се дауаханаһы алды. Улар паллиатив медицина ярҙамының күсмә патронаж бригадалары өсөн тәғәйенләнгән.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Яңы йыл алдынан Өфө хакимиәтендә "Вьюговей-2021" фестиваленең бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Сара ун йылдан ашыу уҙғарыла. Фестиваль йомғаҡтары буйынса "Боҙло ҡала" номинацияһында Орджоникидзе районының боҙ ҡаласығы беренсе урынды яуланы. "Әкиәт геройы" номинацияһында Вадим Рысаевтың "Кар королеваһы" скульптураһы икенсе урынға лайыҡ булды."Йыл символы" номинацияһында өсөнсө урынды иһә Фәнис Ҡурмашевтың "Үгеҙ" скульптураһы алды.

✓Өфөлә 14 рәхсәтһеҙ шыуыу урыны асыҡланған. Дим мототрассаһында (Баланов, 1), "Торатау" Конгресс-холы, Олимпик парк (Менделеев урамы, 160/5), Еңеү паркы, Йылы күленең ағып төшкән каналы янында шундай урындар бар. Ҡала хакимиәте вәкиле һүҙҙәренсә, шыуыу өсөн хәүефле урындарҙа мәғлүмәт таҡталары ҡуйылған. Халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барыла.

✓Өфө ҡала хакимиәте "Жилстройинвест" төҙөлөш ойошмаһына Ғафури паркы эргәһендә күп ҡатлы йорттар төҙөргә рөхсәт бирмәне. Октябрҙә "Голос РБ" сайтында ошо төҙөлөшкә ҡаршы петиция баҫылып, уға мендән ашыу кеше ҡул ҡуйғайны. Проблемаға шунда уҡ яңы ойошторолған Ҡала төҙөлөшө советының беренсе ултырышында БР Башлығы Радий Хәбиров иғтибар йүнәлтте. Ҡала хакимиәте белдереүенсә, төҙөүсегә беренсе ер участкаһында төҙөлөш эштәре алып барырға - хоҡуҡ, ә икенсе участкаға бөтөнләй рөхсәт бирелмәгән.

✓Өфөлә 2020 йылдың 11 айында 429 ВИЧ-инфекция осрағы асыҡланған, был уҙған йылдың ошо уҡ осорона ҡарағанда 207 осраҡҡа аҙыраҡ, тип хәбәр итте Республика СПИД-ты һәм йоғошло ауырыуҙарҙы иҫкәртеү, уларға ҡаршы көрәш үҙәгенең баш табибы Рафаэль Яппаров. 31 октябргә Өфөлә ВИЧ-инфекция диагнозы менән 7 487 кеше иҫәпләнгән. Өфө биләмәһендә ауырыуҙың уртаса күрһәткесе 100 мең кешегә 37,8 тәшкил иткән. Күрһәткес үткән йылдың 11 айына ҡарағанда 32,5 процентҡа түбәнерәк.

✓ТурСтат порталы төҙөгән рейтинг буйынса Рәсәйҙә иң бейек ысын яңы йыл шыршыһы ҡуйылған ҡалалар араһында Өфөнөң Ленин майҙанындағы 30 метрлыҡ ҡыпшыҡай беренсе урында. Унау араһына тағы Мәскәү, Санкт-Петербург, Сыктывкар, Ярославль өлкәһенең Углич, Липецк өлкәһенең Данков, Владимир, Брянск, Череповец һәм Пенза ҡалалары ингән. Рәсәйҙең күп ҡалаларында яһалма шырша ҡуйылған, иң бейеге Красноярскиҙа.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# УРАЛ БАТЫРҒА ЛА...

## һәйкәл ҡуйыласаҡ



**Ҡала хакимиәтендә видеоконференция форматында үткән оператив кәңәшмәлә Өфө ҡәлғәһе ойошторолоуға 450 йыл тулыу мәсьәләһе ҡаралды.**

Тарихтан мәғлүм булыуынса, Өфө ҡалаһын бик күп этаптарға бүлеп ҡарарға мөмкин, ә инде уның тап Өфө ҡәлғәһе булып төҙөлөүенә 2024 йылда 450 йыл тула. Ошо осорҙа ул илдең эре сәнәғәт, эшлекле һәм спорт үҙәктәренең береһенә, эре халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй сараларын үткәреү урынына әүерелде, Рәсәй иҡтисадына ҙур өлөш индерә. Әлеге ваҡытта ҡала хакимиәтендә Ойоштороу комитеты төҙөлгән һәм байрам сараларын әҙерләү һәм үткәреү буйынса эш төркөмө раҫланған, саралар планы проекты эшләнгән. Әйткәндәй, Өфө ҡәлғә-ҡалаһының 450 йыллыҡ юбилейын үткәреү буйынса федераль кимәлдә лә ойоштороу комитеты төҙөлә, яҡын арала бындай ойошма республика кимәлендә лә булдырыласаҡ.

Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Ойоштороу комитеты әҙерләгән саралар планы проектына төҙәкләндереү, ҡаланың тышҡы йөҙөн камиллаштырыу, социаль һәм инфраструктура объекттары төҙөү, ҡала өсөн мөһим мәсьәләләрҙә хәл итеү, уның халҡы, тарихи урындары, объекттары һәм ваҡиғалар менән бәйле саралар һәм проекттар планын тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән саралар инә. 32 объект буйынса проект-смета документацияһы әҙер. Шулай уҡ инвесторҙар иҫәбенә төҙөү ҡуҙаллаған объекттар исемлеге лә бар, уларҙың һаны арта бара. Һәм, әлбиттә, күп һанлы Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлдәге мәҙәни-спорт саралары ла планлаштырыла. Мәҫәлән, "Евразия йөрәге", "Көмөш Аҡбуҙат" халыҡ-ара фестивалдәре, Көрәш буйынса донъя кубогы (2024 йылдың июне), "Соцветие дружбы" милли мәҙәниәттәр балалар байрамы һәм башҡалар. "Шулай уҡ Өфөлә 2024 йылдың февраль-мартына планлаштырылған Ҡышҡы Халыҡ-ара балалар уйындарын һәм "Рәсәй - спорт державаһы" форумын үткәреү хоҡуғы өсөн көрәшеп ҡараясаҡбыҙ", - тине хакимиәт башлығы урынбаҫары Николай Фадеев. Уның белдереүенсә, 2024 йылға тиклем ҡуйылырға тейешле һәйкәлдәр һәм арт-объекттарҙың исемлеге төҙөлгән. Улар араһында Өфө губернаһының беренсе губернаторы Григорий Аксаков, Черниковка ҡалаһының баш архитекторы Маргарита Куприянова, яҙыусылар Сергей Довлатов, Ярослав Гашек, Наполеон яуы геройы Евграф Гладышев, поляр штурман Валериан Альбанов, "Урал батыр" эпосының төп геройы Урал батыр һәм башҡалар бар.

КӨНАУАЗ

# ЮЛДА ТУҠТАП...



**Башҡортостанда 2024 йылға тиклем Юл буйы сервисын үҫтереү концепцияһы раҫланды. Уға ярашлы, дүрт йылда трасса һәм юл буйҙарында 1 мең яңы объект барлыҡҡа киләсәк. Уларҙа ял итеп, тамаҡ ялғап, автомобилде ремонтлап, кәрәккәндә, ҡунып һәм башҡа ихтыяждарҙы үтәп сығырға мөмкин буласаҡ.**

Башҡортостан юл оҙонлоғо буйынса Рәсәйҙә икенсе урын биләй - 50 меңгә яҡын километр. Был - Ер экваторы буйлап, тағы Мәскәүҙән Владивостокка йәки Нефтекаманан Аҡъярға тиклем 65 тапҡыр йөрөп килгән кеүек. Шул уҡ ваҡытта юл буйы сервисы объекттары бик аҙ. Өҫтәүенә, улар тигеҙ бүленмәгән. Мәҫәлән, Өфө районында улар - 83, ә Бишбүләк һәм Ишембайҙа - берәр генә. Анализдан күренеүенсә, төп мәсьәлә - бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡтың юл сервисы менән ҡыҙыҡһынмауында: участканы әҙерләү, коммуникация һуҙыу, трассанан төшкән урынды төҙәкләндереү, шулай уҡ документтарҙы килешеү бизнесты бик ҡиммәткә төшә. Шуға күрә һуңғы йылдарҙа төп инвестор сифатында эре нефть компаниялары ғына сығыш яһаны.

Үҙенең кафеһын, ҡунаҡханаһын асырға теләгәндәр өсөн бер нисә бер төрлө, йәғни типовой проект эшләнде. Унда кафе, мини-маркет, ҡунаҡхана, автосервис, йәрминкә майҙансығы, ял өсөн беседка инә. Уларҙың барыһында ла, архитектура күренешенән алып, бинаны планлаштырыу, интерьер биҙәлешенә тиклем, бөтә нәмә ҡаралған. Стилистикаһы милли айдентиканы (стилде) иҫәпкә алып, алдан бәләкәй эшҡыуарлыҡ вәкилдәре менән фекер алышып эшләнде. Берҙәм атамаһы юҡ. Сауҙа министрлығы тауыш биреү ойоштороу юлы менән ошондай варианттар һайланды: "БашҡортоСтанция №96" (номер Өфөгә тиклемге араны күрһәтә), "Ҡурай-Драйв", "Вдороге02", "Аҡ юл", "Сота", "Юлдаш", "Юлсы", "Земля Курая", "Тирмә", "Башкирская сказка", "Башкирский очаг", "В тени курая", "Тәмле", "Легенды Башкирии", "Алтын", "Башҡорт ихатаһы", "Тирмә", "Ҡыҙыл таң", "Ҡурай", "Урал Батыр". Был директива түгел, файҙаланырға мөмкин булған һәм кешеләрҙең күңеленә ятҡан идеялар ғына. Типовой проекты ҡулланырғамы-юҡмы - һеҙҙең хоҡуҡта, бер кем дә мәжбүрләмәйәсәк. Әммә уларҙа ике мөһим өҫтөнлөк бар. Беренсенән, ул бушлай, йәғни һеҙгә проект эшләтеү өсөн йөҙәр мең йәки миллиондарҙан һум аҡса сығарырға тура килмәйәсәк. Икенсенән, туристар өсөн берҙәм дизайн - сифат һәм хәүефһеҙлек күрһәткесе.

**Дәүләттән ниндәй ярҙам тейеш?**

- Әгәр һеҙ 25-тән кәм булмаған эш урыны булдыраһығыҙ икән, торг үткәрмәйенсә генә ер участкаһы бирелә.

- Инфраструктураны (юл һалыу, һыу, газ, электр үткәреү) төҙөүгә киткән сығым (30 миллион һумға тиклем, әммә сығымдың 50 процентынан күберәк түгел) компенсацияланә.

- Төньяҡ-көнсығыш һәм Урал аръяғы райондары өсөн проектҡа 10 миллиондан ашыу, ҡалғандарға 50 миллион һум аҡса тотонһағыҙ - һалым льготалары ҡарала.

- Әлеге ваҡытта республика властарға ҡайҙа яңы кемпинг йәки кафе төҙөргә мөмкин булған участкаларҙың генераль схемаһын әҙерләй.

**Эшҡыуарҙар быға ниндәй мөнәсәбәттә?**

Ҡыҙыҡһыныусылар бар. Әле Башҡортостандың Сауҙа һәм хеҙмәт министрлығына 33 инвестор ғариза биргән, шуның 11-е республика Башлығы Радий Хәбиров үткәргән "Инвестиция сәғәте"ндә ҡаралды. Эшҡыуарҙар дөйөм суммаһы 5 миллиард һумлыҡ 50-нән ашыу яңы объект төҙөргә әҙерләнә.

**Һорау тыуһа, ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?**

Сауҙа һәм хеҙмәт министрлығында юл сервисын булдырыу һәм модернизациялау буйынса "ҡыҙыу линия" эшләй. Уның телефоны: +7(347) 218-09-93, 218-18-61. Эш режимы - иртәнге 9-ҙан киске 6-ға тиклем. Башҡортостан инвестиция порталында "Инвестиция" йәки "Эшҡыуарлыҡ" сәғәттәренә заявка бирергә мөмкин.

ҠЫҪҠАСА

# ЙЫЛЫ ТУҠТАЛҠАЛАР...

✓ **Башҡортостандың баш ҡалаһында урамдарҙа йәмәғәт транспорты туҡталышында яңы туҡталҡалар ҡуйыу буйынса эш дауам итә. Ошо көндәрҙә Ҡунаҡһарай туҡталышында (Киров урамы йүнәлешендә) беренсе "йылы" туҡталҡа барлыҡҡа килде. Уның фасадын башҡорт орнаменты биҙәй.** Өфө ҡала хакимиәтенең Транспорт һәм элемтә идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, тиҙҙән шундай туҡталҡалар Башҡорт дәүләт аграр университеты (Минһажев урамы йүнәлешендә) һәм Галле ҡалаһы исемендәге урам (СССР-ҙың 50 йыллығы исемендәге урам йүнәлешендә) йәмәғәт транспорты туҡталыштарында барлыҡҡа киләсәк. Заманса күп функциялы ябыҡ типтағы туҡталҡалар инфраҡыҙыл йылытҡыстар, йәмәғәт транспортының килеү ваҡытын күрһәткән табло, бушлай Wi-Fi, USB-порт, светодиод яҡтыртыу, "хәүеф төймәһе" менән йыһазландырылған. Бынан тыш, вандаллыҡ ҡылынмаһын өсөн уларҙа видеокүҙәтеү ҡуйылған. Һуңғы йылдарҙа Өфөлә транспорт инфраструктураһын үҫтереүгә һәм нығытыуға ҙур иғтибар бирелә. Бөгөнгә баш ҡала биләмәһендә барлығы 135 "аҡыллы" туҡталҡа бар.

✓ **"Мега" сауҙа үҙәге эргәһендә 23 мең квадрат метр тәшкил иткән элекке парковка урынында яңы йәмәғәт киңлеге асылды.** Был парк - Өфөлә иң ҙурҙарҙың береһе. Бындай парктар тағы ла Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Ростовта, Екатеринбургта, Ҡаҙанда бар. Төҙөлөшкә 350 миллион һум инвестиция һалынған. Паркка йылына Өфөнән генә түгел, тотош республиканан 600 мең кеше килеүе ҡуҙаллана. Унда йәйәүлеләр маршруты, ял урыны, балалар майҙансығы, кафеһы булған йәйге терраса барлыҡҡа килде. Йәйгеһен ял итеүселәр шарлауығы булған быуа менән һоҡлана аласаҡ. Ҡалалағы беренсе скейтһауыт райдерҙарға үҙенең оҫталығын арттырыуға булышлыҡ итәсәк. Паркта оҙон ҡойроҡло аждаһа рәүешендәге үҙенсәлекле балалар майҙансығы бар. Ул тәбиғи материалдарҙан - ағастан, металдан яһалған. Әле паркта дүрт тау эшләй, янып тороусы фигуралар һәм шыршы ҡуйылған.

✓ **"Торатау" Конгресс-холы эргәһендә яңы мәктәп автобустары асҡыстарын тапшырыу тантанаһы үтте. Өфөнөң 105-се гимназияһы, 147-се, 132-се мәктәптәре һәм Муса Гәрәев исемендәге Өфө мәктәп-интернаты ла яңы автобуслы булды.** Автобустар "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә һәм транспорт саралары яңыртыу буйынса дәүләт программаһына ярашлы алынған. Улар хәүефһеҙлек ҡайыштары, пассажирҙар ингән ишектә баҫҡыс, тиҙлекте сикләү ҡоралмалы, тауыш көсәйтеү ҡоралмалы, артҡа киткәндә автоматик сигнал биреү, ике яҡлы бәйләнеш, тахограф һәм ГЛОНАСС системаһы менән йыһазландырылған. БР мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин яңы автобустарҙың белем биреү ойошмаларына Яңы йыл алдынан ҙур бүләк булыуын һәм белем биреү учреждениеларының автопарклары тулыһынса яңыртыласағын, 10 йыл ҡулланылған автобустарҙың яңыларына алмаштырыласағын белдерҙе. Нуғай, Самохваловка, ауылдарында, Яркий биҫтәһендә йәшәүсе балалар мәктәптәргә яңы автобустарҙа йөрөйәсәк.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Тире ауырыуҙары

❖ Эренле тире ауырыуҙарынан имән ҡайыры һәм ҡылыс үлән (аир) тамыры файҙалы. Уларҙы ваҡлап, 10-ар грамын үлсәп алырға һәм өҫтөнә 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға. Парҙа 10 минут тоторға, шунан һыуытырға һәм һөҙөргә. Төнгә шешектәр сыҡҡанда компресс рәүешендә ҡулланырға.

## Йөрәк сирҙәре

❖ Йөрәктәге физик көмсәлектәр, йөрәк өйәнәге, ҡан баҫымы күтәрелгәндә, йөрәк-ҡан тамырҙары неврозы булғанда файҙалы халыҡ дауаһы: 4 ҡалаҡ арыҫлан ҡойроғо үләненә (пустырник) ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм талғын утта 5 минут тоторға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1/3 стакан итеп эсергә.

❖ 100 грамм сәгәлдәрҙә ҡырғыстан үткәреп, ярты литр ҡоҙоҡ йәки шишмә һыуы ҡойорға. Йөрәктәге физик көмсәлектәр булғанда көнөнә 3 тапҡыр ярты̆шар стакан эсергә.

❖ Йөрәк склерозы булғанда 200 грамм ваҡланған миләш ҡайырына ярты литр һыу ҡойоп, талғын утта ярты сәғәт тоторға, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

## Ҡоро йүтәл

❖ Майонез банкаһы балға 1 балғалаҡ имбир онтағы ҡушып, талғын утта 4-5 сәғәт ҡайнатырға, шунан һыуытырға. Ҡатҡас, өлөштәргә бүлергә. Был "кәнфиттәрҙе" көнөнә 3 тапҡыр берәрләп ашарға. Йүтәл яйлап бөтә. Балаларға "кәнфиттән" алда 1 балғалаҡ юл япрағы төнәтмәһен бирергә була (1 балғалаҡ юл япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп бешерергә).

## Аяҡтар тартышҡанда

❖ Һөтләгәндең (молочай) үләнен ҡайнар һыу менән бешекләп, ауыртҡан урындарға йылы үләнде һалырға. Йылы компресс яһарға. Был рәүеште төнгөлөккә дауаланыу яҡшыраҡ. Иғтибар: һөтләгән ағыулы үҫемлек, теүәл дозалау талап итә һәм оҙаҡ ваҡыт ҡулланғанда тире ҡатламын елһендерергә мөмкин.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

**✓ Башҡортостан тигәндә, күҙ алдына Өфө килә, сөнки минең бала сағым, үсмер йылдарым, йәшлегем шунда үтте. Шунан, әлбиттә, Башҡортостан менән өсөн атайымдың тыуған яғы - Темәс ауылы, Талҡаҫ күле булып хәтерҙә йәшәй.**



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

Урта Азияның төрки халыҡтарында ҡораманан тәү сиратта балалар кейеме һәм юрғандарын теккәндәр. Был ғәҙәт башҡорттарҙа ла күҙәтелә. Ф.Ф. Фәтихова мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында бала тыуғас та туғандар һәм күршеләрҙең өйҙәренән йөрөп ҡорама кисәктәре йыйып алып, сабыйға күлдәк тегеү йолаһы булған. Был күлдәк уны һаҡлауҙан тыш, киләсәк тормошонда бәхет тә килтерә, тип иҫәпләнгән. Беҙҙең мәғлүмәттәргә таянғанда, ҡорамаларҙы бала табыусыны һәм сабыйҙы күрергә килгән туған һәм күрше ҡатын-ҡыҙҙар алып килгән.

Ҡорамаға тәрән хөрәфәти ҡараш Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышында һаҡланған. Дим буйы һәм Урал буйы ауылдарында өсмөйөштәрҙән торған аппликация һәм мозаиканы, уларҙан эшләнгән әйберҙәрҙе лә (шаршау, юрған, түшәктәр) "бетеүсә", "бетеү" тип йөрөтәләр.

Ҡырғыҙҙарҙа һәм ҡаҙаҡтарҙа кейеҙ ҡорама-әҙерләмәләренән келәмдәр эшләү ғәҙәте булған (әҙәбиәттә был алым "инкрустация" тип һүрәтләнә). Төрлө төҫтәге ҡыя шаҡмаҡ һәм шаҡмаҡ кейеҙ киҫәктәренән йыйналған, һирәклән аппликация һәм нағыш һалынған ҡайһы бер келәмдәр текстиль ҡорамаларҙы хәтерләтә. Ҙур булмаған кейеҙ әҙерләмәләрҙән келәмдәр тегеү ысулы боронғо осрҙа көньяҡ башҡорттарына ла билдәле булған, тип фараз итергә мөмкин.

Башҡорттар, ҡаҙаҡтар һәм Урта Азия халыҡтарынан тыш, ҡорама әйберҙәр (шаршау, келәм, юрған, аҫма муҡса, түшәмдәр) нуғай һәм татарҙарҙың көнкүрешенә ингән. Волга буйы һәм Төньяҡ Кавказдағы айырым этник төркөмдәрҙә (мәсәлән, мишәрҙәрҙә, нуғайбәктәрҙә һ.б.) ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡорама менән биҙәкләнгән күлдәктәре айырыуса зауыҡлы булған. Яҡут, хакастар фабрика һәм кустарь туҡымаларҙан геометрик орнаменттар төҙөй белгән. Дөйөм алғанда иһә, Себер халыҡтарына тире кейемдәрҙә тире киҫәктәре менән биҙәү хас булған; ни бары көньяҡта малсылыҡ менән көн итеүселәр генә төҫлө тула ҡулланған.

Ҡорамаға ҡағылышлы төрки һүҙҙәр күп булһа ла, был ижад төрөн төрки халыҡтар уйлап табыуы икеле. Моғайын, ул күпкә боронғораҡтыр. Быңдай әйберҙәрҙең күплеге был күренештең Иран сығышлы булыуына ишара яһай. Шул уҡ ваҡытта ҡораманы тәшкил иткән өсмөйөштәр һәм ҡыя шаҡмаҡтар Көньяҡ-көнбайыш Азия, Һиндостан, Кавказ, Көнсығыш Европаның киң даирә халыҡтарының һынлы сәнғәтендә ныҡлы урын алған. Быңдай ижадсылыҡ башҡорт халҡының художестволы мәҙәниәтен дә тәбиғи рәүештә тулыландырған.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ӨФӨ БАШҠОРТО

**Уның биографияһы менән таныша башлағас та күҙ алдына совет заманында тын да алмай бер нисә тапҡыр ҡараған "Кеше-амфибия" киноһы килеп баҫа. Юҡ, ул Ихтиандр түгел, әммә ошо һыу аҫты донъяһы менән бәйле - биолог-ихтиолог. Тап Башҡорт дәүләт университетында ошо һөнәргә эйә булып, ул күп йылдар Европала ғилми тикшеренеүҙәр алып бара, Японияла ла эшләргә өлгөрә. Бөгөн ул Польша Фәндәр академияһының Ихтибиология һәм аквамәҙәниәт ғилми-тикшеренеү институты етәксеһе, ғалим-генетик-иммунолог Илгиз Рәшит улы. Ҡасандыр Өфө ҡалаһында тыуып, уның урамдарында тәпәй баҫып, ауа-түнә атларға өйрәнгән, ҡолап йығылып әллә күпме күҙ йәштәре түгеп үҫкән малайҙы бөгөн шулай һәр саҡ атаһының исемен ҡушып ололайҙар. Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул, тиһәләр ҙә, сит ерҙә абруй, дан ҡаҙанған милләттәштәребеҙ булыуы беҙҙең, Башҡортостанда йәшәгән башҡорттар өсөн дә ҙур мәртәбә һәм ғорурлыҡ. Бөгөн Илгиз ИРНАЗАРОВ менән уның бала сағына һәм тыуған төйәге менән бәйле ваҡиғаларға бергәләп сәйәхәт ҡылайыҡ.**



# УЛ БАЛЫҠТАР ДОНЪЯҺЫН ӨЙРӘНӘ

**➔ Кеше ниндәй генә дан-дәрәжәле булмаһын, уның өсөн тыуған ере - алтын бишек булып ҡала. Тыуған яҡ тигәндә, күҙ алдығыҙға тәү сиратта кемдәр һәм нимәләр баҫа?**

- Иң элек, әлбиттә, атай-әсәй, апайым, дуҫтарым. Атай-әсәйем, Аллаға шөкөр, әле лә иҫән-һау, 80 йәште үтһәләр ҙә һаман да яҡшы формалалар, үҙҙәрен ҡарайҙар, уларға оҙон ғүмер теләйем.

Башҡортостанға ҡайтҡан һайын үҙемдә тыуған йортона ҡайтҡан малай кеүек хис итәм. Атайым социология профессоры булды, тәүҙә - Өфө дәүләт авиация техник институтында, һуңынан Башҡорт дәүләт университетында уҡытты. Әсәйем дә уҡытыусы, ул Өфө полиграфия техникумында эшләне. Апайым - медик. Һәр ваҡыт ватсап аша һөйләшеп торабыҙ, шуға мин Өфөлә барған ваҡиғалар менән һәр саҡ хәбәрҙар.

Әлбиттә, Башҡортостан тигәндә, күҙ алдына Өфө килә, сөнки минең бала сағым, үсмер йылдарым, йәшлегем шунда үтте. Шунан, әлбиттә, Башҡортостан минең өсөн атайымдың тыуған яғы - өләсәйем йәшәгән Темәс ауылы, Талҡаҫ күле булып хәтерҙә йәшәй.

Павловканы ла бик яратам. Мәктәптә уҡығанда физкультура уҡытыусыһы Владимир Мартенс ошо һыуһаҡлағыс ярында лагерь ойоштора торғайны. Ай ярым - ике ай беҙ яр буйында палаткаларҙа йәшәй, кәмәлә йөҙә, үҙебеҙ ашарға бешерә торғайныҡ. Павловка - ул матур бала саҡ хәтирәһе.

**➔ Беренсе тапҡыр ишетеүселәр өсөн ятыраҡ булған һөнәрегеҙҙе нисегерәк һайланығыҙ?**

- Өфөлә Фатима Мостафина исемен йөрөткән, ул замандарҙа уҡ ҡалала берҙән-бер башҡорт белем усағы булараҡ билдәлелек алған 20-се ҡала башҡорт мәктәбендә белем алдым. Шул йылда уҡ медицина йүнәлешендә юғары уҡыу йортона инергә теләгем ҙур булһа ла, конкурстан үтә алманым һәм бер йылдан һуң Башҡорт дәүләт университетының биология факультетына инеп киттем. Студент йылдарында, ғәҙәттә, ниндәй специализация һайлау тураһында артыҡ уйланып бармайһың. Курсташтарым менән мин дә ихтиологияға мөкиббән китеп, уны аңлы рәүештә һайланыҡ тип әйтә алмайым. Беҙҙе уның, тәү сиратта, тынсыу лабораторияларҙа ултырыуға ҡарағанда йәйге экспедициялары булыуы ылыҡтырҙы. Аҙаҡ



ӘЙҘӘГЕҘ...

# КИРЕ ХӘБӘР ҺӨЙЛӘМӘЙЕК

**Бөгөн интернет тулы негатив. Бында махсус шуның менән генә шөғөлләнеп ултырған халыҡ бар. Улар ниндәй ғауғала ла беренсе сиратта торалар. Атынлын белмәйенсә, кире хәбәрҙәрен теҙеп яҙып та ҡуялар. Берәй картинанан да, яңылыҡтан да, хаттан да кире фекер табып алалар һәм үҙ эсендәге ҡаралыкты сығарып һалыу яйын табалар.**

Негатив ҡына сәсеп йәшәгән кешеләр шул тиклем бәхетһеҙҙәрме икән, әллә уларҙың тормошонда бер генә лә яҡтылыҡ юҡмы - белмәйһең. Әммә улар башҡаларҙы ла шул ҡараңғылыҡҡа, агрессияға йәлеп итергә ынтылалар. Бәлки, был әҙәмдәр шундай энергетик вампирҙарҙыр, бәлки, башҡа сәбәптәре лә барҙыр...

Был тәңгәлдә һәр кем үҙе өсөн хәл итһен: кире хәбәр һөйләргәме - юҡмы? Һинең кире хәбәреңдән тыңлаусыға насар буламы-юҡмы, уныһы икенсе һорау, ә бына үҙеңә һис шикһеҙ насар була. "Була" түгел, ә "булған". Шул эсеңдә насар булғанға ла яман хәбәр һөйләп тораһың бит инде. Әгәр эсеңдә яҡшы булһа, күңелең таҙа булһа, һин белгән насар хәбәреңде лә йәшерәсәкһең, уның менән башҡаларҙың кәйефен боҙорға теләмәйәсәкһең. Шунлыҡтан, берәйһенә әймһеҙ һүҙ әйтергә теләйһең йә негатив еткерергә булаһың икән, бының инешен ҡапшап ҡара. Ни өсөн һин шулай? Һин бәхетһеҙме? Һине нимәләр улай кире холоҡло итә?

Һәр беребеҙ психолог була алмаһаҡ та, үҙ асылыбыҙҙа ғына соҡонорлоҡ халәтебеҙ бар, шулай бит? Кире хәбәр, кире ҡылыҡ, кире эштәр менән беҙ үҙебеҙҙең алға барыуҙы тотҡарлайбыҙ. Шул арҡала килешеүҙәр килеп сыҡмай, һөйләшеп-аңлашыу булмай, мөнәсәбәттәр ҡатмарлаша. Ә ыңғай һүҙ әйтергә кем ҡамасаулай беҙгә? Бер кем дә! Һәм ыңғай һүҙ, ыңғай ҡараш ҡаршы яҡтың, кешеләрҙең, йәмғиәттең, йыһандың ыңғай йөғонтоһон булдыра. Шулай итеп, әйҙәгеҙ, кире хәбәр һөйләүҙән туҡтайыҡ. Интернетта ла, өйҙә лә, йәмғиәттә лә.

**Нурия БАРЫЕВА.**

# АУЫРЫМАЙЫҠ!

**Кеше организмы Хоҙай тарафынан шундай механизм, аң, интуиция менән бүләкләнгән, ундай камил тере йән башҡаса юҡтыр. Беҙҙең берәй ағзабыҙ ауыртыр, ауырыр булһа, ул мейегә шундуҡ сигнал бирә. Күңелгә шом килеп инә. Эйе, ауырыу алдынан иң беренсе күңел һиҙҙерә. Быны бары аңлай белергә генә кәрәк.**

Мәсәлән, үпкә йә йөрәк сәнсеп алып китерҙән алда, бернисә көн, күңел төшөп, ниндәйҙер эс бошоу, шомланыу инеп оялай йәнгә. Һин шул сигналды аңғарып, үҙеңә иғтибар итергә, аҙыраҡ йәлләргә, үҙеңде аярға йәки ял итеп алырға тейешһең дә бит... Тик беҙ инде күптән организмды тыңларға, уны тойорға кәрәген онотҡанбыҙ. Беҙ үҙебеҙҙең хәлде табип белә икән тип уйлайбыҙ һәм ауырый башлаһаҡ, врачҡа төбәлеп һорау бирәбеҙ: доктор, минең нимәм ауырый?

Ҡайһы еребеҙ һәм нимәбеҙ ауырығанды белер өсөн анализдар тапшырабыҙ, диагноз көтәбеҙ һәм химик препараттар менән ауыртыныуҙарҙы баҫыу яғын ҡарайбыҙ. Асылда, тәндең (йәндең) ауырыуын беҙ үҙебеҙ ҙә асыҡлай һәм дауаһын да билдәләй алабыҙ. Тән ул йәнгә ҡылынған хилафлыҡтарҙан зыян күрә. Иң беренсе күҙгә күренеп торғандарын алайыҡ.

***✓ Сүп-сар тороп ҡалыуы насар күренеш кенә түгел, мәҫәлән, пластик та, башҡа ҡалдыҡтар ҙа балыҡтарға ем булып тора һәм уларҙың организмы аша микроэлементтар беҙҙең ашҡаҙанға ла әләгә.***

инде үҙем дә һиҙмәҫтән ихтиологияға башкөллө сумғанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым.

**➔ Ә Польшаға нисек барып юлыҡтығыҙ?**

- Студент йылдарында СССР һәм Варшава килешеүе илдәре араһында студенттарҙың йәйге лагеры ойошторола ине. Бер йылда мин ошо халыҡ-ара лагерҙа ҡатнашыуға лайыҡ булдым һәм ГДР-ға барҙым. Ошо сәйәхәтем артабанғы яҙмышымды хәл итте лә инде: шунда Польшанан килгән ҡыҙ менән таныштым, һуңынан уның менән ғаилә ҡорҙоҡ һәм мин шулай Польшаға барып сыҡтым.

**➔ Быға тиклем кеше организмының хайуандарға оҡшаш булыуынан сығып, тәжрибәләрҙе хайуандарҙа үткәрәләр, дарыуҙарҙы уларҙа һынап ҡарайҙар ине. Ә бына балыҡтар... Уларҙың генетикаһы һәм иммунологияһы менән кешенеке араһында ниндәй бәйләнеш бар?**

- Бәйләнеш бар һәм ул бик ҙур. Күҙәнәктәр кимәлендә айырмалар ул тиклем ҙур түгел. Ә инде тикшереүҙәрҙе молекулалар кимәлендә алып барһаҡ, айырма бөтөнләй юҡ тиерлек, йәғни балыҡтарҙың иммун системаһы ла кешеләрҙекеке кеүек үк. Тимәк, уларҙың патогендар менән зарарланыуы ла, елһенеүе лә бер төрлө. Шуға күрә, балыҡтарҙы өйрәнеп, уларҙан алынған мәғлүмәтте кешегә күсерергә мөмкин. Мәҫәлән, беҙ экотоксикология менән шөғөлләнәбеҙ. Кеше хужалыҡ эшмәкәрлегенә индергән һәм яландарҙы, сәсеүлектәрҙе эшкәрткән химик матдәләр ныҡлы һәм сифатлы тикшерелергә тейеш. Уларҙың хайуандар донъяһына, шул иҫәптән балыҡтарға, ахырҙа, кешегә йоғонтоһо бармы икәнен мотлаҡ ентекле белергә, асыҡларға кәрәк. Беҙ химик матдәләрҙең балыҡтарҙың организмына йоғонтоһон тикшерәбеҙ, сөнки улар, хатта аҙ ғына миҡдарҙа булғанда ла, балыҡтарға, ә һуңынан ризыҡ булараҡ кешенең өҫтәленә килеп, уға ла ҙур зыян килтереүе мөмкин. Лабораторияла сысҡандарҙа тәжрибә үткәргән кеүек, дарыуҙарҙың тәьҫирен балыҡтарҙа ла һынарға була.

Тап балыҡтарҙың генетикаһы ҡоролошо бөгөн, Covid-19 вирусы йоғонтоһо механизмын тикшереү тотош донъяла беренсе планға сыҡҡанда, бик мөһим тип уйлайым.

**➔ Яҙмышығыҙҙы беҙ күп нәмәне белмәгән һыу батшалығында йәшәүсе заттар менән бәйләп, экология проблемаһына ҡарашығыҙ үҙгәрҙеме?**

- Беҙ уны һаҡларға тейеш. Минең үҙемдең ябай ғына ҡағиҙәм бар - автомобилдә китеп барғанда ла асыҡ тәҙрәнән сүп ташламаҫҡа, һыу буйына ял итергә сыҡҡанда мотлаҡ артыбыҙҙан таҙартырға тейешбеҙ. Сүп-сар тороп ҡалыуы насар күренеш кенә түгел, мәҫәлән, пластик һәм башҡа ҡалдыҡтар балыҡтарға ем булып тора һәм уларҙың организмы аша микроэлементтар беҙҙең ашҡаҙанға ла әләгә. Йәғни яр буйында ҡалдырылған сүп-сар балыҡтарға ғына түгел, беҙгә лә зыян килтерә.

Көндәлек тормошта синтетик туҡымалар ҡулланабыҙ, химия саралары менән йыуабыҙ, һәр йыуған һайын уларҙан микротуҡымалар айырылып, һыуға әләгә. Хатта һыу таҙартыу ҡорамалдары булғанда ла уларҙы таҙартып бөтөү мөмкин түгел. Һуңынан был микротуҡымалар йылғаға, диңгеҙгә, океанға әләгә һәм, бумеранг кеүек, ризыҡ булып ҡабат беҙҙең өҫтәлдәргә әйләнеп ҡайта.

**➔ Поляктарҙың ниндәй сифаттары оҡшай? Башҡорттар менән уртаҡ яҡтары бармы?**

- Эш яратыуҙары оҡшай. Улар үҙҙәренең йорттарын, ихаталарын, газондарын тәртиптә, төҙөк тоторға тырыша, матурлыҡ яраталар. Был матурлыҡ яратыу үҙ территорияһы менән генә сикләнмәй, унан ситтә лә бөтөн нәмә матур булырға тейеш. Үҙҙәренең тарихына, ғөрөф-ғәҙәттәренә тоғролоҡ оҡшай, ата-бабаларының ҡәберҙәрен һәр саҡ тәрбиәләп торалар. Улар ҙа башҡорттар кеүек үк асыҡ. Ғөмүмән, менталитеттарыбыҙҙа уртаҡ нәмәләр байтаҡ. Шуныһы үкенесле: ҡайһы берҙә ваҡытлыса сәйәсәт һөҙөмтәһендә беҙҙе бергә бәйләп торған тәрән тамырҙар онотола...

**Гөлсәсәк ХАННАНОВА,**
**Анастасия МАМЕДОВА**
**яҙып алды.**

Мәҫәлән, эскелек, тәмәке тартыу. Ял көндәрендә, байрамдарҙа спиртлы эсемлектәр ҡулланыу ҙа үҙ көсөн һиҙҙерә организмға. Эскән, тартҡан кешеләр "ауырыйым" ти икән, был - тәбиғи. Үҙенә үҙе ағыу тәҡдим иткән һәм шунан баш тарта алмаған кеше ауырырға тейеш тә инде. Ә шул әҙәмдәрҙең дауаханаға барып, медицина белгестәрен ҡаңғыртып, ауырыу сәбәптәрен эҙләтеп йөрөүе үҙе бер ғәжәйеп хәл инде беҙҙә.

Ғәйбәттән башы сыҡмаған, башҡаларға көнләшкән, кешеләргә аҫтыртын хөсөт ҡылған, үҙенең уңышһыҙлығында, йүнһеҙлегендә икенселәрҙе ғәйепләргә ятҡандар ҙа күңелдәрен ҡаралыҡ менән ауырыта. Һәм был ҡаралыҡ яйлап-яйлап үпкә, бауыр, йөрәк кеүек ағзаларҙы зарарлай, тын алыуҙы ауырайта. Ағзаларҙы ентекле тикшертә башлаһаң, улар һау кеүек тә, ә тотош организмда ауырыу төҫө ята. Бына шундай билдәһеҙ диагноздар менән йылдар буйына ла интегә бәғзеләр.

Хайуандар ауырыһа, иң беренсе ашауҙы туҡтата. Ә беҙ һайлап-һайлап, оҡшаған аҙыҡтарҙы ҡулланырға тырышабыҙ. Йәнәһе, яҡшыраҡ туҡланһаң, ауырыу сигенә. Ана шул артыҡ ашау, аҙыҡ төрлөлөгө менән дә ауырытабыҙ икән үҙебеҙҙе. Аҙыҡ менән, кәрәкмәгән витаминдар, интернет, телевизор, әйләнә-тирәнән килгән файҙалы булмаған мәғлүмәт менән аңды томалап, тәнде аңдан айырым булған кәүҙәгә генә әйләндергәнбеҙ.

Бына ошо пандемия ваҡытында ла, ҡайһы бер кешеләр үҙҙәренең ауырырын һиҙгән. Күңелдәрендә шом, паника булған, әммә улар бының нимәнән икәнен аңлай ғына алмаған. Тәбиғәт менән бәйләнеш көслө булған, тышҡы факторҙар аңды япмаған ваҡытта, беҙҙең ата-бабалар хатта әжәл килерен дә һиҙенә алған һәм уға әҙерләнеү сараларын күргән. Халыҡ хатта аслыҡ, туфан, бәлә-ҡаза кеүек афәттәрҙе лә һиҙенә белгән. Аңдары уларҙың организмын, тәнен был стрестарға әҙерләй алған. Бөгөн, үкенескә ҡаршы, беҙҙең был һиҙгерлек, интуиция, алдан күрә белеү үҙенсәлектәре юҡҡа сығыуға барып етә яҙған.

Ғалимдар әйтеүенсә, быларҙың барыһын да кире ҡайтарып була. Кеше - бик һәләтле һәм аң хәтерен йәшерен һаҡлай белә торған тереклек эйәһе. Ул үҙендәге әллә ни төрлө мөмкинлектәрҙе уята ала. Бының өсөн йәнде таҙартып алыу һәм уны төрлө матди, мораль, идеологик баҫымдарҙан арындырырға ғына кәрәк. Тик был оҙайлы һәм ныҡышмалы хеҙмәт. Әммә була торған хәл. Шулай итеп, ауырығың килмәһә, тәнеңде тоя бел.

**Альбина ХОҘАЙҒОЛОВА.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

**Ошо заман, ҡәһәрле һуғыш менән бәйле ҡайһы бер тарихи документтарға күҙ һалайыҡ. 1942 йылдың октябрь аҙаҡтарында - ноябрь баштарында Башҡортостандан 112-се Башҡорт атлы дивизияһына ебәрелгән байрам ҡотлауында бына ниҙәр бәйән ителгән (ошо документтың нөсхәһенә ярашлы, башҡорт әҙәби теленең ул саҡта ҡабул ителгән стилистик һәм грамматик үҙенсәлектәре үҙгәртелмәйенсә бирелде):**

## БАШҠОРТ АТЛЫ ДИВИЗИЯҺЫ ВОИНДӘРЕНӘ

**Совет Башҡортостанының батыр атлылары!**

Һеҙҙе орденле Башҡортостан хеҙмәтсәндәре исеменән ҡайнар сәләм менән ҡотлайбыҙ һәм Бөйөк Октябрь Социалистик Революцияһының 25 йыллығы менән тәбрик итәбеҙ.

Ҡәҙерле иптәштәр һәм туғандар! Совет халҡы Октябрь революцияһының 25 йыллығын ҡаты һәм ҡурҡыныслы обстановкала байрам итә. Ҡоторонған дошман күп кенә мөһим ҡалаларҙы һәм райондарҙы баҫып алды һәм илебеҙҙең башҡа бик мөһим тормош үҙәктәренә яҡын бара башланы. Ул теләһә ниндәй генә хаҡҡа булһа ла бөтә совет кешеләре ятраҡан Сталинградты алырға һәм, уны алып, унан бушанған көстәрен һәм техникаһын Мәскәүгә, Ленинградҡа, Бакуға ҡаршы ташларға уйлай.

Октябрь Социалистик Революцияһының бөйөк ҡаҙаныштарына, Советтәр Союзы халҡтарының тормошона һәм иркенә үлем ҡурҡынысы килен баҫты.

Талаусы, кеше үлтереүсе немец-фашистик бандаларҙы туҡтатырға, тыуған совет ерен фашистик-немец бандаларынан таҙартырға - тыуған илдең, совет халҡының приказы шундай, Ҡыҙыл Армияның мөҡәддәс бурысы шул.

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитете һәм Башҡортостан республикаһының хөкүмәте һеҙҙең подвигтәрегеҙ менән ғорурланалар һәм башҡорт халҡының данлыҡлы улдары, үҙҙәренең тыуған иле, большевиктәр партияһы һәм совет халҡы алдындағы бурыстарын намыҫ менән аҙағына тиклем үтәйәсәктәр, тип ныҡ ышаналар.

Башҡорт патриот воиненең уйында һәр ваҡыт эйәрләнгән ат булды, был атта ул тыуған илдең дошмандарына юлбарыҫ һымаҡ ташланды.

Башҡортостан егеттәре! Туған рус халҡы менән бергә Наполеон полчищеләрен, граждандар һуғышының көньяҡ, Петроград һәм башҡа фронттарында аҡ гвардеецтәрҙе һәм интервенттәрҙе тар-мар иткән Башҡортостан атлыларының боевой традицияларын ныҡ һаҡлағыҙ һәм дауам иттерегеҙ!

Салауат Юлаевты, Шәһит Хоҙайбирдинде һәм Баһау Нуримановты тыуҙырған халҡтың героик традицияларына достоин булығыҙ!

Советтәр Союзының туған халҡтарының намыҫына, иркенә, бойондороҡһоҙлоғона ҡул һуҙған немец оккупанттарын аяуһыҙ туҡмағыҙ, ҡоторған эттәрҙе үлтергән кеүек ҡырығыҙ!

Яфаланған совет кешеләре өсөн, балаларҙың, ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм ҡарттарҙың яфаланыуҙары һәм түккән йәштәре өсөн, майор Нафиков ҡаны өсөн, атаҡлы чабан Юлтый, Салауат Ғәбитов ҡаны өсөн немец-фашист ҡәбәхәттәренән үс алығыҙ, һуғыш ҡырҙарында геройҙарса үлгән Башҡортостан егеттәрен үс алыу юмартлығы менән иҫкә алығыҙ!

Боевой иптәштәр! Һеҙҙең фронттағы геройлығығыҙ һәм үҙ-үҙегеҙҙе аямауығыҙ һеҙҙең аталарығыҙҙы һәм әсәләрегеҙҙе, ҡатындарығыҙҙы, туғандарығыҙҙы һәм һеңлеләрегеҙҙе яңы хеҙмәт подвигтәренә рухландыра, Башҡортостандың заводтарында һәм фабрикаларында, колхоздарында, совхоздарында һәм МТС-тарында фронтҡа бөтә яҡлап ярҙам итеү өсөн, Октябрь алды социалистик ярышы ҙур күтәренкелек менән бара.

Ишембай һәм Туймазы нефтселәре, Белорет металлургтары, Баймаҡ горняктәре, Өфө ҡалаһы предприятиеләренең эшселәре һәм республикабыҙҙың тимер юл эшселәре хеҙмәт героизме һәм үҙ-үҙен аямаусылыҡ өлгөләрен күрһәтәләр. Фронт өсөн продукция эшләп сығарыуҙы һаман да үҫтерә барған Өфө нефть ҡыуыу заводы, "Ишембайнефть" тресенең 1-се промыслаһы, Өфө паровоз-ремонт заводы, Н-ский завод коллективтәренә үҙ-үҙҙәрен ҡыҙғанмай эшләүҙәре өсөн Государство Оборона Комитетенең күсмә Ҡыҙыл Байраҡтары бирелде.

Башҡортостан колхозниктәре һәм колхозницалары фронтҡа һәм илгә барған һайын күберәк иген, ит һәм ауыл хужалығының башҡа продуктыларын биреү өсөн үҙ баҫыуҙарында арыу-талыуҙы белмәй эшләп, үҙенең ил алдында булған бурысын намыҫ менән үтәйҙәр.

Фронтҡа отлично әҙерләнгән резерв биреү өсөн бөтә республика күләмендә бик ҙур эш алып барыла.

Һеҙҙең семьяларығыҙ яҡын хәстәрлек һәм иғтибар менән солғап алынған. Үҙегеҙҙең туғандарығыҙ һәм яҡындарығыҙ тураһында хәүефләнмәгеҙ, - Башҡортостан хеҙмәтсәндәре тыуған илде батыр рәүештә һаҡлаусылар алдында уҙ бурысын тулыһынса үтәрҙәр.

Беҙҙең тыуған совет еребеҙҙе ҡоллоҡҡа төшөрөү өсөн баҫып ингән немец оккупанттарының бөтәһен дә ҡырып бөтөрөү тураһында бөйөк һәм туған юлбашсыбыҙ, полководецебеҙ иптәш Сталиндең приказын үтәү өсөн ярҙам итеүҙә үҙебеҙҙең бөтә көсөбөҙҙө, бөтә энергиябыҙҙы бирербеҙ тип, ҡәҙерле иптәштәр, һеҙҙе ышандырабыҙ!

Башҡорт халҡының данлыҡлы улдары алға, еңеүҙәргә!

Немец оккупанттарына үлем!

Йәшәһен Бөйөк Октябрь Социалистик Революцияһының XXV йыллығы!

Йәшәһен Советтәр Союзы халҡтарының бөйөк, емерелмәҫ дуҫлығы!

Йәшәһен беҙҙең туған Ҡыҙыл Армия!

Йәшәһен Ҡыҙыл Армияның гениаль полководеце, бөйөк юлбашсы, дуҫыбыҙ һәм учителебеҙ иптәш Сталин!

Башҡортостан хеҙмәтсәндәре исеменән:
БАССР Верховный Совете Президиумы
БАССР Халҡ Комиссарҙары Совете
ВКП(б) Башҡортостан Өлкә Комитете

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**Заманалар үҙгәреү менән халыҡтарҙың менталитеты ла үҙгәрә, тиҙәр. Ул үҙ йөшәйешенә яраҡлаша, формалаша, һығылмалана. Ысынлап та шулаймы икән? Ошо өлкәне асыҡлау өсөн Башҡорт дәүләт университеты докторанты, философия фәндәре кандидаты Зилә РӘХМӘТУЛЛИНАға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

# БЕҘҘЕҢ ХАЛЫҠ...

## был ерҙәргә таш булып һеңгән



**Белеүебеҙсә, һеҙҙең диплом эшегеҙ ҙә, кандидатлыҡ диссертацияғыҙ ҙа халыҡ менталитетын өйрәнеүгә бағышланған...**

- Эйе, бала саҡтан был тема минең өсөн ҡыҙыҡлы ине. Совет заманында телевизорҙа байрамдарға арналған концерттарҙа милли республикаларҙың бейеүҙәрен, йырҙарын йыш тапшыралар ине. Төрлө халыҡтарҙың бейеүҙәренә ҡарап, уларҙың холоҡтары ла бер-береһенән айырылалыр, тип тойомлай торғайным.

Ғилми етәксем профессор, философия фәндәре докторы Баязит Сабирйән улы Ғәлимов булды. Ул - Кембридж университетының иҫәбе буйынса, XX быуаттың 2 мең иң аҡыллы кешеләре исемлегенә ингән. Мин уға бик тә рәхмәтлемен, ул бик күп йәш ғалимдарға юл асты. Уның етәксе булараҡ иң көслө яғы - уҡыусыларына ирек, үҙаллы эшләү мөмкинлеге биреүендә. Һәм ул миңә лә үҙемдең темамды асыуҙа бик ныҡ ярҙам итте.

2015 йылда Философия конгресы беренсе тапҡыр милли республикала - Башҡортостанда уҙҙы. Эрбена Никитина тигән йәш сыуаш ғалимәһе секцияһын бутап, беҙ йыйылған медуниверситетка килеп ингән. Ул минән һуң сығыш яһаны. Сығышын В.М. Черемшанскийҙың XIX быуатта яҙған һүҙҙәре менән башлап ебәрҙе: "...Дикий и необузданный, привыкший действовать самопроизвольно, не терпящий над собою никакой власти, одним словом - народ буйный и своевольный, в настоящее время представляет народ мирный, терпеливый и покорный, не имеющий уже того строптивого духа". Ошо юлдарҙы уҡыны ла, дауам итеп: "Һеҙ ниңә үҙегеҙҙең асылығыҙҙы юғалтаһығыҙ? Ярай әле, исмаһам, һеҙ үҙ исемдәрегеҙҙе һаҡлап алып ҡалғанһығыҙ, ә беҙ бына уларҙы ла юғалтҡанбыҙ..." - тине. Уның телмәренән мин шуны аңланым: мин һөйләгәндәр башҡа милләт вәкиленә лә барып еткән. Шул саҡ диссертациямды ошо темаға бағышлауым бушҡа түгел икәненә инандым. Эрбена әйтеүенсә, Урал - Волга буйҙары төбәгендә беҙ беренселәрҙән булып башҡорт менталитетын өйрәнә башлағанбыҙ икән. Аҙаҡтан мордва, мариҙар, сыуаштар, татарҙар ҙа был темаға тотонған.

**Башҡорт халҡының милли идеяһы нимәлә?**

- Һәр халыҡтың үҙ йәшәйеш миссияһы була. Башҡорттар - Евразиялағы иң боронғо халыҡтарҙың береһе. Әгәр беҙ барбыҙ икән - үҙебеҙҙең тәғәйенләнешебеҙҙе үтәргә тейешбеҙ. Башҡорттарҙың өйрәнәһеләре күп, бәлки, белгәндәребеҙҙе иҫкә төшөрөргә генә кәрәктер, ләкин башҡаларҙы өйрәтә алырҙай ғилемебеҙ ҙә байтаҡ. Беҙҙең Тора, Библия, Ҡөрьән булырҙай милли идеябыҙ "Урал батыр" эпосына уҡ һалынған. Ул - изгелек өсөн көрәш. Үҙеңдең изге булыуың ғына етмәй, һин яҡшылыҡ, ғәҙеллек өсөн алышырға әҙер булырға тейешһең. Ошо идеяны Салауат Юлаев, Зәйнулла ишан Рәсүлев, Әхмәтзәки Вәлидиҙәр дауам иткән, халыҡ быны үҙенең тарихи юлы менән, феноменаль ихтилалдары менән иҫбатлаған. Беҙ глобалләшеү заманында ла нисек тә булһа Уралыбыҙҙы, аҫаба халыҡ ерҙәрен, телебеҙҙе, бай ижадыбыҙҙы, генетик байлығыбыҙҙы һаҡлап ҡалырға тейешбеҙ.

"Беҙгә ер кәрәкмәй!" тигән "аҡыллы" баштарыбыҙ ҙа бар. Ә бит ауылдарҙағы ерҙәр киләсәктә беҙгә ҙур бер өҫтөнлөк бирәсәк. Беҙҙең күҙ ҡарашыбыҙҙа, тын алышыбыҙҙа, йөрөшөбөҙҙә, үҙебеҙҙе тотошобоҙҙа уҡ хужа, аҫаба халыҡ булыуыбыҙ тойомланырға тейеш. Ана, тажиктарға, үзбәктәргә, Кавказ халыҡтарына ҡарайыҡ, улар урамда ла, магазинда ла үҙ телдәрендә беҙҙән ҡыҫҡырыбыраҡ һөйләшәләр. Ә бит улар бында эшкә генә килгән...

Балаларыбыҙҙы, бигерәк тә малайҙарҙы тәрбиәләгәндә, үҙҙәрен иркен тоторға, тартынмаҫҡа, баҫылмаҫҡа өйрәтергә кәрәк. Минеңсә, улар үҙ-ара тартҡылашып, дөмбәҫләшеп, һуғышып та үҫергә тейеш. Уларҙың ошо һуғышсан холҡон спорт түңәрәктәрендә файҙаланырға тейешбеҙ, был уларға үҙҙәренә ышаныс булдырыуға ярҙам итәсәк. Бер таныш тренер фекеренсә, күберәк футбол менән шөғөлләнһен беҙҙең малайҙар. Күп сығымдар ҙа талап итмәй, беҙҙең антропометрик күрһәткестәребеҙгә лә тап килә (баскетбол, волейбол уйнарға буй кәрәк) һәм был спорт төрө донъяла ла бик популяр. Башҡорттар араһында сос Пелелар үҫергә тейеш. Улар футболсы була ала, тик шарттар тыуҙырырға, физкультура уҡытыусыларына маҡсатлы эшләргә генә кәрәк. Егеттәр үҙҙәре лә ойошоп, йәй буйы туп тибә ала. Ғөмүмән, башҡорт кешеһе башҡаларҙан нимәһе менән айырыла? Ул ауыҙын асып, алма төшкәнен көтөп ятмай - үҙе тәүәккәлләй. Беренһен дә ғәйепләмәй ҙә, зарланмай ҙа, хәленән килгәнен үҙе табып йәшәй.

**Һеҙ башҡорттоң намыҫ кодексын да төҙөгәйнегеҙ. Йәмәғәтселек нисек ҡабул итте?**

- Кодексты һораған хаттар күп булды. Рус теленә тәржемә итеүҙе лә үтенделәр. Бәлки, уның эстәлеге менән танышыу туған телде өйрәнеүгә этәргес булыр, тип тә уйлағайным. Ошо Кодексҡа арнап үткәрелгән саралар араһынан иң оҡшағаны - Учалы ағинәйҙәренең минең олатайым зауряд - есаул, дворян Зәйнәкәй Бикбауов нигеҙ һалған Бәләкәй Ҡаҙаҡкол (Зәйнәкәй) ауылы китапханаһында "Өләсәйем һандығы" сараһын үткәреүе булды. "Ысын башҡорт олатайының һәм өләсәйенең һандығында, кәмендә, ете батыр, ете хайуан тураһында һәм ете тылсымлы әкиәт, ете доға, ете шиғыр, ете йыр, ете йомаҡ, ете көләмәс, ун ете таҡмаҡ ята - улар әйткәндәрҙе ейәндәренә өйрәтә", тигән юлдар бар Кодекста. Ҡыҙҙар һәм малайҙар әзәйҙәре менән (беҙҙә өләсәйгә шулай өндәшәләр) ошо ҡағиҙәгә ярашлы ҙур тамаша ҡылды. Оҙон йыр ҙа, доға ла, әкиәт тә булды... Күңелгә бик ныҡ уйылып ҡалғаны, яңылышмаһам, Нәилә апай һөйләгәне: "Чита ҡалаһының дауаханаһында ятам. Яман шеш диагнозы ҡуйҙылар, табиптар килеп тә урамай, сөнки һуң инде, тинеләр. Үлеремде көтөп ятам, шул саҡ өләсәйемдең "Бер ниндәй доға белмәһәң, Лә-иләһә-иллалаһ - Мөхәммәд-Расүлуллаһ тип ҡабатлаһаң да, ярай", тигәне иҫкә төштө. Шунан һуң көнө-төнө шуны ҡабатланым да ҡабатланым. Ике ай самаһынан һуң тикшерелергә барғайным - шеш юҡҡа сыҡҡан тинеләр, табиптар үҙҙәре лә аптыраны..." Шунан һуң намаҙға баҫтым, тине был апай. Әлеге осрашыуҙа ейәне матур итеп яттан доғалар һөйләне.

**Милли костюм көнөн булдырырға ла булышлыҡ иттегеҙ, шулай бит?**

- Эйе, Хөкүмәткә яңы форматтағы сара үткәреү тәҡдиме менән сыҡҡайныҡ. Тәүҙә аңламаныулар, ҡабул итмәнеләр, хат кире районға әйләнеп ҡайтты. Унан, бәхеткә күрә, Зөһрә Йыһанур ҡыҙы Рәхмәтуллина иғтибар итеп, ниндәй шәп идея тип, Халыҡтар ассамблеяһы менән бергә Учалыла фәнни-ғәмәли конференция, шунан костюмдар парады үткәрҙек. БДУ-ның үҙебеҙҙәге Учалы филиалы студенттарын да милли кейем кейергә өгөтләнек. Хәлле генә талибәбеҙ 200 меңлек традицион костюм тектерҙе, ул Парижда күргәҙмәлә лә булып ҡайтты. Әле лә Учалыла беҙҙең филиалдың уҡытыусыһы (хәҙер филиал ябылды, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы) Азат Салауат улы Ғарипов ағинәйҙәр менән бергә милли башҡорт кейемен тергеҙеүҙе дауам итә.

**Тағы ниндәй проекттарығыҙ булды?**

- "Урал батыр" эпосын, ундағы яҡшылыҡҡа өндәгән һүҙҙәрҙе бар донъя башҡорттары доға һымаҡ уҡыһын ине, тигән теләгебеҙҙе лә бер проектҡа һалғайныҡ. Бик глобаль ғына акция килеп сыҡты. Иң беренсе булып видеоһын Израилдән Рәүил Садиҡов ебәрҙе. Аҙаҡтан уның менән бәйләнешкә инеп, эпостың тәржемә итеү эшенә лә тотоноуға булышлыҡ иттек, шикелле. Әйткәндәй, ул башҡорт ихтилалы тураһында "Кара юрга" романын яҙып, Санкт-Петербургта, Польшала баҫтырҙы. Ә үҙебеҙҙең республикала баҫтырып сығара алмай. Яҡшы кимәлдәге, уҡымлы художестволы әҫәр. Ярҙам итергә ине уға...

Шулай уҡ видеоматериалдар Ханты-Мансиҙан, Чита, башҡа ҡалаларҙан килде. Саралар Өфөлә, Учалы районында бар мәктәптәрҙә акция-эстафета рәүешендә һәм ҡала майҙанында үтте. Эпостан өҙөктө Ирәмәлдә, Иҙел башында ла, Европа һәм Азия ҡушылған сиктә - Яйыҡ йылғаһы буйында, ер аҫтында ла (шахтерҙар) уҡыны-лар. Йәнбикә һәм Йәнбирҙе йылғалары ҡушылған ерҙә Наил Ирмикимов менән Урал Яппаров таш ҡуйҙы.

Офтальмолог Эрнст Рифғәт улы Мулдашевҡа "Урал батыр һеҙ китаптарығыҙҙа яҙған атланттар менән бәйле түгелме?", тип хат яҙғайныҡ. Профессор ҡыҙыҡһынды, тип, ярҙамсыһы шылтыратты. Аҙаҡ Мулдашев Шүлгәнташҡа, Йылҡысыҡҡан күленә, Ахун менгирҙарына сәфәр ҡылды. "АиФ" гәзите биттәрендә эпос тураһында мәҡәләләр баҫылды, хәҙер доктор "Урал батыр" буйынса китап өҫтөндә эшләй.

Мифологик аңыбыҙҙа бөгөнгәсә Урал батыр культы һаҡланыуы, беҙҙең көндәргәсә эпостың атамаһы шәхси исем булараҡ та йәшәүе - был фактар бындай кешенең реаль булыу мөмкинлеген фән күҙлегенән дә инҡар итмәй. Беҙ әле һаман "Урал батыр" эпосының әһәмиәтен тулыһынса аңлап

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# БӘХЕТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

**Кенигсберг университеты профессоры Иммануил Кант кеше абсолют бәхет тойғоһона өлгәшә ала тигән һәм һәр кемгә аңлайышлы ябай кәңәштәр биргән. Был ҡағыҙәләр 232 йыл элек яҙылған. Әммә бөгөн дә бик актуаль.**

**Бәхетле булып күренегеҙ.** Бында ул һәр ваҡыт йылмайып йөрөү тураһында әйтә. Йылмайған кеше тормошҡа ыңғай ҡарай һәм һөҙөмтәлә бәхет хисен күберәк кисерә. Ни өсөн шулай? Тормош - ул көҙгө кеүек, унда беҙ нимә күрһәтәбеҙ, шуны күрәбеҙ. Күңелһеҙ йөҙ менән көҙгөгә ҡараһағыҙ, унда бәхетһеҙ кеше ҡарай. Йылмайһағыҙ, көлһәгеҙ, көҙгөлә лә уның сағылышын күрһәгеҙ. Тормошта ла шулай: эргә-тирәгеҙгә лә тик ыңғай тойғолар, һүҙҙәр, фекерҙәр таратығыҙ, шатланығыҙ, көлөгөҙ.

**Бәхеткә лайыҡ булығыҙ.** Бының өсөн насар ҡылыҡтарығыҙҙан, зарарлы ғәҙәттәрегеҙҙән арынығыҙ. Мохтаж кешеләргә ҡулығыҙҙан килгәнсә ярҙам итегеҙ. Изге уйҙар, изге эштәр кешене рухи яҡтан байыта, үҙенә ҡарата ихтирам тойғоһо, үҙбаһаһы арта. Шундай саҡта ғына үҙеңде бәхетле тойорға мөмкин. Тимәк, бәхетле булыу беҙҙең үҙебеҙҙең уйҙарыбыҙға, ҡылыҡтарыбыҙға бәйле.

**Матди байлыҡҡа бәйләнмәгеҙ.** Матди байлыҡҡа ынтылған кеше һәр ваҡыт беренсе урынға уны ҡуя, өлгәшһә, уны юғалтыуҙан ҡурҡып, үҙен бәхет тойғоһон кисереүҙән мәхрүм итә. Байлыҡтан ҡолаҡ ҡаҡһа, бәхетһеҙлеккә дусар була. Был тормошта бер нәмә лә мәңгелек түгел. Башҡалар хаҡында хәстәрлек күреү, мохтаждарға ярҙам итеү - бына бәхет хисен бирә торған эштәр, ҡылыҡтар.

**Ғәҙәттәрегеҙҙе контролдә тотоғоҙ.** Кант билдәләүенсә, бәхет тойғоһон төрлө кеше төрлөсә кисерә: берәүгә - яҙанан ҡасыу өсөн кем өсөндөр судта ялған күрһәтмә биреү. Икенсегә - тәмле һый, өсөнсөгә - китап уҡыу... Ғәҙәттәренә баш була белеү, уларға бәйле булмау, үҙеңдең көсһөҙлөгөң өсөн ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо кисермәү ҙә бәхет хисе өҫтәй.

**Юғары көскә ышанмайынса, бәхетле булып булмай.** Кант ғалим күҙлегенән Аллаһы Тәғәләнең булыу мөмкинлеге тураһында фекер йөрөткән. Уның әйтеүенсә, әхлаҡ-әҙәп хисе кеше тыуғанда уҡ уға программа һымаҡ һалына. Шулай булғас, был программаны барлыҡҡа килтереүсе лә бар...

Шулай итеп, Иммануил Кант, бәхет - ул үҙең һәм Юғары аң менән гармонияла йәшәү тигән фекергә килгән. Ошондай ваҡытта ғына кеше ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерә. Икенсе төрлө әйткәндә, әгәр эмоцияларығыҙҙы, теләгегеҙҙе контролдә тотһағыҙ, тормошто яҡшыраҡ иткән изгелек ҡылһағыҙ, бәхет хисен татырһығыҙ.

✓ Таштарҙа эпостарҙан, боронғо йырҙарҙан бер юлы бер нисә телдә "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кеше булһын затығыҙ", "Һис бирмәгән башҡорт Уралын" кеүек өҙөктәр яҙҙырыр инем.



етмәйбеҙ. Халҡыбыҙ бөйөк эпосын ғына ижад итеп, башҡорт атын, балын, ҡурайын да уйлап сығармайынса, үҙен мәңгеләштерер ине. Илаһи сығанағыбыҙҙы милли идея, идеология кимәленә күтәрһәк, беҙ үҙебеҙҙе (иң ҡыҙығы башҡаларҙы ла) халыҡ һәм дәүләт булараҡ һаҡлай аласаҡбыҙ. Унда бар кешелек өсөн дә әһәмиәтле тәрән гуманистик фәлсәфә ята. Ата-бабаларыбыҙ Урал батыр васыятына тоғро булған, шуға ла халҡын, ерҙәрен һаҡлай алған. Ғөмүмән, фольклорыбыҙҙы пропагандаларға кәрәк! Киләсәктә ошо рухи байлыҡ, белем беҙҙең йәшәү сығанағына әйләнәсәк. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Башҡортостандың ер өҫтө һәм аҫты байлыҡтарынан беҙгә артыҡ файҙа юҡ, "эт менән ҡош кинәнә"...

Учалы ҡалаһында балалар ижады йортонда уҡсылар түңәрәген астыҡ. Был һөнәр беҙҙең яҡтың брендына әйләнде. Районда 100-ҙән ашыу уҡсы бар. Ҡайһы берәүҙәр быны милләт мәнфәғәттәренән йыраҡайтыусы шау-шоу ғына тип ҡарай, ләкин милли үҙаң шул уҡ боронғо кейемгә, уҡ-һаҙаҡҡа ҡыҙыҡһыныу аша ла уяна.

**▸ Ә килеп сыҡмағандары, тормошҡа ашмағандары булдымы проекттарығыҙҙың?**

- Әлбиттә, унһыҙ булмайҙыр. БДУ-ның Учалы вәкиллеген һаҡлап ҡала алманыҡ. 500-ҙән ашыу белгес уҡытып сығарҙыҡ, күбеһе ҡалала, районда ҡалды, ә бит был - беҙҙең киләсәк. Мөнир Иҫсанов, Лидия Таңатова, Альбина Шәмсетдинова, Альбина Ғәлиева кеүек талантлы студенттар уҡыны...

Төбәктә короллай рәйесе булып эшләгәндә балалар баҡсаларында формаль булмаған, ысын мәғәнәһендәге башҡорт төркөмдәре ойоштороу идеяһы менән янғайныҡ, уны ла тормошҡа ашырып булманы. Ҡала телестудияһында үҫмерҙәр өсөн башҡортса тапшырыуҙар индереп өлгөрөлмәне (бар нәмә әҙер ине). Учалы ҡалаһында Урал батырға, ике талантлы скульптор - Хәйҙәр ағай Ғариповтың һәм Фәнил Мөслимовтың шул проекттары була тороп, һәйкәл ҡуйып булманы. Спонсорҙар ҙа бар ине.

Әйтергә кәрәк, беҙҙең республика ҡалаларының, баш ҡалабыҙҙың да милли йөҙө юҡ. Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәле булмаһа, Башҡортостан икәне һиҙелмәҫ тә ине. Ошо яҡтан беҙ Фольклориадаға бөтөнләй әҙер түгелбеҙ һымаҡ. Мин скульптор булһам, парктарҙа, майҙандарҙа ҙур-ҙур матур таш өйөмдәре яһар инем, таштарҙа эпостарҙан, боронғо йырҙарҙан бер юлы бер нисә телдә "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кеше булһын затығыҙ", "Һис бирмәгән башҡорт Уралын" кеүек өҙөктәр яҙҙырыр инем. Башҡорт мәҙәниәтендә ындай традиция булған, нимәнимә, таш беҙҙә әлегә бар. Бығаҙур символик мәғәнә лә һалырға булыр ине: беҙ, халыҡ булараҡ, был ерҙәргә таш булып һеңгәнбеҙ...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!

# ҮҘ ИСЕМЕ МЕНӘН АТАУ ОЯТМЫ,

## был һүҙҙәрҙе лөғәтебеҙҙән алырғамы?



**Авторҙар әленән-әле ҡорған бәхәстәргә әүҙем ҡушылырға яратһам да, бығаса үҙем башламай торғайным. Бөгөн үҙемдең ҡарамаҡҡа ҡыҙыҡ ҡына булған бер мәсьәләне күтәрмәк булдым әле.**

Етмешенсе йылдар уртаһы, медицина институтында уҡып йөрөгән дәүерҙә Баймаҡ район дауаханаһында йәйге практика үткәйнем. Тәжрибәле табиптар етәкселегендә тырыша-тырмаша медицинаның "елеген кимерәбеҙ". Эште иртәнсәк хирургия бүлегендә оло хирургтар менән палаталар буйлап "обход" яһауҙан башлайбыҙ. Хирургтарыбыҙ барыһы ла үҙебеҙҙең район ауылдарында тыуып үҫкән йор һүҙле башҡорт ағайҙары. Караватта ятҡан бер-ике көн элек операция яһалған һәр ауырыуҙың янына килеп, эстәренә баҫыҡлап, хәлдәрен һорашалар. Эске ағзаларға яһалған операциянан һуң иң беренсе "яҡшы билдә" - кешенең эсәге хәрәкәт итә башлауы (медицинала "перистальтика кишечника" тип атала). Эсәктең эшләүе унан газ бүленеп сыға башлауынан беленә. Шуға күрә доктор ауырыуға ошо хаҡта үҙенең һорауын бирә. "Эсеңдән газ сығамы?" Тик күптәр (айырыуса оло йәштәге инәй-олатайҙар) һорауҙы ҡапыл да аңлап етмәй: "Нисек, нисек, тиһең, улым?" Хирург һорауын тағы бер тапҡыр ҡабатлап ҡарай, әммә үҙенә кәрәк яуапты ала алмай. Шунан һүҙгә һис тә аптырап бармаған хирургия мөдире Фәлән ағай ҡушыла һәм инәйебеҙҙең ҡолағына яҡынайып эйелеп: "Уҫыртамы, инәй?" - тип, "ауылса" һуҡтыра. "Әй, уҫырта, улым, уҫырта", - тип яуап бирә әбей. "Яҡшы, инәй, яҡшы, эсәктәрең эшләй башлаған. Тиҙҙән һауығырһың..." Беҙ, йәш студенттар, бер-беребеҙгә ҡарашып, шым ғына көлөшөп алабыҙ. Ә бит, төптәнерәк уйлап ҡараһаң, ни өсөн көлөргә, шулай бит? Бер ниндәй ҙә килешмәгән нәмә һөйләшелмәне ошо әңгәмәлә, тик ауырыу әбей менән доктор ағай үҙебеҙҙең саф башҡорт телендә аралашты...

Мәҡәләмдең бына ошолай башланып китеүе ҡалала, мәҙәниәт алға киткән ерҙәрҙә тыуып үҫкән бәғзе берәүҙәргә бик сәйер тойолоуын күҙаллайым. Халҡыбыҙ ауылдарҙа иркенләп ҡулланған, әммә рәсми һөйләштә булмаған һүҙҙәр хаҡында бер аҙ фәлсәфәләп алырға ниәтем. Ысынлап та, ҡайһы бер гәзиттәрҙә, китаптарҙа авторҙарыбыҙҙың ара-тирә "буктүңәс", "күтән", әлеге "уҫырыҡ" һымағыраҡ һүҙҙәрен осратһаҡ, беҙҙең яҡта әйтмешләй, "тәндәр эҫеле-һыуыҡлы" булып китә. Ауыл халҡының лөғәтендә ифрат киң таралған ындай һүҙҙәрҙе беҙҙең быуын (совет балалары) мәктәптә үтмәне, дөрөҫөрәге, беҙ уларҙы оят һүҙҙәр тип һананыҡ. Урыҫса "пищевод", "прямая кишка", "кишечный газ" тип "культурно" янғыраған ындай терминдарҙы ҡулланырға тура килһә, башҡортса нисегерәк итеп әйткәндә оят булмаҫ икән, тип уйлана торғайным. Тәүгеһен - ҡыҙыл үңәсте тиҙ таптым, әммә ҡалған икеһен "тура эсәк", "эсәк газы" тип тәржемәләүҙән ары китә алманым. Шуның һымаҡ "ауыр" һүҙҙәрҙе һәр саҡ урап үтергә лә була ла ул, әммә бәғзе ваҡыт үҙ телендә башҡортсалап, "ауыҙ тултырып", беҙҙең баймаҡтарса әйтмешләй, "ҡайсаҡ "кутара" һөйләшке лә килеп китә...

Әлеге ҡыҙыл үңәстең синонимын алып, шуны бер аҙ сурытып алайыҡ әле. Был "буктүңәс" һүҙе ике һүҙҙән барлыҡҡа килгән икәнен барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Бәғзе бер райондарҙа уны "буклүңәс" тип тә әйтәләр. Шул һүҙҙең тәүге яртыһы халҡыбыҙ телендә айырыуса йыш ҡулланыла. Берәй кешенең ниндәйҙер ҡылығы оҡшамаһа, беҙҙең яҡта ҡайһылар "мынау буғашаған бәндә..." тип, уға ҡарата үҙенең кире мөнәсәбәтен белдерә. Йә иһә, кемдер насар һүҙҙәр һөйләй башлай икән: "Йә, етер, буксәйнәмә!" - тип тыйып та ҡуйғылайҙар. Берәүҙең сәйер ҡылығына ҡарап: "Әй, йөрөйһөң шунда, буғашап", - тип тә ебәрәләр. Халҡыбыҙҙа киң таралған ындай һүҙҙәрҙе артабан да әллә күпме сурытырға була. Мәҫәлән, бер нәмә лә эшләй белмәгән кешегә "букҡа ла эшкинмәй" тип әйтәләр. Кәрәкмәгән урында һүҙгә ҡыҫтырылып, берәй эшкә ҡамасаулаған кеше хаҡында: "Әй, йөрөй инде шунда ҡойошҡанға ҡыҫылған букҡошап", - тиҙәр беҙҙә (әйәрә алға шылып китмәһен өсөн, аттың ҡойорого аҫтынан үткәреп, эйәргә беркетеп ҡуйылған ҡайыш бауҙы "ҡойошҡан" тип атайҙар. Ана шул бау бер аҙ бушағыраҡ икән, аттың тиҙәге уның аҫтына ҡыҫыла...) Йыш ҡына насар, ғәйбәт һүҙҙәр һөйләргә ғәҙәт иткән кеше сираттағы хашшаҡ һүҙенә тотонһа, бәғзе берәү шым ғына икенсеһенә: "Буғашамай торһа - эттең башы ауырыр, тигәндәй, ана, тағы башланы..." - тип әйткәнен ишеткәнем бар. Кемделер яманлап һөйләүҙе "букләү" тип тә атайҙар. Яҡшы кешене яманлауҙар хаҡындағы бер шиғырында шул һүҙҙең ғәрәпсәһен Аҡмулла олатайыбыҙ ифрат йәтеш ҡулланған: "...Саф алтынды нәжескә буяу менән, нәжес китер - саф алтындың заты китмәҫ".

Әҙәби телдә был һүҙҙең "тиҙәк" тип аталғанын белмәгән кеше юҡтыр. Әммә элегерәк ялан яҡтарында (Баймаҡ, Хәйбулла) тиҙәк һүҙен бер аҙ икенсерәк итеп ҡуллана торғайнылар. Ялан ерендә әүәлдән утын наҡыҫыраҡ булды, ә газ бөтөнләйгә юҡ ине бит инде. Шул осор мал торған аҙбарҙа ҡыш буйы йыйылып, бесән, һалам ҡушылып тапалған тиреҫте яҙ еткәс ҡаҙып сығарып, уға бер аҙ һыу ҡушалар. Берәй малайҙы һыбай мендереп, шул тиреҫ өйөмөн аттан бер килке тапатып, бутҡа һымағыраҡ иҙмә яһайҙар. Унан таҡтанан яһалған ҡалыптарға һалып, кирбес һымағыраҡ форма бирәләр ҙә, уларҙы теҙеп, ҡояшта киптерә торғайнылар. Йәйге ҡояшлы көндә ауылда шундай үҙенсәлекле еҫ (насар еҫ түгел!) тарала икән, тимәк, ниндәйҙер берәй өйҙә "тиҙәк һуғыу" өмәһе бара, тип аңлай инек. Пресланған торфҡа оҡшаған кипкән тиҙәк-кирбестәрҙе күбә итеп өйөп ҡуялар. Утынды алыштырырлыҡ, бик арзан яғыулыҡ килеп сыға ине. Шуғамылыр, беҙҙең ауылда тик ана шуны ғына "тиҙәк" тип, ә әле генә эсәктән сыҡҡанын - үҙ исеме менән атанылар. Райондарыбыҙҙың береһендә "Тиҙәкле" тип аталған ауыл барлығы хаҡында ишетеп ҡалғайным. Был исем дә, моғайын, ана шул яғыулыҡ итеп ҡулланыла торған тиҙәктән килеп сыҡҡандыр...

Боронғо мәжүсилек заманында ла халҡыбыҙ ана шул "килешмәгән" һүҙҙәрҙе киң ҡулланған. "Исемдәр донъяһында" тигән китапты ҡараһаҡ, ата-бабаларыбыҙ хатта үҙ балаларына ҡушҡан "Букбаш", "Букай", "Ҡәҡәй" тигән исемдәр хаҡында ла мәғлүмәт бар (йәнәһе лә, ана шундай исемле балаларҙан шайтан ерәнә һәм уға яҡынламай).

Халҡыбыҙҙа "Бер сыҫҡаҡ һыйыр бөтә көтөүҙе буяй", "Маҡталған килен түйҙүҫырыр", тигән һымағыраҡ ябай телдәге мәҡәлдәр, әйтемдәр ҙә бихисап. "Һин уға иғтибар итмә", тиәһе урынға "сыс, башына", тип тә әйтәләр. "Һә" тигәнсе..." тиеүҙе йыш ҡына "Эт һейгәнсе генә бара һалып килдем..." тип тә әйтәләр. Яҡын ғына араны "эт саптырып һеймәле ара" тип сағыштырыу ҙа бар. Тик беҙ, хәҙерге быуын кешеләре, бына ошондай һөйләшеүҙәрҙе ҡуллана һалып бармайбыҙ. Ул ғына ла түгел, "Был - мәҙәниһеҙлек!", тип оран һалыусы милләттәштәремдең булыуын да күҙаллайым. Хатта ошо мәҡәләмдең гәзитебеҙҙә баҫылып сығыуына ла икеләнәм.

Ә шулай ҙа... Әгәр оят, ҡулланырға ярамай икән, ындай һүҙҙәрҙе, һүҙ бәйләнештәрен, әйтемдәрҙе - "иҫкелек ҡалдыҡтары" тип халҡыбыҙҙың лөғәтенән бөтөнләйгә алып ташларға, онотторорға, йә булмаһа, уларҙы урыҫтарҙан отоп алған "күльтурный" һүҙҙәргә алыштырыу кәрәктер! Ә инде уларҙы телебеҙҙең "онотолоп барған хазиналары" тип һанаһаҡ, һис тартынмай ғына, һәр ауылдағы һымаҡ, иркенләп ҡулланайыҡ, тимәксемен. Минең тел буйынса махсус белемем юҡ (сер итеп кенә әйтәм: мин - ябай хәрби кеше, өҫтәүенә - медик...). Башҡорт филологияһын өйрәнгәндәр был мәсьәләгә нисек ҡарай икән һуң?..

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

***✓ Кем уға аяҡ сала? Элекке мөхәрриреме? Шул ҡурҡаҡ әҙәм һаман булышамы? Сара Ғирфан Рәсүлевичтан эш һорап йөрөмәне, ул үҙе саҡырҙы, үҙе өмөтләндерҙе лә баһа.***




Тағы ла бер ни тиклем ваҡыттан Сара полиция бүлексәһендә ултыра ине. Һорау алыу башланды, ул булған хәл-ваҡиғалар тураһында һөйләне. Был юлы Стәрлетамаҡтан Илдар ағаһы үҙе килеп төштө. Сара уға ни өсөн бындай хәлгә тарыуын аңлатты, тик әсәһенең исемен әйтмәне. "Социаль селтәрҙә минең хеҙмәттәштәрем менән бер кеше танышҡайны, карточкаһындағы аҡсаһы юғалды". "Ниндәй осраҡта ла тейешле органдарға мөрәжәғәт итергә кәрәк, Сара!" "Мөрәжәғәт иткәндәр, тик файҙаһы булманы шул. Бына мин ҡыҫылғас, эш ҡуҙғалды". Ағаһы яуап урынына сикәһенә һуҡ бармағын ҡуйып борҙо, һинә етешмәй, йәнәһе. Юҡ, Сара Илдар ағаһына һис кенә үпкәләмәне, әрен дә өндәшмәй генә тыңланы. Уның карауы, ағаһының килеүе Сараны төрлө бюрократик мәшәҡәттәрҙән азат итте. Оҙаҡ та үтмәй, яһалма алкоголь етештереүсе цехтың хужаһын тоттолар, һәм артабан тикшереү эштәре дауам итте. Ганс Гасановичтың үҙенә айырым эш астылар.

Әсәһе ҡыҙының ниндәй мажараға тарыуын ишеткәс, валерьянкаһына йәбеште. Гансның фашланғанын ишеткәс, тағы "аһ" та, "уһ" итеп диванға барып ятты. Аҡсаһы ҡайтарыласағын белгәс, һикереп тороп бейеп китте.

Эҙәрлекләүселәре "Лада"ны шаҡтай ғына йомшайткәндәр ине. "Эй, маладисһың да инде иҫке машинам! Әллә ниндәй вездеходтарға бирешмәй, шулар менән ярыштың! Яратам үҙеңде! Әлдә һин бар минең эргәмдә", - тип һөйләнде Сара.

...Сара суррогат етештереүселәр ваҡиғаһын Рауилына һөйләмәгәйне, ә хәбәр ирекәйенә барып еткән, иртә таң менән шылтыратты.

- Бер сайтта "Журналист тикшереү үткәрә" тигән бәләкәй генә мәҡәлә сыҡҡан, һинең дә исемең телгә алына. Ҡотлайым, бисәкәй! Бер тынала уҡып сыҡтым.

- Аллаға шөкөр, тик ятмайбыҙ, - тине Сара, көсәнеп тамағын ҡырып алды. - Һинең ҡатын тикшереү үткәрә белә. Ҡайтҡас, тағы ла бер тапҡыр быға инаныңһың. Бик яңғырауыҡлы фашлауҙар буласаҡ.

Шаярта тип уйлаған Рауил рәхәтләнеп көлөп ебәрҙе. Бындай саҡта ул сабыйға оҡшап китә. Һы, сабый, имеш. Һинең хыянатың арҡаһында инде нисәмә көндәр күҙҙән йәш кипмәй...

Туҡта, нишләп Сара ҡара күҙ йәше ҡойорға тейеш әле? Ул, ысынлап та, үҙ эшенең оҫтаһы. Ғирфан Рәсүлевич юлда тап иткәнендә юҡҡа ғына эшкә саҡырманы ла баһа. Инде ике айлап ваҡыт үтеп китте. Хәҙер Сара иренә үс итеп, эшкә сығырға тейеш.

Элек бер кабинетта ултырып эшләгән Рәүзәт телефон аша уның енәйәтселәрҙе фашлау тарихын әллә нисә тапҡыр һөйләтте.

- Һинең алдан күрә белеү һәләтең бар. Шулай булмаһа, тик торғанда бандиттар араһына башыңды тыҡмаҫ инең! - тине һоҡланыуын белдереп, тел шартлатты.

Маҡтау кемгә оҡшамаһын, Сара ла ирееп китте.

- Улай тимә, Рәүзәт. Минең алйот хәлдәргә тарығанды белмәйһең әле һин! - Шунан асылып, Луиза-Ангелина менән булған мажараны һөйләп ташланы, тик бүтән берәүгә лә әйтмәҫкә ҡушты, ояты ни тора. Етмәһә, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә булһа ла фотоһы "Эҙләүҙәр" таҡтаһында эленеп торҙо бит. Рәүзәттең былай рәхәтләнеп көлгәне юҡ ине шикелле, һуңынан шылтыратҡанында ла әллә нисә тапҡыр шул хәлде иҫенә төшөрҙө.

- Былай өйҙә эшһеҙ ятһаң, профессиональлекте юғалтаһың түгелме? - тип әйтеп ҡуйҙы аҙаҡ.

Дөрөҫ әйтә Рәүзәт. Иренә генә уның өйҙә ятыуы оҡшай, ләкин Сараның һөнәрен, оҫталығын баһалаусылар ҙа етерлек.

- Беҙҙең кеүектәр юғалып ҡалмай ул! Ғирфан Рәсүлевич мине үҙенә саҡырҙы, - тине Сара ғорурлыҡ менән. - Эш һорап барманым. Үҙе башлап өндәште.

- Эйе, һин сымыры кеше, - тине һөнәрҙәше.

Элек бергә эшләгән һөнәрҙәштәренең хуплауы ла уға көс бирҙе. Сара эшкә сығырға ныҡлы ҡарар итте. Ғирфан Рәсүлевичҡа бер нисә тапҡыр шылтыратты, ләкин баш мөхәррир телефонын алманы. Ахыр, редакцияға үҙе барып килмәк булды. Ҡабул итеү бүлмәһендә эшләгән Нәйрә күптәнге танышы, шуға ҡыйыу аҙымдар менән барып инде. Серетарь ҡатын уны күрермен тип уйламағандыр ҙа, аптырап текләп ҡалды.

- Йә, Нәйрә, мине онотмағанһыңдыр бит? - тип шат йылмайҙы Сара.

- Юҡ-юҡ, Сара, - Нәйрә күҙҙәрен селт-селт йомоп йылмайған булды.

- Хужағыҙ урынындамы? Әллә нисә тапҡыр үҙенә шылтыраттым, трубкаһын алмай, иҫән-һауҙыр бит?

- Сара, һин эш буйынсамы?

- Эйе, ҡайҙан беләһең? Әллә һинә әйттеме? - тип һораны Сара етәксе кабинетына ымлап.

Нәйрә тамаҡ ҡырҙы.

- Ғирфан Рәсүлевич әле отпускыла. Шуға алмайҙыр телефонын.

- Кем уның урынында? Инеп сығайым.

- Сара, - тине шул саҡ Нәйрә ҡатынға гәйепле ҡарап. - Мин һинә аңлатайым әле... Ғирфан Рәсүлевич әле вакансия юҡ тип әйтергә ҡушты. Әгәр ҙә һин шылтырата ҡалһаң...

Сараның тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.

- Аңламаным.

Нәйрә аҫҡа ҡарап алды ла, ҡапыл башын ҡалҡытып һөйләй башланы.

- Мин бер телефонды тоташтырғанда ишетеп ҡалдым. Элекке эшләгән урыныңдан шылтыраттылар. Һинең бер бала урлауҙа ҡатнашыуыңды һөйләнеләр. "Ул редакцияның имиджын ғына боҙасаҡ. Тилереп китһә, тыйып булмай", тинеләр. Сара, быны мин һинә яҡын күреп кенә әйтәм, зинһар, мине һатып ҡуйма.

Йөрәге урынынан ҡупҡан Сара үҙен ҡулға алды. Әкрен генә баш сайҡаны.

- Бәлки, тилереп тә аламдыр, ләкин мин алдаҡсы, ике йөҙлө түгел, - шулай тине лә ҡабул итеү бүлмәһенән сығып китте.

Кем уға аяҡ сала? Элекке мөхәррирме? Шул ҡурҡаҡ әҙәм һаман булышамы? Сара Ғирфан Рәсүлевичтан эш һорап йөрөмәне, ул үҙе саҡырҙы, үҙе өмөтләндерҙе лә баһа. Шулай булғас, эшкә ала алмауын да үҙ теле менән әйтергә тейеш түгелме ни ул? Шайтаныма олаҡ, икейөҙлө түрә! Сара өйөнә күҙ йәштәренә быуылып ҡайтып инде.

* * *

- Һағындырҙың, бисәкәй!

Вахтовик иренең өйгә ҡайтып инеү менән әйткән был һүҙҙәре Сараның йөрәген һыҙып үтте. Бер яҡтан, йән йәренә ышанғы килә, икенсе яҡтан, шик ҡорто уяулығын юғалтмаҫҡа саҡыра.

- Әллә миңә Себер сығып китергәме икән? - тине Сара. - Бергә булыр инек.

- Ауыр эш, ирҙәр генә сыҙай. Мин торған урын ятаҡта икәнде беләһең.

Эстәге шик һис кенә кәмемәне. "Ирҙәр генә сыҙай". Ысынлап та, шулаймы, әллә алдаштырыр өсөн әйткән буламы? Ҡорогор, Әлфиә тигән исем тел осонан китмәй ҙә ҡуя бит.

- Бер нисек тә булмай шул, - тине Рауил үкенесле тауыш менән. - Их, һин бешергән ашты һағындым, - ире бишбармаҡ һалынған тәрилкәне үҙенә яҡыныраҡ шылдырҙы.

- Бәлки, киреһенсә, унда рәхәтерәктер?

- Кемгә оҡшаһын ҡар эсендә бикләнеп, быуылып ятыу? - Рауил ауыҙына килтергән итте ҡапмай, туҡтап ҡалды. - Нишләп улай тип һорай ҡуйҙың әле?

- Ҡыҙыҡ, бөтәһе лә ҡайтырға атлығып торамы икән ундағыларҙың? Ҡай берәүҙәр икенсе ҡатын алып тора, тип тә ишеткәйнем.

- Төрлө яҡтан йыйылған халыҡ, ҡайҙан бөтәһен белеп бөтмәк кәрәк. Әйткәндәй, бер шәп шағир менән таныштым. Беҙҙең яҡташ. Бына бер шиғырын телефонға күсереп алдым.

- Ҡайҙа, күрһәт, һин аша-аша эҫе көйөнсә, - шулай тине лә, Сара иренең телефонын алып, икенсе бүлмәгә сығып китте. Шиғыр шәп. Мөхәббәт тураһында. Нишләп ире уны үҙенә күсереп алды икән? Сара адрестар менюһына инде. Юҡ, Әлфиә тигән исем юҡ! Улайһа, ҡайһы ир исеме аҫтында йәшеренгән? Сара һәр береһенә шылтыратып ултыра алмай! Ҡабат ире эргәһенә барып ҡунаҡланы.

- Башҡортостандан ҡатын-ҡыҙҙар бармы?

- Күп түгел. Һин бөгөн әллә ҡалайһың. Уҫалһың, - тип көләмһерәне ире. Сара ихтыяр көсөн туплаңы, ныҡ итеп тамаҡ ҡырҙы һәм үҙен ай буйы тынғыһыҙлаған, йоҡоларҙан яҙҙырған һорауын бирҙе.

- Күптән танышһыңмы Әлфиә менән? Нисә йыл мине алдап йөрөйһөң, ә?

- Кем тиһең? - Рауил һаңғырау кешеләй ҡатынына табан эйелде. - Сара! Был ни тигән һүҙ?

Сара иренә тәкәббер ҡарап алды, яуап бирмәне.

- Кем әйтте һинә был исемде? - тип һораны Рауил.

-Үҙе.

- Әлфиә тураһында ла, Зөлфиә тураһында ла, Гөлфиә тураһында ла белмәйем.

- Яҙған хаттарын йыйыштырып йөрөр инең.

- Ниндәй хат тураһында һүҙ бара, Сара?

Рауил уны, ысынлап та, бер анра бәрән тип уйлаймы әллә?

- Бына ошо курткаңдың кеҫәһендәге хат тураһында! - Сара Рауил алдында күк курткаһы һелкесләне.

- Тә-ә-әк, куртка... - Рауил ҡапыл йөнләнде. - Эйе, ҡайнаға алып торғайны курткамды.

Сара күҙҙәрен ҡыҫып, ышанмаған ҡиәфәт менән иренә ҡарап алды:

- Нимәгә уға һинең курткаң?

- Теге ҡайҡанда беҙ ҡайнаға менән Питерҙа булдыҡ бит. Мине унда Илдар ағайың алып китте, бик яҡшы хәтерләйһеңдер. Тегендә ҡапыл һыуытты. Ҡайнаға сығып йөрөп килде, ә кеҫәнән хатын алырға оноткан.

- Нисек?..

- Әйтһәм әйтәйем инде, - Рауил гәйепле ҡарап, төшөнкө тауыш менән дауам итте. - Ҡайнағаның тегендә... Ҡалайыраҡ әйтергә икән... Үҙеңдең ағайың да баһа, - Сара телһеҙ ҡалды, Рауил теләмәһә лә, һүҙен дауам итте. - Йәшлек мөхәббәте, тиһәм дөрөҫ үк булмаҫ... Шунда бер ҡатынға барып йөрөй. Әй, әттәгенәһе, тәки әйттерҙең. Ҡатынҡайым, берәү менән дә осрашҡаным юҡ. Теләгем дә юҡ. Аңланыңмы? Бир был хатты. Юҡ итәйек.

Сара "Юҡ" тип баш сайҡаны. Нисек кенә булмаһын, хатты һаҡларға кәрәк. Ул кем өсөндөр ҡәҙерле, кем өсөндөр дәлил. Иренең ҡарашы бик етди, алдаған кешегә оҡшамаған. Уның һәр ҡыланышын белеп бөткән ҡатын нишләргә белмәне, башын баҫып, диванға барып ултырҙы. Аҙмы-күпмеләр ваҡыттан ҡатындың эргәһенә Рауил килеп ултырҙы. Ҡосаҡлап үҙенә тартты. Сара башын уның күкрәгенә һалды.

- Һин ысын. Һин яһалма түгел, - тине ир.

- Яһалмалар ҙа буламы ни?

Рауил баш ҡаҡты:

- Була, уларҙы хатта ысындан айырыуы ҡыйын. Ләкин мин айыра белдем.

Иренең яурынына башын һалған Сара бер нәмә лә өндәшмәне. Рауилдың тыныс, яғымлы тауышын ишетеү рәхәт ине уға. Эсендә йөрөгән ауыр бер йөктөң төшөп киткәнен тойҙо.

Бер көндө, белепме, белмәйме, кейәүгә юҡ саҡта, мул күстәнәстәр тейәп, Илдар ағаһы килеп инде. Сәй эскән арала һеңлеһенән йәйлап ҡына хатты бирергә ҡушты. Сара аптыраған ҡарашын ағаһына төбәне, ирекһеҙҙән йылмайҙы.

- Ағаҡайым, һинең тормошта бөтә нәмәң бар - һинең өсөн өлтөрәп торған еңгәбеҙ, аҡыллы балаларың күптән үҙаллы. Ә был бисура бисә арағыҙҙы боҙһа, үкенәсәкһең бит. Еңгәй һине ғәфү итерме?

- Борсолма ағайың өсөн. Ҡатын минән дә шәп ир тапмаясағын белә. Яңғыҙ тороп ҡалғыһы килмәһә, шып-шым буласаҡ. Һинә лә артығы кәрәкмәй. Судьялар донъяла нисәү генә, беләһеңме?

- Шулай ҙа...

- Ә балаларға килгәндә, һәр бала аҡсалы бай ата-әсәне ярата, - Ағаһының көләүенән тәне сымбырлап китте.

✓ *Шул саҡ мин ҡорттарҙың тыныс ҡына гөжләп осоуына иғтибар итәм. Бына һиңә - мә, уларҙы тыңлап ултырыуы ҙа күңелгә ниндәйҙер рәхәтлек бирә икән. Тәңгә элек мин белмәгән ниндәйҙер илаһи тыныслыҡ килә.*

- Ҡурҡыныс кеше һин.

- Аҡыл һатма, йәме.

Илдар ағаһы артабан һүҙҙе ҡуйыртманы, хатты йомарлап кеҫәһенә тыҡты ла, хушлашып сығып та китте.

Ағаһының шулай дорфа ғына яуап биреп сығып китеүенә йәне көйгән Сара байтаҡ ваҡыт үҙенә урын таба алманы. Рауилы хыянат иткән тип уйлап, үҙе саҡ аҡылдан яҙманы. Ә еңгәһе ишетһәсе? Күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Мәүсилә еңгәһе Илдарым тип өҙөлөп кенә тора. Ағаһының күп уңыштары еңгәйҙең фиҙаҡәрлеге менән бәйле - ғаилә мәшәҡәтен, балалар ҡарауҙы ул үҙ өҫтөнә алды. Ире әҙер ашҡа, йылы түшәккә генә ҡайта. Илдар кешеләрҙе хөкөм итә, бына үҙенең ҡылығын хөкөм итеүсе юҡ. Әллә Мәүсилә еңгәй Илдарҙың икенсе яҡта "йөрөп" ҡайтҡанын беләме икән? "Ҡатын менән дә шәп ир тапмаясағын белә", тигән ағаһы хаҡлымы әллә? Шулай уйланып йөрөй торғас, түҙмәне, еңгәһенә шылтыратып алырға булды:

- Мәүсилә еңгәй, һин ни хәлдә?

- Бикәсем онотмаған икән, тип ҡыуанып киттем әле, - тине алсаҡ еңгәһе. - Бына ағайың яратҡан былауҙы бешереп йөрөйөм.

- Эше күп, һуң ҡайта, тиһеңме?

- Эй-й, енел түгел эше. Эше өйгә эйәреп ҡайта. Закондар, статьялар - бар һөйләгәне. Кеше яҙмыштары...

- Шундай егәрле ирҙе ҡармаҡларға тырышҡандар юҡмы? - тип шаяртты Сара.

- Уның беренсе ҡатыны мин булһам, икенсеһе - эше, - тип көлдө Мәүсилә.

- Берәй кәңәш һорап шылтыратам әле, еңгәй. Минең Азалия тигән дуҫым бар. Ире менән бик татыу торалар, тик анау көнө иренең курткаһынан бер хат табып алған. Ниндәйҙер бер ҡатындың мөхәббәт хаты икән. Минә хәҙер нимә эшләргә, тип әхирәтем миңә шылтыратты. Мин дә аптырап ҡалдым. Һин, еңгәй, беҙҙән олораҡ, тормош тәжрибәң бар, бындай хәлгә нимә тип әйтер инең? Ире менән ныҡ итеп талашһынмы, әллә белмәмеш булһын да ҡуйһынмы? Улай йәшәүе лә бик ауыр бит.

Еңгәһе уфтанды.

- Ҡуйсы-ҡуйсы, ҡалай ауыр хәлгә тарыған. Ҡыҙып китеп, берүк ҡорған донъяһын емерә күрмәһен. Ишеттеңме? Иң ҙур алйотлоҡ ҡыҙыу ҡанлылыҡ арҡаһында яһала. Ярһыу - ул эстәге зәһәр ут. Был ут эргә-тирәләге бөтә нәмәне яндыра ла ҡуя, ҡабат терелтеп булмай. Ире менән тыныс ҡына аңлашһын. Теге уйнаш бисәне лә күрергә кәрәк.

- Нишләп уйнаш?

- Һуң... Ғаиләне боҙорға йөрөгән бисә нишләп уйнаш булмаһын? Никах юҡ, кеше ирен аҙҙыра... Ул ҡатындың нисә ир менән йөрөгәнен әхирәтең белмәйҙер, тип уйлайым.

- Аңланым, еңгәй, рәхмәт!

Был хәл Сараға йән йөрен нығыраҡ баһаларға өйрәтте шикелле, иренә икенсе күҙ менән ҡарай башланы, бүтән ваҡыттағыға ҡарағанда, наҙлыраҡ, яғымлыраҡ булды...

**(Дауамы бар).**

*ХАЛЫҠ АҠЫЛЫ*

**Бер мәл мин бал ҡорто тоторға булып киттем. Әйткәндәй, нишләптер күптәр бал ҡортон, ҡорт, тип кенә атарға күнеккән икән. Умартасылар үҙ-ара, ҡорт алдым, ҡорт сығарҙым, ҡорт бикләнем, ҡорт айырҙы, ҡорт ултырттым, тип һөйләшәләр икән. Мин дә хәҙер кеше ыңғайына, ҡорт алырға булдым әле, тип эре сирттереп йөрөгән булам. Көләш көлгән була. Йәнәһе лә, минән булмай. Ә мин уға үс итеп, ҡорттоң иң шәбен аласаҡмын, Алла бирһә, иң шәп ҡортсо буласаҡмын (һуңғыһы артығыраҡ ысҡынды, буғай).**

# ҠОРТТОҢ ҠОТОН ҺАҠЛА,

## йәки Бөрйәнгә ҡорт алырға тип килгән берәүҙең һөйләгәндәренән



Ә ҡорттоң иң шәбе, әлбиттә, Бөрйәндә! Бөрйән ҡортон бигерәк маҡтайҙар. Үҙе уҫал, үҙе егәрле, иртә тора, һуң ята, ямғыр яуғанда ла эшләй, ҡар аҫтында ла ҡышлай, балды биҙрәләп йыя... Үҙен күргән юҡ былай. Ә бына кеше һөйләгәненә ышанһаң, Ер йөҙөндә Бөрйән ҡортона еткән ҡорт юҡ һымаҡ. Һүҙ әйтелде - уҡ атылды, тигәндәй, күп уйлап тормаһым. Анан-бынан йыйындым да сыҡтым да киттем Бөрйән тарафтарына. Хәҙер юлдар шәп бит. Һә, тигәнсә килеп тә еттем район үҙәгенә. Әйткәндәй, картала ул "Иҫке Собханғол" тип күрһәтелгән. Ә бөрйәндәр уны ябай ғына итеп "Бөрйән" тип әйтә лә ҡуя икән. Үҙҙәре әйтмешләй, хәтәр уңайлы, һәләк йәтеш. Ысынлап та, телде әллә нисәгә болғап, әллә нисәгә бөкләп, Иҫ-кеее Соб-ханғооол, тип һуҙып-муҙып тораһы түгел. Бер тынала ҡыҫҡа ғына итеп әйтәһең дә ҡуяһың - Бөр-йән! Исеме лә яғымлы, күңелгә лә ятышлы.

Ҡорт һатырға тейеш кешене мин алдан бер танышым аша белешкәйнем. Ул мине Бөрйәндә ҡаршы ла алырға тейеш ине. Әммә ҡаршы ала алманы. Көтмәгәндә бер эше килеп сыҡҡан икән. Хәл юҡ, үҙемә йөрөргә тура килә инде Бөрйән буйлап, ҡорт эҙләп. Әммә оҙаҡ йөрөргә тура килмәне. Кәрәкле өйҙө тиҙ таптым. Уның ҡапҡа эргәһенә еткәс, бер аҙ баҙап ҡалынды. Был мәлдә хужалар әллә торғандар, әллә әле ял итәләр, тигәндәй. Иҫке Собханғолға, әй, Бөрйәнгә былай тиҙ, иртә килеп етермен, тип кем уйлаған. Шулай ҙа ҡыйыуһыҙ ғына ҡапҡаға туҡылдатам. Күп тә үтмәй, теге яҡтан мине ҡыуандырып, иду-иду, тигән тауыш ишетелә. Иду-идуға бер аҙ аптырай биреп ҡуйыла. Таныштың әйтеүе буйынса, миңә ҡортто башҡорт кешеһе һатырға тейеш ине. Әллә берәй урыҫтың ҡапҡаһын яңылыш туҡмап торам инде. Ярай, урыҫ булһа ла артыҡ зыян юҡ. Бик тә булмаһа, Христос воскрес, тип әйтермен дә ҡуйырмын. Минең бер таныш бер урыҫҡа шулай тип әйткән икән, уны... Ярай, был турала, насип итһә, икенсе юлы яйлап һөйләрмен әле. Ә әлегә минең уйҙарҙы шығырлап асылған ҡапҡа өҙә. Ирекһеҙҙән йылмайып ҡуям - минең алда йәшел түбәтәй кейгән, ыҡсым ғына һаҡал-мыйыҡ ебәргән саф башҡорт бабайы йылмайып тора! Уның умартасы икәненә бер ниндәй ҙә шик ҡалмай. Бер аҙ хәйләкәр күҙҙәр, бер аҙ көләмһерәп торған ауыҙ ситтәре, һынамсыл ҡараш, "бал тамып торған" ҡулдар, бер аҙ көмөрәйә төшкән яурындар... Биллаһи, Аллаһы Тәғәлә бары тик умартасыға ғына тап ошондай сифаттарҙы алдан уҡ әҙерләп-тәғәйенләп ҡуйғандыр.

Һаулыҡ һорашабыҙ һәм урам эсенә үтәбеҙ. Яҙмаһам да булалыр, бөтә ерҙә тәртип, бөтә ерҙә бөхтәлек-таҙалыҡ. Минең күңелгә һары май булып яғылып, рәт-рәт булып ҡорт ояларҙы теҙелеп киткән! Булды былай булғас, тип ҡулдарҙы ыуып алам. Юл уңды, мәйтәм. Ҡайтам былай булғас мин Бөрйәндән ҡорт тейәп! Үҙем дә һиҙмәй ҡалам, эйәкте ҡаға-ҡаға күҙ менән генә ояларҙы иҫәпләй башлайым. Һанап сыҡҡас, аптырап ҡуям - йөҙгә яҡын күс ултыра түгелме? Әллә яңылыштым микән? Бармаҡтарҙы бөгә-бөгә киренән иҫәпләй башлайым. Тәк, ҡойма буйында - ун алты, эргәһендә - ун ете, йәмғеһе - утыҙ өс, ә өй буйында... Шул мәл хужа итәғәтле генә йүткереп ҡуя. Шунда ғына бабайға Бөрйәнгә килеүемдең төп сәбәбен бер тынала "пулеметтан" һиптерәм. Шул мәл минең һөйләп бөткәндә лә көтмәй, бабай ҡапҡа яғына юл ала. Уны асып, иғтибар менән бер уңға, бер һулға ҡарай. Шунан ҡапҡаны матурлап яба һәм минең эргәгә килә. Был нимә булды инде, тип мин аптырапҡырап бабайға ҡарайым.

- Мин һине һыбай сабып килгән, тип торам бит. Шул өтөк атыңды һалҡын лапаҫ аҫтына ҡуйып, бер аҙ һыуытып алырға ине иҫәп.

Ирекһеҙҙән көләмһерәп ҡуям. Шул хәтлем ярһыма әле, тигәнде ҡалай оҫта төшөндөрөп ҡуйҙы хужа. Шунан ул ыҡсым ғына эшләнгән эскәмйәгә ултыра. Оҙаҡ йылдар хеҙмәт итәлер инде ул хужаға. Таҡталары яп-ялтыр булып шымарып бөткән. Бабай эйәге менән ымлап, эргәһенән миңә лә урын күрһәтә. Ярыш ултырып, бер аҙға тын ҡалабыҙ. Шул саҡ мин ҡорттарҙың тыныс ҡына гөжләп осоуына иғтибар итәм. Бына һиңә - мә, уларҙы тыңлап ултырыуы ҙа күңелгә ниндәйҙер рәхәтлек бирә икән. Тәңгә элек мин белмәгән ниндәйҙер илаһи тыныслыҡ килә. Донъя мәшәҡәттәре, нисектер, юғалып ҡалғандай була. Бөрйәнгә килмәһәм, был турала, бәлки, ғүмере белмәҫ тә инем. Ябай ғына ҡорттон гөжләүенән дә шундай күңел тыныслығы алып була икән! Күпмелер шулай ләззәтләнеп ултыра биргәс, хужа миңә борола төшә һәм минең яуырындарҙы еңелсә яратып, ошолай әйтеп ҡуя:

- Мин һиңә ҡортомдо һатмаҫҡа, тип уйлап ултырам әле.

Мин тетрәндем! Әгәр ҙә мәгәр мәлендә ҡайным, мин һиңә ҡыҙымды бирмәҫкә тип уйлап ултырам әле, тип әйтһә лә былай уҡ тетрәнмәҫ инем (бирмәһә, аптыраған юҡ, урланым, ҡастым, шуның менән вәссәләм).

- Нишләп?

Бабай көләмһерәй биреп әйтеп ҡуя.

- Күрше-күләнде көлдөрөп, илап ебәр тағы, йәме.

Минең күпкә шиңеп киткән яурындарға ҡулдарын һала.

- Әйт әле, улым, бына һин үҙ атыңды төптө белмәгән-күрмәгән берәй кешегә һатып ебәрер инеңме?

Аптыраулы ҡараштым уға төбәйем. Тиктомалдан әллә ниндәй мәғәнәһеҙ һорау биреп ҡуйҙысы. Мин ат тураһында гәп һатып ултырырға түгел, ә ҡорт һатып алырға килгәнмен. Әммә бабайҙың ҡараштары бик уйсан. Буштан ғына бындай һорау биреп ултырғанға һис кенә лә оҡшамай. Шул мәл минең күҙ алдыма үҙебеҙҙең атыбыҙ килеп баҫа. Үҙе лә матур, исеме лә матур уның - Ыласын. Хәҙер олоғайҙы инде. Мин иҫ белгәндән бирле атайым ул атты көтә. Бәләкәй саҡта уның эргәһенә йыйылған күгәүендәрҙе ҡарап ултырырға, аҙаҡ торорға маташҡан мәлдәр һаман иҫтә. Хатта бер мәл бөтөнләйе менән ат аҫтына инеп киткәнмен. Нисек типмәгән дә нисек тапамаған. Аҡыллы шул беҙҙең атыбыҙ. Шул мәл атайым менән кис ат тышап ҡайтҡан мәлдәр иҫкә төшә. Эй, ваҡыты менән һағындырып китә шул саҡтар. Атайым мине күтәреп, атҡа мендерер, ә үҙе атты етәкләп алып ине. Бармаҡтар менән йән көскә ат ялына йәбешкән булаһың (улары шыуғалаҡ бит әле), ат атлаған һайын тегеләй-былай бәүелеп бараһың. Тышалған ат беҙҙе бышҡырып оҙатып ҡала. Ҡайтҡанда, әлбиттә, атай елкәһендә ҡайтаһың. Атыбыҙға бәйле йылы хәтирәләрҙе иҫләй башлаһаң, күп инде улар. Атты һыу индереп ҡайтыуҙар... Бер арба булып бесәнгә барыуҙар... Утын тейәп ҡайтыуҙар... Зыңғырлы дуғалар менән ҡунаҡҡа йөрөүҙәр... Һабантуйға барыуҙар...

Бабайҙы әйтәм, бигерәк урынһыҙ, бигерәк мәғәнәһеҙ һорау бирҙе. Күңелгә хатта бер аҙ ҡыйын булып китте. Нишләп беҙ үҙебеҙҙең атыбыҙҙы һатырға тейеш әле. Етмәһә, төптө белмәгән-күрмәгән кешегә. Ә шулай ҙа кемдер берәү атыбыҙҙы һатып алам тип килә ҡалһа... Ҡуй, буш нәмә уйлап, башты ҡатырып ултырмайым әле. Күрәләтә кем үҙ дуҫын һатып ебәрһен инде!

Бабай, әйтерһең, минең ҡараштан бөтәһен дә аңлай.

- Бына шулай шул, улым (ауыр көрһенеп ҡуя). Бына бөгөн мин дә үҙ ҡорттарым менән ошондай ауыр хәлдә. Улар ҙа күптән инде минең дуҫтарыма әйләнеп бөткән.

**(Дауамы 12-се биттә).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘШЕЛ СӘЙ ЭС

■ Ҡайһы берәүҙәр ябығыу өсөн диета тотҡандан һуң ит ризыҡтарынан баш тарта. Бындай кешеләргә соя нигеҙендәге диета тоторға мөмкин, ти табиптар. Соя - тәбиғи продукт, ул насар холестерин күләмен кәметә, майҙарҙы яндырырға булышлыҡ итә. Әммә соя продукттарын ун көндән дә оҙағыраҡ ашарға ярамай. Диета мәлендә тулыһынса тәм-томдан, икмәктән, макарондарҙан, картуфтан баш тартырға кәрәк. Йәшел сәй һәм һыу эсеү файҙалы.

■ Инфаркт, шәкәр диабеты, стенокардия, ҡан тамырҙары ауырыуҙары дөрөҫ йәшәү рәүешен күҙәтмәү һәм һимеҙлек һөҙөмтәһендә килеп сыға, тип иҫәпләргә күнегеп киткәнбеҙ. Шулай ҙа күп тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң, Шотландия ғалимдары сәләмәтлек өсөн һимеҙ булыу күпкә яҡшыраҡ икәнен раҫлаған. Бер туҡтауһыҙ диеталарҙа ултырып, йә ябығып, йә һимереп йәшәүселәр ғүмер оҙайлығын 25 процентҡа ҡыҫҡарта икән. Сөнки был йөрәк һәм ҡан тамырҙары сәләмәтлегенә насар йоғонто яһай, был саҡта йөрәк өйәнәгенән үлеү хәүефе 30-90 процентҡа арта. Ғалимдар был күренеште йо-йо эффекты тип атаған. Йо-йо эффекты онкологик сирҙәргә лә килтерә.

■ Яуаплы имтихандар, сессия мәлендә барлыҡ студенттар, уҡыусылар бер төн эсендә бар мәғлүмәтте хәтеренә һеңдерергә ярҙам итеүсе саралар тураһында хыяллана. Белгестәр был мәлдә какао эсергә кәңәш итә. Уның файҙаһы тураһында боронғо индеецтар ҙа белгән. Юҡҡа ғына шоколад көслө биостимулятор иҫәпләнмәй. Борон шуға ла мөһим һынауҙар алдынан яугирҙарға какао биргәндәр. Әле лә уҡыусылар араһында шундай фекер таралған, йәнәһе, имтихан алдынан шоколад ашаһаң, баш яҡшыраҡ эшләй. Ысынында иһә шоколад әллә ни файҙа бирмәй, баш мейеһе эшмәкәрлеген әүҙемләштереү өсөн какао эсергә кәрәк. Какао составында теобромин һәм ҙур күләмдә антиоксиданттар бар. Ул баш мейеһе ҡан әйләнешен яҡшырта, һөҙөмтәлә реакция, хәтер, мәсьәләләрҙе хәл итеү яҡшыра, кәйеф күтәрелә, депрессия синдромы юҡҡа сыға. Баш мейеһе өсөн балыҡҡа ҡарағанда емеш-еләктәр файҙалыраҡ. Бигерәк тә көртмәле, ҡурай еләге, ҡара бөрлөгәндә антиоксиданттар һәм биофлавоноидтар күп. Көртмәле Альцгеймер сирен иҫкәртеүсе булып тора, сөнки баш мейеһенең ҡартайыуы менән көрәшә. Ыңғай сифаттары яғынан ер еләге лә көртмәленән ҡалышмай. Ҡара һәм йәшел сәй ҙә баш мейеһен әүҙемләштерә. Экзотик ризыҡтар араһында авокадоға иғтибар бирергә кәрәк. Унда майлы кислоталар күп, улар ҡан әйләнешен яҡшырта. Авокадо составындағы калий ҙа баш мейеһе эшмәкәрлегенә бик кәрәк.

■ Организмға йод етешмәү арыуҙың сәбәбе була ала. Ғәҙәттә, яҙ һәм йәй миҙгелдәрендә энергия дефициты булырға тейеш түгел һымаҡ, шулай ҙа бындай күңелһеҙлек килеп тыуған икән, туҡланыу режимына иғтибар итегеҙ, ти белгестәр. Әгәр ҙә тиҙ арыйһығыҙ, һалҡын тейеп бара, сәстәрегеҙ ҡойола, тирегеҙ кибә икән, етмәһә, хәтер насарайып, ишетеү һәләте түбәнәйһә, йөрәк тибеше боҙолһа, организмға йод етешмәүе ихтимал. Йод диңгеҙ кәбеҫтәһендә, балыҡ һәм диңгеҙ ризыҡтарында күп. Йодлы тоҙҙо ла ҡулланырға була, әммә тоҙҙо оҙаҡ һаҡлаһаң, йодтың күпселек өлөшө юҡҡа сыға, сөнки йод - осоусан берләшмә.

ХАЛЫҠ АҠЫЛЫ



# ҠОРТТОҢ КОТОН ҺАҠЛА,

## йәки Бөрйәнгә ҡорт алырға тип килгән берәүҙең һөйләгәндәренән

(Башы 11-се биттә).

Бер аҙға тын ҡалабыҙ. Ә нишләп һатырға булдығыҙ һуң? Әлбиттә, был һорау минең тел осонда ғына тора. Әммә һорарға ғына уңайһыҙланам. Бындай сетерекле хәлдән бабай мине үҙе ҡотҡара.

- Бер бөртөгөн дә һатмаҫ инем, улым. Ҡартайып ҡына әрәм булынды. Бына быйыл миңә һикһән йәш тулды. Хәҙер йөҙләп күс ҡарарға хәл етмәй (бер аҙға тынып ҡала). Ә уларҙың һәр береһен еренә еткереп ҡарарға кәрәк. Иң мөһиме, ҡорт һинең ғәйеп менән өшөргә, асығырға, ауырырға, унан бигерәк, Аллам һаҡлаһын, үлергә тейеш түгел. Ҡорттоң гонаһы үтә ҙур, улым. Бигерәк тә асығып үлгәндәренең рәнйеше көслө. Хәҙер мин оло йәштәмен. Әбейем дә минән артыҡ ҡалышмай. Аллаһы Тәғәлә беҙгә ғүмер биргән. Олоғайған көндә ҡорт гонаһын, уның рәнйешен алып ултырғы килмәй.

Ә нишләп балаларына таратып бирмәй икән? Әйтерһең, был һорауҙы бирергә уҡталғанды бабай алдан һиҙеп ултыра.

- Балаларға ла бирергә булыр ине. Әммә бөгөн мәле түгел. Дөрөҫөрәге, балалар әле бешеп-өлгөрөп етмәгән. Һәр береһенең үҙ эше, үҙ шөғөлө, үҙ донъяһы, тигәндәй. Ҡортто бирермен дә ул, ә улар әрәм итеп ҡуйһа... Алла бирһә, мәле етер. Шул ваҡытта мин уларға тыныс күңел менән ҡорттарымды тапшырырмын. Иншаллаһ, шул көндәрҙе күрергә насип итһен.

Бына хәҙер аңлашылды, тип уйлап ҡуям мин. Бабай һүҙен дауам итә.

- Борон умартасы үҙ ҡортон һатырға тырышманы. Туй-байрам мәлендә бүләк итте. Улан-ейәндәренә таратып бирҙе. Элек ололар ошолай әйтер ине. "Ҡорт һатып байыҡма, бал һатып байыҡ". Күс һатмауҙың тағы ла бер яғы бар. Элек умартасы даланлы ҡортоноң ситкә китеүенән ҡурҡты. Бөгөн ололарҙың ошондай әйтеме бер аҙ онотола төштө, буғай: "Умарталыҡта даланлы ҡорт була, уны күҙ нурындай һаҡлағыҙ. Даланлы ҡорт ситкә китһә, умарталыҡтың ҡото китә".

Тағы бер аҙға шымып ҡалабыҙ. Бабай көрһөнә биреп һүҙен дауам итә.

- Тормош ваҡыты менән беҙ уйлағанса ғына бармай шул. Бына минең кеүек хәлгә ҡалыусылар элек тә булған. Ваҡыты менән умартасы ҡорттарын һатырға мәжбүр булған.

Бына бит, тип уйлайым мин, һатырға мәжбүр булған. Ә нишләп был бабай миңә үҙ ҡортон һатмаҫҡа уйлай икән? Бабай һүҙен дауам итә:

- Әммә тәү осраған кешегә һатмаған үҙ ҡортон умартасы. Ҡотло кешегә генә һатҡан. Бындай осраҡта даланлы ҡорт үҙ көсөн юғалтмаған - ул ике ҡортсоға ла ҡот килтергән. "Ҡотһоҙға ҡорт ҡунмаҫ, умартаһында ҡорт тормаҫ!" - бындай мәҡәлде халыҡ бит бушҡа ғына әйтмәгән.

Тимәк, мин ҡотһоҙ! Бындай ауыр асыштан миңә уғата ҡыйын булып китә. Бабай миңә бер аҙ текләп ултыра һәм ниндәйҙер етди ҡарарға килә.

- Былай һин һәйбәт егеткә оҡшағанһың (күңелгә йылы йүгерә). Мин һиңә һынау өсөн өс күс һатырға булдым. Тик бер нисә шартым бар. Тәүге шартым ошолай. Минең теләктәрҙе теүәл үтәргә тырыш. Уларҙы мин ҡағыҙға яҙҙым. Өйөңдә берәй күренгәнерәк ергә элеп ҡуйырһың. Ул һәр ваҡыт мине, минең теләктәрҙе иҫеңә төшөрөп торһон. Икенсе шартым ошолай. Әленән-әле шылтыратып ҡорттарҙың хәле тураһында һөйләп тор. Айына бер-икене хәлде аңғартһаң, булды. Өсөнсө шартымдың үтәлеше минең ҡарамаҡта булыр. Кәрәк тип тапһам, һиңә ҡунаҡҡа барып сығам һәм ҡорттарымдың хәле менән үҙем танышам. Әгәр минең ышанысымды аҡлаһаң, киләсәктә тағы ла күс һатырмын. Килештекме, улым!

Уйландырҙы бит бабай! Ҡорт һатып алыу юл ыңғайы магазинға йүгереп инеп сыҡҡан кеүек кенә булманы. Баҡтиһәң, умартасы булыу бик яуаплы эш икән. Әммә мин дә төшөп ҡалғандарҙан түгел. Ни тиһәң дә, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татыған кешемен. Шуға өҫтәп, ике балам бар. Әле миңә егерме ете йәш. Ошо ғүмер эсендә ниҙәр генә күрелмәне, ниҙәр генә кисерелмәне. Баштан үткәргәнкисергәндәрҙе һөйләй башлаһаң, ике китапҡа ла һыймаҫ әле. Шуға мин ышанысլы рәүештә бабайҙың ҡулын ҡыҫам.

- Килештек, ней, бабай! Ҡорттарҙы бар күңелемде, ней, һалып ҡарармын. Һәр шартыңды, ней, ҡабул итеп алам, теләктәреңде, ней, үтәргә тырышырмын (һай, ысын ир һүҙе булды был, тип ҡыуанғандыр әле хужа).

Бөрйән бабайы түш кеҫәһенән дүрткә бөкләнгән дәфтәр бите сығара (алдан әҙерләп ҡуйған, күрәһең) һәм миңә тоттора.

- Минең теләктәр ошонда инде, улым.

...Әле бына өс күс тейәп ҡайтып барам тыуған яғыма. Әйткәндәй, мине ныҡ ололанылар. Оло ҡунаҡты хөрмәт иткән кеүек, сәй эсереп оҙатып ҡалдылар. Хужаның әбейе урыҫ икән. Башҡортса шәп белә. Ҡайҙан өйрәнгәндер. Үҙе, мин урыҫ түгел, мин мәрйә, тип кеткелдәп көлгән була. Мәрйәһе кем булалыр инде. Әле уйлап барам, ҡорт ҡына түгел, оло фәһем дә алып ҡайтып барам мин Бөрйән тарафтарынан. Бөрйән умартасыһының теләктәрен үтәргә, уның ышанысын аҡларға насип итһә ине, тигән теләктә ҡалам!

**Бөрйәндән күрше районға ҡайтып барыусы йәш умартасы Сәлих СӘЙЕТОВ.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# БАЛАЛАР ҘА АУЫРЫЙ



**БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан белдереүҙәренсә, "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығы мәғлүмәттәре буйынса былтыр ноябрь аҙағына коронавирус инфекцияһы 1075 балала асыҡланды, шуларҙың 659-ы һауыҡты.**

Ун ай эсендә 3199 балала пневмония сире теркәлгән (2019 йылдың ошо осоронда - 6861). БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте етәксеһе Софья Алешина хәбәр итеүенсә, 2020 йылдың көҙөнән, уҡыу йылы башланғандан алып, уҡыу-уҡытыу учреждениеларында яңы коллективтар ойошторолоу һәм аралашыуҙар йышайыуы менән бәйле балалар араһында ОРВИ һәм пневмония сире йоҡтороусылар һаны артты. COVID-19 менән йышыраҡ Өфөлә һәм Салауат ҡалаһында зарарланалар. Бөрйән, Хәйбулла һәм Әбйәлил кеүек райондарҙа, бәхеткә күрә, бындай бер генә осраҡ та юҡ. "Коронавирус менән дауаханала ятҡан балалар араһында ИВЛ-да ятыусылар, үлем осраҡтары юҡ",- тип хәбәр итте министрлыҡ вәкиле. Яңы коронавирус инфекцияһы менән сирләүсе балалар өсөн Өфөнөң Запотоцкий урамындағы 4-се Йоғошло ауырыуҙар клиник дауаханаһында, Дим районы ҡала клиник дауаханаһында, Тиҙ ярҙам ҡала йоғошло ауырыуҙар дауаханаһында һәм Стәрлетамаҡ ҡала йоғошло ауырыуҙар дауаханаларында балалар урындары булдырылды. Мохтажлыҡ булғандарға реабилитация саралары балаларҙың йәшәгән урындары буйынса участка педиатрҙары күҙәтеүендә алып барыла.

***Өфөләге 4-се балалар поликлиникаһының баш табибы Павел Павлов "Балалар коронавирус инфекцияһын нисек кисерә?" тигән һорауға ошолай яуап бирҙе:*** "Өлкәндәргә ҡарағанда балалар был инфекция менән һирәк сирләй, күберәк осраҡта еңел үткәрә һәм билдәләрһеҙ үтә. Бәләкәй йәштәгеләргә, ғөмүмән, был вирус һирәк йоғоусан. Имсәк балаларға был сир менән тыуған саҡта зарарланыуы хаҡында раҫланған мәғлүмәттәр юҡ. Сир йоҡторған балаларҙа инде, өлкәндәрҙәге кеүек үк, юғары температура, респиратор билдәләр күҙәтелә. 0-дән 4 йәшкә тиклемге кескәйҙәрҙә аҙна буйына һуҙылған субфебриль температура күҙәтелә, кис ул 37,6 градусҡа тиклем күтәрелә, йүтәл, тымау яфалай. Сир күп осраҡта ҡәҙимге ОРЗ һымаҡ үтә. 14 йәшлек үҫмерҙәрҙә танау тона, еҫ һәм тәм тойоу юғала, субфебриль температура була. Рәсәй буйынса балалар араһында ковид менән сирләүселәр һаны 8 проценттан да артыҡ түгел".

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘҺЕ

**Ә шулай ҙа заманында уны иң ҙур урман ҡошо булған, тейҙәр. Шундай дәү булған, тей, хатта уны күтәрерлек ағас, ул һыу инә алырлыҡ йылға-күл булмаған. Әгәр ысынды һөйләһәләр инде (ышанырлыҡ та түгел, әй), селдең ауырлығы биш йөҙ килограмм самаһы булған! Дәү кәүҙәле булғанға сел ояны ағаста түгел, ә ерҙә эшләгән. Һыу инеп булмай, тип аптырап тормаған, "рәхәтләнеп" саңда аунаған. Бына шулай тормош шарттарына яраҡлашып һәүетемсә генә көн күргән сел.**

# ХӘҘЕР ИНДЕ СЕЛ БӘЛӘКӘС



Әммә башҡа урман йәнлектәренә тынғы булмаған. Сел ерҙән күтәрелгән саҡта урман шаулап, саң менән ҡойонған мөләндә ҡойондар уйнап торған, тей. Шундай көслө ғәрәсәт ҡупҡан, хатта эргә-тирәләге башҡа ҡоштарҙың оялары пыран-заран килгән. Кемдер балаһын юғалтҡан, ә кемдер үҙе юғалған, тигәндәй. Урман йәнлектәре ыҙалауҙың тамам сигенә еткән. Сыҙарлыҡ хәлдәре ҡалмағас, Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итергә мәжбүр булғандар. Берәй сараһын күр инде, ошо селдән тынғы таба алмайбыҙ, уның осор мәле етһә, ҡурҡып ҡына торабыҙ, тигәндәр. Уларҙы тыңлағандан һуң Аллаһы Тәғәлә асыулы һәм уйсан ҡараштарын селгә төбәгән. Унһыҙ ыҡмыҡ иткән, башын былай борған, тегеләй борған. Аптырағас, ҡанаттарын ике яҡҡа йәйеп ебәреп, ошолай тип әйтеп ҡуйған: "Былдай дәү кәүҙәне мин үҙем һорап алманым да инде! Уны һеҙ үҙегеҙ миңә бирҙегеҙ", тип, тураһын әйткән дә ҡуйған сел. Аллаһы Тәғәлә аптырауға ҡалған. Бер аҙға уйлап торғандан һуң, Ул ошондай ҡарар сығарған: селдең "артыҡ" итен башҡаларға тигеҙ итеп бүлеп бирергә! Шул мәл дәү булып ултырған сел ҡапылдан ғына күҙгә күренеп ябыға, ә башҡа йәнлектәрҙең кәүҙәләре бер аҙ үҙгәрә башлаған, тей. Бына әкәмәт, тик торғандан ҡуяндың ҡолаҡтары оҙонайып киткән. Өкөнөң былай ҙа өлпәй ҡаштары тағы өлпәйә төшкән. Етмәһә, бер аҙ ҡылыйыраҡ күҙе түп-түңәрәк булған да ҡуйған. Төлкөнөң ҡойроғо апаруҡ оҙонайған. Бүренең башы ҙурая төшкән. Айыуҙың ҡорһағы бер аҙ "олпатланған". Аҡҡоштоң муйыны, тумыртҡаның суҡышы, боландың мөгөҙө оҙонлоҡҡа үҫкән. Ҡыҫҡаһы, һәр йәнлеккә ниндәйҙер өлөш эләккән. Бер мәл Аллаһы Тәғәлә селгә күҙ һалып ебәрһә... уның тәнендә ни бары биш йөҙ грамм ғына ит ҡалған, тей. Артығыраҡ ҡыландым, буғай, тип уйлап ҡуйған Аллаһы Тәғәлә. Һәм шунда уҡ Ул үҙ фарманының көсөн туҡтатҡан!

Барлыҡ йәнлектәр яңы ғына тау һымаҡ булып ултырған дәү селдең ҡуш йоҙроҡ ҙурлыҡ ҡына булып ҡалғанына бер аҙ аптырап, хатта уны бер аҙ йәлләп ҡарап торғандар. Былдай хәлдә ауыр кисергән сел. Был тирәнән тиҙерәк осоп китергә теләгән. Ул бәләкәй ҡанаттарын ышаныһыҙ ғына берикене ҡағып ҡараған да уларҙы елпетә-елпетә өҫкә күтәрелә башлаған. Урман йәнлектәре элекке ғәҙәттәре буйынса баштарын әйә биреп ҡасырға әҙерләнә башлаған. Әммә... дауыл-ҡойон ҡупмаған. Сел фырылдап ҡына ерҙән күтәрелгән һәм ағас ботағына барып ултырған. Урман йәнлектәре еңел тын алып ҡуйған. Тора-бара һәр кеме йәйлап ҡына урманға таралышҡан.

Бына ошолай сел бәләкәй булып ҡалған. Ә шулай ҙа Аллаһы Тәғәлә уның "дауыл ҡуптарып" ерҙән күтәрелеүен иҫтәлеккә тип, уға ҡалдырған. Урманда булғандарҙың күбеһе быға шаһиттыр. Тын ғына урман буйлап китеп барған мәлдә ҡапыл ерҙән оло тауыш сығарып фырылдап бер нисә ҡош күтәрелә башлай. Тертләп китеп, шул яҡҡа ҡарайһың. Ә ысынында иһә улар бәләкәй генә бер нисә сел икән. Улар ағас ботағына барып ултыра һәм башындағы бүректәрен ослайтып, тирә-яҡты иғтибар менән күҙәтә башлай. Ниндәйҙер хәүеф барлығы тураһында башҡаларҙы ла иҫкәртергә онотмайҙар. Селдең тауышы үҙенсәлекле генә. Ул таштан ташҡа һикереп, сөбөрләп кенә аҡҡан шишмә тауышын хәтерләтә.

Әйткәндәй, сел һаман ояны ерҙә ҡора һәм һаман саңда ҡойона. Берәй ағас ботағына оя әтмәләргә, берәй шишмәгә төшөп һыуҙа йыуынырға өйрәнә алмаған, күрәһең. Шуныһы үҙенсәлекле, сел ғаиләһе бер тәҙәгән ояһын ғүмер буйына ташламай. Ул йыл һайын ипкә-һапҡа килтерелеп тора. Инә сел ҡыҙыл-көрән таптар менән сыбарланған йомортҡалар һала. Ерҙә йомортҡа баҫып ултырған селде дошмандары еңел генә табыр кеүек. Әммә был ҡошто төҫө һаҡлай. Селдең һырты һорғолт көрән, ҡара һыҙығы бар. Ҡорһағы аҡһыл һоро, ул көрән таптар менән сыбарланған. Шым ғына ултырған сел һынып төшкән берәй ботаҡтың йә ағас төбөнөң ниндәйҙер бер өлөшөнә әйләнә, уны хатта төлкөбүре лә күрмәй, эргәһенән генә үтеп китә.

Сел ғаиләһе күптәргә үрнәк булырлыҡ. Йәш саҡта ҡауышҡан парҙар ғүмер буйына бер-береһенә тоғро ҡала. Ата сел һәр ваҡыт ғаиләгә ныҡлы терәк була - йомортҡа ла баҫыша, ашарға ла таба, балаларҙы ла тәрбиәләшә, ояны ла һаҡлай, үҙ еренә башҡаларҙы ла индермәй һәм башҡаһы. Саңда ҡойонор өсөн ерҙе соҡоп, ыҡсым ғына "мунса" әтмәләй. Ә шулай ҙа ваҡыты менән парҙар бер-береһен юғалта. Ҡайһы ваҡыт йомортҡа баҫып ултырған ҡош төлкө-бүрегә юлығып ҡуя, ҡайһы берәүһен һунарсы атып ала. Иң күбен һыуһар ҡыра, ул селдең төп дошманы булып иҫәпләнә. Үҙ парын юғалтҡан сел былдай ҡайғыны ауыр кисерә. Ул теп-теүәл бер йыл буйы яңғыҙы донъя көтә. Күңел яралары бер аҙ бөтәшкәс кенә яңы ғаилә ҡора.

Ҡыш осоронда сел ерҙең, дөрөҫөрәге, ҡарҙың, ярҙамына мохтаж. Һыуыҡ көндәрҙә был ҡош ботаҡтан ҡарға сума (ярҙан һыуға һикергән һымаҡ) һәм ҡар аҫтында оя һымаҡ ҡыуышлыҡ эшләп ала. Әлбиттә, ҡар аҫтында күпкә йылы. Әммә уның тәрәнлегенең кәмендә ун биш сантиметр булыуы мөһим. Сел ҡар аҫтында төрлө юлдар йыра. Тын алыу өсөн тишек уя. Ҡыуышлыҡ үтә йылып китһә, "мөрйәне" аса, һыуып китһә - яба. Сатлама һыуыҡ көндәрҙә асыҡ һауаға туҡланыр өсөн генә осоп сыға.

Тәү ҡарамаҡҡа ябай, әммә бик үҙенсәлекле ул сел исемле урман ҡошо.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Башҡорт дәүләт ҡурсаулығының төп ғилми хеҙмәткәре.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҠӘҘЕР - ХӨРМӘТТЕ ТАНЫУ

Маҡтау менән рәхмәт әйтеү араһында айырма ҙур. Рәхмәт әйтеү - ул ысын фактты күрһәтеү. Был комплимент та, әхлаҡи фекерләү ҙә түгел, ә кешенең аңлы рәүештә, көсөнөн килгәнде эшләүен таныу.

Маҡтауға ҡиммәттәрҙе баһалау ҙа инә. Был маҡтау менән ҡәҙер-хөрмәтте танып, рәхмәт әйтеү араһындағы төп айырма булып тора. Әгәр һин үҙеңә ярҙам иткән кешегә: "Бик яҡшы егет!" - тип әйтәһең икән, һинең үтенесеңде үтәмәһә, ул "бигүк яҡшы егет" булмаҫ ине, тигән мәғәнә һалына. Бала һиңә сәскәләр бүләк итһә, уға "Һин яҡшы малай" тип әйтмә. Улай тиһәң, кире осраҡта ул "насар" булыр ине, тигән кеүек аңлашыла. "Сәскәләр өсөн рәхмәт. Улар миңә бик оҡшаны", - тип әйтһәң, баланың шәхесенә баһа бирмәй, уның ҡылығын яҡшы таныуыңды аңғартырһың.

Өлкәндәр, йәштәр, бигерәк тә балалар, сөсөләнеп маҡтауға ҡарағанда, ҡәҙер-хөрмәтте танып, ысын күңелдән рәхмәт әйтеүҙе теләп ҡабул итә. Уларға үҙенең эргәһендәгеләрҙең тормошонда айырым бер урын биләүен белеү үтә мөһим. Улар үҙҙәренә шәхес итеп ҡарауҙарына, үҙҙәрен нисек бар, шулай ҡабул итеүҙәренә ынтыла.

Әгәр кешене һәләтенә ярашлы ҡәҙер итһәң, кеше үҙен индивидуум итеп ҡабул итеүҙәрен тояһаҡ. Маҡтау менән рәхмәт белдереү араһындағы айырма бик нескә булһа ла, ул үҙ-үҙенә ышанған шәхес булып формалашыуға ҙур йоғонто яһай. Әгәр кешегә һәр яғы килгән, ҡабатланмаҫ шәхес итеп тойҙороролоҡ итеп рәхмәт белдерелмәһә, маҡтау эҙләү башлана.

Беҙ бойондороҡлолоҡ өсөн ни тиклем ҡиммәт түләүебеҙҙе аңланыҡ. Нимә эшләргә тейешлегебеҙҙе тоябыҙ һәм беләбеҙ, ләкин ғаилә, дуҫтар һәм коллегалар хуплауынан мәхрүм ҡалырға ла теләмәйбеҙ. Беҙ азатлыҡ өсөн яҙа күреүҙән ҡурҡып, мөмкинлектәрҙе ҡулдан ысҡындырабыҙ. Беҙ бынан үҙебеҙ теләгән ваҡытта ҡотола алабыҙ. Шуға күрә тураһын әйтергә кәрәк: проблема беҙҙең үҙебеҙҙә.

Һинең төп бурысың булып физик һәм эмоциональ имелегең торорға тейеш. Әгәр үҙең ысынлап теләһәң, һиңә бер нәмә лә үҙ-үҙеңә ышаныс тәрбиәләргә ҡамасаулай алмаясаҡ. Ләкин имелегең өсөн бойондороҡлолоҡ, мутлыҡ, үҙ фекереңде белдермәй, һәр нәмә менән килешеп ҡарау, сағыштырыу һәм ярышыу кәрәк, тигән хаталы инаныуҙан арынмай тороп, һин шәхес булараҡ эш итә алмаясаҡһың. Тик аҡыл, физик, эмоциональ һәм рухи азатлыҡ өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләргә тәүәккәлләп кенә һин үҙ-үҙеңә ышанған кеше буласаҡһың.

Ҡоллоҡмо, әллә азатлыҡмы? Үҙең һайлайһың!

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

# ЙОҒОШЛОРАҠ...

**Тажзәхмәт инфекцияһы биш-ете йылдан һуң йоғошлораҡ, әммә уның эҙемтәләре кәмерәк буласаҡ, тип белдерҙе инфекционист Евгений Тимаков. Мәғлүм булыуынса, Бөйөк Британияла SARS-CoV-2 коронавирусының яңы мутацияһы табылған. Был штамм тиҙ тарала һәм халыҡтан тағы ла ныҡыраҡ һаҡлыҡ талап итә.**

Вирустың яңы штаммы, яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, ғәҙәттәгенән 70 процентҡа йоғошлораҡ булһа ла, уны үлем йәки госпитализация йәһәтенән хәүефлерәк тип әйтеп булмай. "Вирустар һәр саҡ үҙгәреп тора, коронавирус та шулай уҡ үҙгәрә. Әммә уның мутацияһы геномы үҙгәреүе йәһәтенән ул тиклем әһәмиәтле һәм асыҡ түгел. Шулай ҙа вирустың үҙенсәлеге үҙгәрә. Һәр хәлдә, вирусҡа хужаһын үлтермәй генә тышҡы мөхиттә йәшәргә кәрәк. Был уның тәү сираттағы бурысы. Йәғни бер ни тиклем ваҡыттан һуң, 5-7 йыл үткәс, коронавирус инфекцияһы үҙгәрәсәк. Ул тиҙерәк таралаcаҡ, йоғошлораҡ буласаҡ, шул уҡ ваҡытта еңелерәк үтәсәк, улар бик ҡурҡыныс булмаясаҡ", - ти инфекционист. Әлеге ваҡытта Бөйөк Британияла вирустың 70 процентҡа йоғошлораҡ булыуы билдәләнә, шул уҡ ваҡытта уның ауырыраҡ үтеүе теркәлмәй.

# СИРҘӘН ҺУҢ...

**22-се Өфө ашығыс медицина ярҙамы дауаханаһы табибы Рөстәм Ғәбиҙуллин коронавирус менән сирләп, дауаханала ятып сыҡҡан пациенттарға үҙенең кәңәштәрен бирә:**

"Дауахананан сыҡҡан ауырыу кешеләр физик йүнәлештә генә түгел, ә психологик ярҙамға ла бик мохтаждар, сөнки был яман зәхмәт менән сирләү - ярайһы етди генә психологик травма ул. Шуға ла мин ауырыу кисергәндәргә иң тәүҙә һәр бер дауахана, госпиталь янында ойошторолған реабилитация үҙәктәренә мөрәжәғәт итергә кәңәш бирер инем. Дауахананан сыҡҡандан һуңғы тәүге айҙа - саф һауала 15-20 минут буйына йәйәү йөрөү, ҡулаяҡтарҙы күтәреп, иртән еңелсә һәм һулыш күнегеүҙәре эшләү кәрәк. Был осор туҡланыуға ла мөһим иғтибар бирелергә тейеш: ауыр эшкәртелеүсе, айырыуса углеводтарға бай аҙыҡ-түлектән баш тартырға, йәшелсә һәм емешеләккә, еңел үҙләштерелеүсе аҡһымдарға өҫтөнлөк бирергә, тоҙ ҡулланыуҙы кәметергә кәрәк буласаҡ".



## 11 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10 "Сегодня вечером". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40, 0.25 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Солнечный круг". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Д/с Премьера. "Япония. Обратная сторона кимоно". [18+]
1.20, 3.05 Время покажет. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
0.40 Т/с "Рая знает". [12+]
2.25 Т/с "Путешествие к центру души". [12+]
4.41 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.30 Специальный репортаж. [12+]**
**11.45 М/ф "Нурбостан". [0+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**16.15 "Звездная гора новостей". [6+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Тайм-аут. [12+]**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**0.00 Х/ф "Петя по дороге в Царствие Небесное". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Женская сюита". [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 12 ЯНВАРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.20, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40, 0.25 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Солнечный круг". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Д/с Премьера. "Япония. Обратная сторона кимоно". [18+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
0.40 Т/с "Рая знает". [12+]
2.25 Т/с "Путешествие к центру души". [12+]
4.41 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 20.00, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Звездная гора новостей". [6+]**
**17.20 Хоккей. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Мусорная реформа. [12+]**
**21.00 По сути дела. [12+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Горячие новости". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Оль-ля-ля!" [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 13 ЯНВАРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.20, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40, 0.25 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Солнечный круг". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Д/с Премьера. "Япония. Обратная сторона кимоно". [18+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
0.40 Т/с "Рая знает". [12+]
2.25 Т/с "Путешествие к центру души". [12+]
4.41 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Звездная гора новостей". [6+]**
**16.30 Министерство правды.**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Новогодний маршрут". Огонек. [12+]**
**0.30 Т/с "Анна Герман". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Сумерки". [12+]**
**4.30 Д/ф "Каратау Шоңкары. Хәмит Яруллин". [6+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 14 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.20, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40, 0.25 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Солнечный круг". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Д/с Премьера. "Япония. Обратная сторона кимоно". [18+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
0.40 Т/с "Рая знает". [12+]
2.25 Т/с "Путешествие к центру души". [12+]
4.41 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.00, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Звездная гора новостей". [6+]**
**17.30 "Времечко".**
**18.20 Хоккей. "Барыс" /Нур-Султан/ - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Т/с "Анна Герман". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Люди на том берегу..." [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 15 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50, 2.55 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.45 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Новогодний маскарад на Первом. [16+]
23.10 Новогодняя ночь на Первом. [16+]
1.30 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 "Близкие люди". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 "Аншлаг. Старый Новый год". [16+]
0.40 Т/с "Рая знает". [12+]
2.30 Т/с "Путешествие к центру души". [12+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/с "Мое советское". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**12.30 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Звездная гора новостей". [6+]**
**17.30, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Т/с "Анна Герман". [12+]**
**2.15 Спектакль "Кавардак Forever". [12+]**
**4.15 Әлләсе... [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## 16 ЯНВАРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Анна Самохина. "Запомните меня молодой и красивой". [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Угадай мелодию. [12+]
15.05 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
16.45 "Честное слово". К 85-летию Раймонда Паулса. [12+]
17.30 Д/ф "Миллион алых роз". К 85-летию Раймонда Паулса. [12+]
18.25 К 85-летию Раймонда Паулса. Юбилейный вечер. [12+]
21.00 Время.
21.20 Премьера. "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Х/ф Премьера. "Спасти или погибнуть". [16+]
1.10 Х/ф "Исчезающая точка". [18+]
2.45 Модный приговор. [6+]
3.35 Давай поженимся! [16+]
4.15 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 "Сто к одному".
11.00 Вести.
11.15 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
12.20 "Доктор Мясников". [12+]
13.20 Т/с "Девять жизней". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Когда меня не станет". [12+]
1.05 Х/ф "Террор любовью". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 19.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Звездная гора новостей". [6+]**
**10.45 Х/ф "Кускар". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**12.30 Д/ф "Человек земли". [12+]**
**13.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**16.50 Хоккей. "Металлург" (Магнитогорск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Ради добра. [12+]**
**20.45 Х/ф "Внеклассный урок". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.00 Т/с "Анна Герман". [12+]**
**2.30 Спектакль "Земляки". [12+]**
**4.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

## 17 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.10 Х/ф "Цирк". Кино в цвете. [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Цирк". [0+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф Премьера. "Кремль-9. "Гараж особого назначения". [16+]
15.15 Д/ф Премьера. "Песняры" - молодость моя". К 80-летию Владимира Мулявина. [16+]
17.30 Юбилей ансамбля "Ариэль". Лев Лещенко, "Самоцветы", "Ялла", "Песняры" и другие. [12+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 Концерт Максима Галкина.[12+]
23.25 Т/с Премьера сезона. "Метод-2". [18+]
0.25 Наедине со всеми. [16+]
1.50 Модный приговор. [6+]
2.40 Давай поженимся! [16+]
3.20 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.30, 1.30 Х/ф "Дорогая моя доченька". [12+]
6.00, 3.15 Х/ф "Улыбнись, когда плачут звёзды". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Устами младенца".
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 "Сто к одному".
11.00 "Большая переделка".
12.00 "Парад юмора". [16+]
13.20 Т/с "Девять жизней". [12+]
18.00 "Танцы со Звёздами". Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Сулпылар". [0+]**
**12.00 "Гора новостей". [6+]**
**12.15 "АйТека!" [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башкорттар. [0+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 3.45 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Х/ф "13 раунд". [12+]**
**18.45 Лидеры региона. [12+]**
**19.15 Д/ф "Сосланбек Тавасиев. Герой своего времени". [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Т/с "Анна Герман". [12+]**
**1.45 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]**
**3.30 История одного села. [12+]**
**4.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Ғинуар (Йомадиәл әүүәл, Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (27) дүшәмбе | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:42 | 17:12 | 18:42 |
| 12 (28) шишәмбе | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:43 | 17:13 | 18:43 |
| 13 (29) шаршамбы | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:45 | 17:15 | 18:45 |
| 14 (1) кесе йома | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:47 | 17:17 | 18:47 |
| 15 (2) йома | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:48 | 17:18 | 18:48 |
| 16 (3) шәмбе | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:50 | 17:20 | 18:50 |
| 17 (4) йәкшәмбе | 8:00 | 9:00 | 13:30 | 15:52 | 17:22 | 18:52 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ВАҠЫТ - УЛ ТУҠТАЛМАҪ БЕР КАРАП, ЕЛДЕРӘ ГЕЛ АЛҒА УЛ ҠАРАП




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнә.

**1-се һанадағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тәгәс. Тәбиғәт. Надир. Фәһем. Өйрәк. Әсеүташ. Мухомор. Әхүәл. Әхтәри. Емтек. Ҡаҡ. Һалма. Оҫта. Трюм. Рәүеш. Ион. Ом. Ростова. Ҡауын. Ғарипов. Салауат.

**Вертикаль буйынса:** Ямалетдин. Фәхретдин. Мушкетер. Тәпе. Осаҫас. Мәрәй. Табан. Ҡамыт. Орбита. Дәүләтколов. Манто. Сатыр. Өшә. Һарыҡ. Хата. Әрем. Көл. Аршын.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10 ғинуар "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 11.00, 13.00 6+

**15 ғинуар "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 12+

**16 ғинуар "Коҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 18.00 12+

**17 ғинуар "Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия. 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**16 ғинуар "Ночевала тучка золотая"** 18.00 12+

**17 ғинуар "Синяя птица"** әкиәт. 12.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**11, 12, 13 ғинуар "Что такое Новый Год?"** (В. Щербакова), иң кескәйҙәр өсөн Яңы йыл шыршыһы. 12.00, 14.00, 16.00 0+

**16-17 ғинуар "Морозко"** 12.00, 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 ғинуар "Үткәндәрҙе һағынып - 2"** 50-90 йылдар хиттары. 6+

**"Праздничная токката"** Э. Хәйретдинова концерты (орган). 6+

## БР Милли музейы

**31 ғинуарға тиклем "Йәм-йәшел шыршы энәләрендә ялтыр мөғжизә..."** Яңы йыл ретро уйынсыҡтары күргәҙмәһе.

**8-14 ғинуар "Ҡышҡы урманда Яңы йыл мажаралары".**

**12 ғинуар** Инстаграм социаль селтәрендә **"Ҡыш бабай йомаҡтары".**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ



# ТЕАТР...
## яңыртылған бинаһын асты

**Иҫке йылдың һуңғы көндәрен һанағанда, ниһайәт, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры яңыртылғандан һуң тәүге тамашасыларына ишектәрен асты. Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, мәҙәниәт һәм сәнғәт әһелдәре, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре театр хеҙмәткәрҙәренең шатлығын уртаҡлашып, ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе.**

Тамашасылар был ваҡиғаны бер йылдан артыҡ түҙемһеҙләнеп көттө, үҙенең 100 йыллыҡ юбилейы алдынан ғына төҙәтеү-яңыртыу эштәренә ябылған театр был тарихи датаны ла Башҡорт опера һәм балет театры сәхнәһендә билдәләргә мәжбүр булғайны. Былтырғы йыл дауамында йә бәләкәй сәхнә өсөн ижад ителгән спектаклдәр уйнарға, йә Өфөләге башҡа сәхнәләрҙә сығыш яһарға тура килде уларға. Шуға үҙ сәхнәһен һағынған артистар тантанаға махсус рәүештә "Зөбәрҙәт ҡала тылсымсыһы" әкиәте буйынса яҙылған театрлаштырылған тамаша әҙерләгән. Уның сценарий авторы Дамир Йосопов, ҡуйыусы режиссеры Илсур Ҡаҙаҡбаев, рәссамы Альберт Нестеров. Ҡыйыу актерҙарға реконструкция һәм пандемия образдарындағы афәттәргә ҡаршы алышырға тура килде, күпте күргән 100-сө сезон (Артур Ҡунаҡбаев) йәш һәм өмөтлө 101-се сезонға (Айнур Ситдиҡов) Театр мөхите, Ижад, Сәм, Тамашасы һөйөүе һәм башҡа театр өсөн иң мөһим төшөнсәләр йәшерелгән һауыттарҙы тапшырҙы.

Тантана барышында республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова театрҙың ижади һәм техник хеҙмәткәрҙәренә лайыҡлы наградалар тапшырҙы. Театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахмановҡа "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектакле өсөн Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы бирелде. Артабан тамашасылар М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия театры сәхнәһендә яңғыраған йыр-моң иленә сумды. Концерт программаһының режиссеры Хәрмәтулла Үтәшев, сценарийын Динара Ҡәйүмова яҙған. Ҙур сәхнәне асыу тантанаһы Нурия Ирсаева һәм Фидан Ғафаровтың билдәле дуэты менән тамамланды. Әйткәндәй, театр оркестры шулай уҡ Бәләкәй сәхнәлә лә "Йөрәктәр ҡушылды..." концертын ҡуйҙы, унда башҡорт композиторҙарының театр өсөн яҙылған йырҙары яңғыраны. М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры тоғро тамашасыларын ғинуарҙан Ҙур сәхнәлә ҡаршылай башланы.

**Әйткәндәй, Яңы йыл алдынан Башҡорт академия драма театрында Николай Крашенинниковтың "Әмилә" романы буйынса пластик спектаклдең премьераһы булды.** Николай Крашенинников (1878-1941) - Башҡортостан һәм башҡорт халҡы тураһында ҙур һөйөү менән ижад иткән рус яҙыусыһы. "Әмилә" романы рус дворян мөхитендә тол ҡалған балаһыҙ профессор ҡатыны тәрбиәләп үҫтергән етем башҡорт ҡыҙының яҙмышы тураһында. Инсценировка авторы - Азалия Балғазина, художество етәксеһе - Айрат Абушахманов, пластика буйынса режиссер - Алина Мостаева. Художество һәм музыкаль яҡтан биҙәү өсөн Санкт-Петербургтан сценограф, костюмдар буйынса рәссам Екатерина Малинина һәм композитор, музыкант Олег Гудачёв саҡырылған. Тарихты пластика, бейеү һәм музыка телендә бәйән иткән спектаклдә башҡорт, рус, француз телдәрендә лә телмәр яңғырай. Башҡортсаға Динара Ҡәйүмова тәржемә иткән.

✓ Һәйкәлдең эсендә бушлыҡ, ундағы температура ҡышын һыуына, йәйен йылып быулана, тыштан да ел-ямғыр-ҡар һәм башҡалар суйыҡнды тутыҡтырған. Һәйкәлдең тотоп торған трост һәм башҡа тимер нығытмалар ҙа серей.



КӨНАУАЗ

**Башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаевтың һәйкәлен реставрациялау тураһындағы хәбәрҙәр һуңғы ваҡытта интернет киңлектәрен иңләй. Үҙәктән бирелгән мәғлүмәттәргә һәр кем үҙ фекерен һәм фаразын өҫтәй-өҫтәй, был яңылыҡ ниндәйҙер хәүеф һымағыраҡ ҡабул ителә башланы. Шунлыҡтан, барыһын да ошо эш менән шөғөлләнеүсе белгестәр ауыҙынан ишетеү өсөн Башҡортостан Республикаһы Рәссамдар союзы рәйесе, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Хатип Сәрүәр улы ФАЗЫЛОВ һәм Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, скульптор Хәниф Мирзаһит улы ХӘБИБРАХМАНОВ менән бәйләнешкә инеп, уларға халыҡты борсоған һорауҙарҙы бирҙек.**

# САЛАУАТ ҺӘЙКӘЛЕ...

## беҙҙе ташлап китмәйәсәк



**Хөрмәтле рәссамдар, скульпторҙар, һеҙ баш ҡалалағы Аҡмулла, Заһир Исмәғилев, Шайморатов, Туҡай һәм башҡа һәйкәлдәрҙе, скульптураларҙы эшләгән, ҡуйған һәм урынлаштырыу эштәрен ойошторған кешеләр. Йәғни, һәйкәлдәр мәсьәләһен яҡындан өйрәнгән белгестәр. Әйтегеҙ әле, Салауат һәйкәле бөгөн ниндәй төҙөкләндереүгә мохтаж?**

**Хатип Фазылов:** Баш ҡалабыҙҙың күрке, тотош милләттең изге символы булған һәйкәл 1964 йылдан алып билдәле урынын биләй. Ул суйындан ҡойолған. Ярты быуаттан ашыу асыҡ һауа аҫтында торған есемдең боҙолоуы тәбиғи. Һәйкәлдең эсендә бушлыҡ, ундағы температура ҡышын һыуына, йәйен йылып быулана, тыштан да ел-ямғыр-ҡар һәм башҡалар суйынды тутыҡтырған. Шулай уҡ эстән һәйкәлдең төрлө урындарын тотоп торған трост һәм башҡа тимер нығытмалар ҙа серей. Тыш яҡтан был үҙгәрештәр артыҡ һиҙелмәһә лә, һәйкәл инде янына килгән кешеләр өсөн ҡурҡыныс тыуҙыра ала. Уның ниндәйҙер бер өлөшө бүленеп килеп төшөргә лә мөмкин. Был хәүеф ҡоро фараз ғына түгел, уның тышын йөшелгә буяп ҡуйыу ҙа шул эстәге реакцияны (тутты) күҙ ҡарашынан ябып тороу өсөн башҡарылғайны. Һәйкәлдең хәлен махсус белгестәр ультразвук һәм башҡа заман ҡорамалдары аша тикшереп, яҡын арала төҙөкләндерергә тигән ҡарар сығарҙы. Һәм хатта ҡала хакимиәтенә штраф та сәпәлде, буғай.

**Һәйкәлде йыл ярымға тиклем ваҡытҡа алып ҡуйыуҙары ихтимал, тигән хәбәр халыҡ араһында ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙырҙы. Уны ысынлап шулай оҙаҡҡа алып китерҙәр микән?**

**Хәниф Хәбибрахманов:** Әле бер ерҙә лә һәйкәлебеҙҙе урынынан алып китәсәктәр һәм тап йыл ярымға тигән ныҡлы мәғлүмәт юҡ. Шулай булыуы ихтимал, тип кенә әйтелде. Һәйкәлгә ремонт ҡына түгел, ә уны тулыһынса янынан ҡойоу кәрәк булыр. Ваҡытында Хрущев уны ҡойоуға бронза материалын бирҙертмәй, бронза стратегик сырье булып, ныҡ ҡиммәт иҫәпләнә. Хәҙер иһә һәйкәлде бронзанан ҡойоп ҡуйыу тураһында һүҙ алып барыла. Ул саҡта тағы ла ике йөҙ йылдан ашыу ҙа бирешмәй тора аласаҡ.

Был мәсьәлә әле хәл итеү өҫтөндә, әммә һәйкәлде урынынан алып китеп йөрөмәйенсә лә эшләү юлдары бар. Махсус комиссия шул ысулды ҡулланыу тураһында уйлаша ла инде. Дүрт-биш ай эсендә конструкторҙар эш дәүмәлен һанап сығарып, тышҡы һынын күсереп алып ҡына ҡоя һәм урынын көпләп тороп, бер йәй эсендә лә яңыһын урынлаштыра ала. Һәм бронзаны ситтән килтергәндә беҙҙең Черниковка заводында ла ҡойорға була.

Һәйкәлдең нигеҙен дә ҡарарға кәрәк әле бер ҡуҙғатҡанда. Тау түбәһен эстән яҙғы һыуҙар йырғылаған, йомшаҡ таш ҡатламы ултырған. Уларҙы ла нығытыу өсөн, бәлки, бетон торбалар ултыртырҙар, бәлки, башҡа нығытма материалдары ҡулланылыр. Был да ваҡытты аласаҡ.

**Мәскәү тарафтарына юлланып, батырыбыҙ һыны ҡайҙалыр юғалып, онотолоп ҡалып ҡуймаҫмы, тип хәүефләнә халыҡ...**

**Хатип Фазылов:** Хатта Мәскәүгә ебәрелгән хәлдә лә ул бит бөтөн ҡәтғи документтары менән мисәтләнеп, һаҡ аҫтында алып кителәсәк. Улар- ҙан тыш, халыҡ вәкилдәре лә күҙәтәсәк был эште. Республиканың, тотош милләттең символы булған һәйкәл бер нисек тә "юғала" алмай. Һәм, бая әйткәнсә, беҙ һәйкәлдең яңыны килгәнсе, иҫкеһен урынында тотоу яҡлы. Шом таратыусы ҡотҡо хәбәрҙәр нигеҙһеҙ. Күреүгеҙ, үҙебеҙҙә ҡойолһа ла, башҡа ерҙә яңыртылһа ла, Салауат үҙ урынында бөйөк һәм мөһабәт булып ултырыуын дауам итәсәк.

**Һәйкәлдең тышҡы күренешенә бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр индерелмәйәсәкме? Мәҫәлән, батырҙың йөҙөн үҙгәртеү, алҡаһын сисеү йәки атын икенсерәк итеп ҡуйыу кеүек...**

**Хәниф Хәбибрахманов:** Бер ниндәй ҙә үҙгәреш булмаясаҡ. Һәйкәл бит автор эше, уны бер кемдең дә үҙгәртергә хоҡуғы юҡ. Яңынан ҡойолған хәлдә лә уның бары материалы ғына яҡшыраҡтан буласаҡ - шул ғына.

**Салауат Юлаев һәйкәле һеҙҙең өсөн ниндәй әһәмиәткә эйә?**

**Хатип Фазылов:** Салауат һәйкәле урынлашҡан ер баш ҡалабыҙҙың йөрәге. Ә батыр исеме беҙҙең ғорурлыҡ.

**Хәниф Хәбибрахманов:** Салауатһыҙ - Өфө, Өфөһөҙ Салауат юҡ. Салауат батырһыҙ башҡорт халҡы юҡ. Борсолмағыҙ, һәйкәл беҙҙе ташлап китмәйәсәк.

**Әйткәндәй, Волгоградтың Мамай ҡурғанындағы "Ватан-Әсә саҡыра" ("Родина-мать зовет") һәйкәлен Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына ҡарата реставрациялағайнылар. 52 йыл торған ҡомартҡыға ысынлап "ярҙам" кәрәк була. Яңыртыу һәйкәлде урынынан ҡуҙғатмай ғына үткәрелә. Ул бары төҙөлөш ситлеге менән уратып алына, йәғни ваҡытлыса ябыла. 2017 йылда эштәр һәйкәлдең эске өлөшөндә башлана, канаттары алмаштырыла. 2019 йылдың сентябрендә инде Ватан-Әсәнең йөҙө, һылыс тотҡан уң ҡулы, башы һәм күкрәк өлөшө рәтләнеп өлгөрә. Унда 180 деффект табылып, 14 саҡрым сатнаған ыҙандар һылана. Ярыҡтар башта кислота менән эшкәртелеп, унан һыу менән сайылып, грунтланып, иҙелмә менән тултырыла. Аҙаҡ тишеп пакерҙар ҡуйыла. Иң ахыры тигеҙләнә һәм финиш ҡатламы һалына. Бик ҡиммәтле һәм сифатлы немец технологияһы буйынса эшләнә ул. Еңеү көнөнә байрам символы булған һәйкәл яңырып, яҡтырып, халыҡ алдына баҫа.**

Беҙҙең Салауат Юлаев һәйкәленең дә ошондайыраҡ ысулда яңыртылыуын, йәғни беҙҙе ташлап китеп йөрөмәүен теләр инек.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**һөйләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠОЛАҒЫҢДЫ ҠЫҘҒАНЫП,

## башыңды киҫтермә

Яҡшының көйөгө - баш яулығы кипкәнсе, ямандың көйөгө - башы ерғә еткәнсе.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡартайыу сәнғәте шунда: йәштәргә кәртә түгел, таяныс бул; дошманы түгел, уҡытыусыһы бул; вайымһыҙ түгел, аңлаусы бул.

**(А. Моруа).**

Аҡыллы кеше ғүмеренең икенсе өлөшөн беренсе өлөшөндәге яңылыш ғәҙәттәр һәм хата ҡараштар менән көрәшеүгә арнай.

**(Д. Свифт).**

Әгәр кешеләрҙең бар теләктәре лә тормошҡа ашһа, Ер шары ысын тамуҡҡа әйләнер ине.

**(П. Буаст).**

Насар идара ителгән ил өсөн беренсе ҡотолоу сараһы - инфляция, икенсеһе - һуғыш. Икеһе лә ваҡытлыса сәскә атыу һәм ваҡытлыса һәләкәт алып килә.

**(Э. Хемингуэй).**

Бөйөк аҡыл эйәһе власть биләгәндә халыҡ уның барлығын һиҙмәй ҙә; бик үк аҡыллы булмаған кеше идара иткәндә халыҡ уны хөрмәт итә һәм маҡтай; ахмаҡ кеше власть биләгәндә халыҡ унан ҡурҡа; тағы ла ахмағыраҡ әҙәм идара иткәндә халыҡ уны күрә алмай.

**(Лао-цзы).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Йәләлетдин Руми суфыйсылыҡтың ҙур белгесе булған. Уға кешеләр гел генә аҡыллы һүҙ, кәңәш артынан килә торған. Бер ваҡыт уға балалы ҡатын килгән дә: "Мин бөтәһен дә эшләнем, тик улым тыңлашмай, күп итеп шәкәр ашай. Зинһар, быны зарарлы икәнен уға аңлатығыҙ. Ул һеҙҙе тыңлаясаҡ. Ул һеҙҙе ихтирам итә", - тигән. Руми балаға ҡараған да, өс аҙнанан килергә ҡушҡан. Ҡатын аптырашта ҡалған. Шулай ҙа өс аҙна үткәс тағы килгән. Руми балаға ҡараған да, тағы ла өс аҙнанан килергә ҡушҡан. Әсә ярһып быныҡ сәбәбен һораған, тик Руми әйткән һүҙҙәрен ҡабатлаған ғына. Өсөнсө тапҡыр килгәндә, Руми малайға: "Улым, кәңәшемде тыңла, шәкәрҙе күп ашама, был һаулыҡ өсөн бик зарарлы", - тигән. "Ярай, һеҙ кәңәш иткәс, бүтән улай эшләмәйәсәкмен", - тип яуап ҡайтарған малай. Һуңыраҡ әсә улына урамда көтөп торога ҡушҡан да, Румиҙан ни өсөн уның быны беренсе килгәндә үк эшләмәүен һораған. Йәләлетдин ҡатынға ысынын төшөндөрөп биргән: "Мин үҙем дә шәкәр яратам, кәңәш бирер алдынан, үҙемә был көсһөҙлөктән арынырға кәрәк. Тәүҙә өс аҙна етәрлек булыр тип уйлағайным, ләкин..."**

**Ысын белгес кешегә үҙе үтмәгәндә өйрәтмәҫ шул."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәррирәт: Сәриә ГАРИПОВА, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3400
Заказ - 02/01